ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 июль (майай) 2023

№26 (1068)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Көс бар - аҡыл кәрәкмәй**



3

**Олатай-өләсәйҙәрҙең...**

яуаплы осоро



7

**Балаларыбыҙға биргән тәрбиә менән...**

ейән-ейәнсәрҙәребеҙ тәрбиәһендә лә ҡатнашабыҙ булып сыға



8-9

**Башҡорттарҙа ҡымыҙ кәсебе**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар!** Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, 2023 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән бергә булыуығыҙҙы баһалайбыҙ, рәхмәт әйтәбеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар булһа, әйтегеҙ: улар 15 июлгә тиклем яҙылып, августан алдыра башлай ала - 5 айға яҙылыу хаҡы 665 һум 50 тин. Шулай уҡ ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда 771 һум 12 тингә яҙылырға мөмкин. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Атайығыҙҙың тәрбиә һабаҡтарын тормошта ҡулланаһығыҙмы?

***Илдар ҺИҘИӘТОВ, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, оператив хирургия кафедраһы мөдире:*** Башҡортостанда ғына түгел, ил кимәлендә легендар шәхескә әйләнгән хирург, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, педагог, медицина фәндәре кандидаты, республикала иң беренсе булып хоспис асыусы атайым Ишмырҙа Хәйернур улы минең өсөн бөтә йәһәттән дә өлгө булды. Ике һеңлем янында берҙән-бер ир бала булараҡ, әлбиттә, мин күберәк атайыма тартыла инем. Шуға ла минең алда һөнәр һайлау мәсьәләһе торманы ла, тип әйтергә кәрәк, сөнки атайым менән әсәйемдең хеҙмәт юлын дауам итәсәгемдә һис бер ниндәй шик тигән нәмә булманы. Мин генә түгел, һеңләләрем Гөлнур менән Гөлнәзирә лә ғаилә династияһын уңышлы дауам итәләр.

Мин мәктәптә уҡып йөрөгән йылдарҙа уҡ әле атайым "Әйҙә, улым, һиңә быларҙы күрергә, өйрәнә торорға кәрәк", тип, мине эшләгән урыны - дауаханаға үҙе менән алып китә башланы һәм миндә был ғорурлыҡ тойғоһо тыуҙыра ине: йәнәһе, бына мин дә өлкәндәр менән бер ҡатар сирлеләргә ярҙам итә аласаҡмын, тигән уй, табип һөнәре серҙәренә йәлеп ителеүем, атайымдың мине өлкән кешеләй күреп, ышаныс белдереүе, хатта операция барышын да ҡарап торорға рөхсәт итеүе күңелемде үҫтерә, тиҙерәк мәктәп һәм институт тамамлап, ысын табип, атайым кеүек хирург булғым килә ине. Ысынлап та, атайым һабаҡтары һөнәрем буйынса эшләй башлағас та, әле лә ныҡ ярҙам итә миңә. Яуаплы, ҡатмарлы операция ваҡыттарында ул хәҙер ҙә минең эргәлә тора, һәр бер хәрәкәтемде күҙ яҙҙырмай ҡарап, ҡурсалай кеүек тойола. Нимә генә тимә, хирург булараҡ, атайымдың тәүәккәллеге, теге йәки был мәсьәлә буйынса тиҙ, дөрөҫ ҡарарға килә белеүе миндә лә үҙемә ышаныс тойғоһон нығыта ине, сөнки беҙ унын менән бер-беребеҙҙе һүҙһеҙ ҙә аңлай инек.

Эштә теүәллек, үҙ өҫтөнә алған бурысынды аҙағынаса алып барып еткереү, пациенттарың яҙмышы өсөн яуаплылыҡ - тап атайымдан "йоғоп ҡалған" иң яҡшы сифаттар, тип һис бер маҡтаныуһыҙ әйтә алам, сөнки был йәһәттән һүҙ минең турала түгел, ә атайым хаҡында бара бит. Унын һайлаған һөнәренә йәне-тәне менән бирелгәнлеге, ауырыу ғүмере өсөн яуаплылығы, легендар фиҙаҡәрлеге хаҡында ошо бер хәл дә бик асыҡ һөйләй: Өфөлә эшләгән йылдарында шулай тура эсәк яман шешенән үлем өҫтөндә ятҡан һәм башҡа табиптар өмөтһөҙ тип ҡул һелтәгән бер йәш ҡатынды 12 сәғәт буйына операция өҫтәле янынан китмәйенсә дауалап, ҡотҡарып ҡала атайым. Был һөнәрҙе һайлаған икәнһең, тимәк, ҡулыңдан килмәҫтәйҙе лә эшләп ҡарарға, хатта өмөтһөҙ тигән ауырыуҙы ла аяҡҡа баҫтырырға тырышырға тейешһең, сөнки был юлды һин үҙең һайлағанһың, ә сирлеләр һиңә ышана, тип өйрәтә ине атайым. Атайымдың, хаҡлы ялға сығыуына ҡарамаҫтан, бөтөн тормошон ярҙамға мохтаж кешеләргә арнауына тағы бер миҫал итеп, унын тыуған районы Әбйәлилдә республикала беренсе булып хоспис асыуын әйтергә кәрәк. Шул йылдарҙа был хаҡта матбуғатта "Доктор Ишмырҙа Һиҙиәтовтың гражданлыҡ ҡаһарманлығы" тип яҙҙылар. Ул кешеләрҙе, тәбиғәтте, ғөмүмән, тормошто яратты. Ауылға ҡайтып йәшәй башлағас, баҡса үҫтерҙе: алмағасы, сейәләре, сәскәләре йыл да гөрләп сәскә атып ултырҙы. Мин дә, атайым кеүек, тәбиғәттә булырға, балыҡ ҡармаҡларға, тауҙар, урмандар буйлап гиҙергә яратам. Табип халҡына ғына түгел, ә һәр кешегә күберәк тәбиғәттә булыу ял, ләззәт өсөн генә түгел, ә атайым әйтмешләй, үҙ-үҙең менән яңғыҙ ҡалып, көс һәм дәрт туплау, уйҙарыңды тәртипкә килтереү, маҡсаттарыңды барлау, артабанғы эш һәм бурыстарыңды күҙҙән үткәреү өсөн кәрәк. Мин шулай эшләйем дә, сөнки мине иртәгә ышаныс менән күҙ төбәп ярҙамға мохтаждар көтә...

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТОРАТАУҒА АРТЫЛ...

## баҫҡыс буйлап



**Мәғлүм булыуынса, Ишембай районындағы Торатау тәбиғәт ҡомартҡыһы ғына түгел. Ул башҡорт халҡы өсөн тарихи объект булараҡ та бик әһәмиәтле. Сөнки был тау халҡыбыҙҙың боронғо тарихы менән тығыҙ бәйләнгән.**

Торатау 1965 йылдан алып тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын йөрөтә һәм дәүләт тарафынан һаҡлана. Унда Башҡортостандың Ҡыҙыл китабынан үҫемлектәрҙең 16 төрө үҫә, шуларҙың һигеҙе - Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабынан. Кешеләр тауға менгәндә был үҫентеләр тапала һәм уларҙың һәләк булыу ихтималлығы ҙур ине. Шиханды, ундағы флораны, фаунаны һаҡлау маҡсатында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән тауға күтәрелеү өсөн хәүефһеҙ баҫҡыс төҙөлдө, экоһуҡмаҡ һалынды.

"Беҙ Торатау шиханына баҫҡысты астыҡ", - тип яҙҙы республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында һәм республиканың "Торатау" геопаркы биләмәһен артабан үҫтереү буйынса ҙур пландары булыуын билдәләне. Экоһуҡмаҡтың оҙонлоғо - 412 метрҙан ашыу, бөтәһе 697 баҫҡыс. Баҫҡысты төҙөү өсөн 75 тонна металл ҡулланылған. Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, туристар өсөн тәбиғәт ҡомартҡыларын асып, тирә-яҡ мөхиткә зыян килтермәү, бай үҫемлек һәм хайуандар донъяһын һаҡлау өсөн барыһын да эшләргә кәрәк. "Баҫҡыс үҙенсәлекле флораны һәм фаунаны кеше йоғонтоһонан һаҡларға мөмкинлек бирә. Мин Башҡортостан халҡынан һәм ҡунаҡтарынан тәбиғәткә һаҡсыл ҡарауҙарын һорайым. Барыһын да ғәжәйеп гүзәл төбәгебеҙгә саҡырам", - тип өҫтәне Радий Хәбиров.

...Көн менән төн тигеҙләшкән көндө йыл һайын ғаилә менән Торатауға менергә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Быйыл да барырға насип булды. Быға тиклемгеләренән айырмалы, менеп төшөүгә 2 сәғәт кенә ваҡыт китте. Экобаҫҡыстан күтәрелеү бик уңайлы. Туристар туҡтап ял итеп алһын һәм тәбиғәткә ҡарап һоҡланһын өсөн эскәмйәләр ҡуйылған. Ямғыр һәм елдән ышыҡланыр урындар ҙа бар. Һуҡмаҡ ярайһы киң генә. Менеп төшөүселәр бер-береһенә ҡамасауламай. Кеше бик күп булыуға ҡарамаҫтан, тығын да юҡ. Ололар ҙа, бәләкәй балалар ҙа бер ауырлыҡһыҙ күтәрелә ала. Экобаҫҡысҡа тиклемге юлда ла уңайлыҡтар булдырылған, ял итеп алырға эскәмйәләр урынлаштырылған.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

12+

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАШҠОРТ АТЫ ҺӘМ...




**Башҡортостан Башлығы указы менән республикала "Башҡорт тоҡомло аттарҙы өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү институты" автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма булдырыла.**

Документ хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Ойоштороусы итеп ауыл хужалығы, мәғариф һәм мәҙәниәт министрлыҡтары тәғәйенләнә. Указдың үтәлешен контролдә тотоу Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Илшат Фәзрахмановҡа йөкмәтелә.

Әйткәндәй, Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров 11-13 августа Баймаҡ районында башҡорт тоҡомло аттарҙың "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивале ойоштороулоуын хәбәр итте. Уның һуҙҙәренсә, Татарстан, Тыва, Чечня, Дағстан, Ҡаҙағстан, Төркиә, Әзербайжан, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән йылҡысылыҡ буйынса белгестәр килә. Урал аръяғы хакимиәттәре башлыҡтарына халыҡ-ара сараға әҙерлекте әүҙемләштереү бурысы йөкмәтелгән. "Урал аръяғы райондарының хакимиәт башлыҡтарынан ошо фестивалдә әүҙем ҡатнашыуҙарын һорайым. Һыбайлыларҙың костюмлаштырылған төркөмөн әҙерләгеҙ. Асылда, был Баймаҡтың ғына түгел, ә тотош Урал аръяғы фестивале", - тине Радий Хәбиров.

Хәбәр ителгәнсә, фестивалдең мәҙәни-спорт программаһында "Ылаҡ", "Тай-тулаҡ", уҡ атыу һәм башҡа ярыштар ойоштороласаҡ. Ә аттар парадында Башҡортостан райондарынан 350 һыбайлы ҡатнаша. "Башҡорт аты" ҡунаҡтары өсөн "Оҫталар ҡалаһы", милли ризыҡтар фудкорты, "Ҡымыҙфест" фестивале һәм "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" проекты дипломанттарының сауҙа майҙансығы эшләй. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, беренсе фестиваль былтыр июль аҙағында Баймаҡ районы биләмәһендә уҙғайны.

# МӘКТӘПТӘ - ЯҢЫ ФӘН



**2024 йылдың 1 сентябренән Рәсәй мәктәптәрендә "Хәүефһеҙлек нигеҙҙәре һәм Тыуған илде һаҡлау" тигән фән индерелә.**

Был хаҡта Дәүләт Думаһында "Мәктәп программаһында ОБЖ һәм НВП" темаһы буйынса түңәрәк өҫтәлдә Рәсәй Мәғариф министрлығының Дөйөм белем биреү өлкәһендә дәүләт сәйәсәте һәм идара итеү департаменты директоры урынбаҫары Анна Тимофеева хәбәр итте. "Яңы уҡыу федераль программаһын төҙөү өсөн Оборона министрлығы, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы вәкилдәренән торған эшсе төркөм ойоштороласаҡ, сөнки беҙ был эштең ни тиклем мөһим һәм ҡатмарлы икәнен аңлайбыҙ", - тине чиновник.

Бынан алда Башҡортостан мәктәптәрендә башланғыс хәрби әҙерлек курсын дәрестән тыш уҡыта башлауҙары мөмкин, тип хәбәр ителгәйне инде.

СӘХИФӘНӘН

# ӘСӘМ ТЕЛЕН ӨЙРӘНӘМ!



**Әсәйем - башҡорт, ә атайым - урыҫ. Бәләкәй саҡта башҡорт телмәрен мин уны аңламауыма асыуланған ҡартатайымдан ғына ишеттем. Ә ни өсөн миңә башҡорт теле кәрәклеген аңламаным, бөтәһе лә урыҫ телендә һөйләшә лә баһа, тип уйланым.**

Олоғая килә, балаларым булғас, мәҙәниәтемдә, телемдә белмәү оят икәнен аңланым. Туғандарымдың нимә тураһында һөйләшкәнен аңламау ысынлап та оят ине. Йөҙөмдәге милли һыҙаттарҙы күреп, туған телдә өндәшеүселәр аптырай торғайны: "Һин башҡорт йәки татар ҙа инде. Ниңә беҙ әйткәнде аңламайһың?"

Бөгөн мин башҡортса аңлайым, хатта аҙыраҡ һөйләшәм дә. Барыһы ла былтыр сентябрҙә, 21-се лицейҙа уҡыған улымдың ата-әсәләр йыйылышына Ләлә Хафиз ҡыҙы килгәс башланды. Ул ата-әсәләр өсөн бушлай башҡорт теле курстары асылыу тураһында һөйләне. Уҡытыусының һөйкөмлөлөгө һәм унның ғәҙәти булмаған методикаһы мине хайран ҡалдырҙы. Телде өйрәнергә теләк барлыҡҡа килде. Өҫтәүенә, курс тураһында һөйләгәс, ирем дә уҡырға барасағын әйтте. Һәр шәмбе бер партала ултырып уҡыу икеләтә ҡыҙыҡ булды.

Ләлә Хафиз ҡыҙы "Тәүҙә һүҙ булған" тип һәр ваҡыт ҡабатлай һәм беҙҙе үҙ-ара һөйләшергә, төрлө ваҡиғаларҙы һөйләргә өйрәтә. Шуныһы ғәжәп: беҙ төпкөл аңыбыҙҙағы элек ишеткән һәм иҫебеҙҙә ҡалған һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөп, әңгәмә ҡорабыҙ. Төркөмдә урыҫтар күп һәм мин уларҙың һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеүенән көнләшәм!

Беҙҙең төркөмдә төрлө йәштәге һәм милләтле кешеләр уҡый. Башҡорт телен кемдер эш өсөн, ҡайһылары үҙҙәре өсөн генә өйрәнә. Һәм мин ысынтылап башҡорт теленә ғашиҡ булдым. Ҡайһы саҡта дәрестәрҙән һуң мин һәр ваҡыт илһамланып, күтәренке кәйефтә өйгә ҡайтам. Туған телеңде өйрәнергә бер ҡасан да һуң түгеллеген үҙ тәжрибәбеҙҙә иҫбатлайбыҙ.

**Диана ДЕМЕНЮК.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Атайығыҙҙың тәрбиә һабаҡтарын тормошта ҡулланаһығыҙмы?

***Фуат СӘЛӘЙМӘНОВ, тарих фәндәре кандидаты, БДУ-ның Сибай институты доценты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре:***

2-се Түңгәүер улысы (Йылайыр районы) Түбәнге Сәлим ауылында 1924 йылда тыуып үҫкән һәм Бөйөк Ватан һуғышында утлы юлдар үтеп, ауыр яралар менән әйләнеп ҡайтҡан атайым Мырҙағәле Баязит улы Сөләймәнов хаҡында булыр һүҙем. Һуғыш башланғанда ул әле Байҡара мәктәбендә уҡып йөрөгән була. Уны тамамлағас та, 1942 йылда, атайым фронтҡа алына. Сержанттар әҙерләү мәктәбендә уҡып, 1943 йылда Ленинград фронтына ебәрелә һәм унда взвод командиры булараҡ, һалдаттарҙы алға әйҙәп, фашистар менән ҡул һуғышында батырҙарса алыша, ауыр яралана. Дошман штыгы атайымдың күкрәген үтә тишә, уң ҡулына пуля тейә, эсенә, аяҡтарына граната ярсыҡтары эләгә. Етмәһә, ҡаты контузия ала. Иҫһеҙ йығылған атайымды иптәштәре батырҙарса һәләк булғандар исемлегенә индерә, ләкин батыр йөрәкле санитарка уны плащ-палатҡаға һалып, яу ҡырынан һөйрәп алып сыға һәм тәүге ярҙам күрһәтеп, госпиталгә оҙата. Эйе, был яуҙа бик күптәр һәләк була, шул иҫәптән, командирҙары ла. Әлеге ҡыйыу санитарка булмаһа, белмәйем, атайым да шунда ятып ҡалған булыр ине. Шулай итеп, атайыма 8-9 ай самаһы төрлө госпиталдәрҙә ятып дауаланырға тура килә һәм 1944 йылда өйгә ҡайтарыла. Яралары уңалып бөтмәгән көйө, ҡултыҡ таяҡтарында йөрөүенә ҡарамаҫтан, фронтовик атайым шунда уҡ эшкә керешә: 1944-1945 йылдарҙа Матрай районы хәрби комиссариатында йәштәрҙе һуғышҡа әҙерләй. Ошо йылдарҙа улар әсәйем менән осрашып, ғаилә ҡора һәм 9 балаға ғүмер бирәләр. Үкенескә, һуғышта алған ауыр яраларҙан атайым оҙаҡ йәшәй алмай: ни бары 51 йәшендә генә вафат була. Миңә ул саҡта 10 йәш ине.

Атайымдың аяуһыҙ һуғыш ғибрәттәре хаҡында һөйләгәндәре кескәй күңелемә ныҡ уйылып ҡалған. Мин дә тиҙерәк үҫеп етеп, атайым кеүек һалдат булырға хыялландым. Ниндәй генә хәлдәрҙә лә юғалып ҡалмаҫҡа өйрәтә ине атайым. Тырышып уҡырға, белемгә эйә булып, һөнәр алыуыбыҙҙы теләне ул. Атай васыятына тоғро булыу теләге мине мәктәп тамамлағандан һуң Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетына алып килде. Беренсе курстан Совет Армияһы сафына саҡырылдым һәм ике йыл бүлексә командиры, артиллерия разведкаһы взводы командирының урынбаҫары булып хеҙмәт иттем. Хеҙмәт иткән йылдарҙа ла гел генә атайымдың әйткән һүҙҙәре мине оҙата йөрөнө: "Егетмен тигән ир азаматтары Тыуған илебеҙҙе һаҡларға һәр ваҡыт әҙер булырға тейештәр, хатта тыныс осорҙа ла!" - тиер ине ул һәм хәрби комиссариатта эшләгән йылдар тәжрибәһенә таянып, һәр бер үҫмерҙең мәктәп йылдарында уҡ физик сыныҡыу алып, спорт менән шөғөлләнеп, хәрби хеҙмәткә яраҡлы булып үҫеүҙәрен мотлаҡ бурыс тип иҫәпләне.

Армияла алдыңғы булған егеттәр тыныс тормошҡа ҡайтҡас та баҫылып, юғалып ҡалмай. Мин дә, армиянан ҡайтҡас, атайыбыҙ инде беҙҙең янда булмауға ҡарамаҫтан, гел уның тәрбиә һабағын, кәңәштәрен тотоп йәшәнем: университетта уҡыуымды дауам иттем, фән менән ҡыҙыҡһына башланым, шул уҡ ваҡытта физик сыныҡыу сараларын да ташлап ҡуйманым: бокс менән етди шөғөлләндем, республика ярыштарында призлы урындар яулай инем. Уҡыған йылдарҙа хәрби кафедраны ла тамамлап, мотоуҡсылар ғәскәренең запастағы лейтенант званиеһы алдым. Вуз тамамлап, үҙемдең тыуған районымдағы Матрай урта мәктәбендә тарих уҡытҡанда ла атайым һабаҡтарына таяндым, йәш быуынды илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләүҙә уҡыусыларымдың тыуған яҡ тарихын "бишле"гә өйрәнеүҙәренә өлгәшеү бурысы менән бергә алып барырға тырыштым. Әлеге көндә студенттарымдан да шуны уҡ талап итәм: илһөйәрлек - ул атай-олатайҙарыбыҙ фашизмдан ҡотҡарып ҡалған ватаныбыҙҙы ҡәҙерләүҙән, уны яратыуҙан, уның тарихын, ер-һыу атамаларын, шулай уҡ ырыу-ғаиләң шәжәрәһен белеүҙән башлана, тип ҡабатлап ҡына торам.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы. "Батырлыҡ өсөн" миҙалдарына, генерал Шайморатов ордендарына һәм миҙалдарына республиканан мобилизацияланғандар һәм ирекле батальондарҙың яугирҙары лайыҡ булды. Әле улар тыуған төйәгендә ҡыҫҡа ваҡытлы ялда.

✓"Бөгөн Рус география йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе ышанысла рәүештә Рус география йәмғиәтенең иң яҡшы ун бүлексәһе иҫәбенә инә. Беҙҙең бүлексәне йәмғиәттең юғары наградаларының береһе - көмөш миҙал менән бүләкләнеләр. Беҙ илдә - йәмғиәттең ошондай юғары наградаһын алған икенсе төбәк". Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рус география йәмғиәте төбәк бүлексәһенең попечителдәр советы ултырышында белдерҙе.

✓Ленинград өлкәһенең Всеволожск районында, Энколово ауылы янында, Санкт-Петербург ҡалаһы һәм Ленинград өлкәһе һабантуйы үтте. Унда Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы ла ҡатнашты. Санкт-Петербург ҡалаһы һәм Ленинград өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Гөлназ Ибраһимова байрамды күтәрмәләгән яҡташтарға рәхмәт һүҙҙәрен белдерҙе.

✓Рәсәйҙә махсус операцияла ҡатнашыусы студенттарға юғары уҡыу йорттарында түләүле бүлектән бюджетҡа күсергә мөмкин. Дәүләт Думаһында Мәғариф министрлығының ошо тәҡдимен хупланылар. Рәсәй Хөкүмәте яҡын арала әлеге башланғысты ҡарарға ниәтләй. Бынан тыш, махсус хәрби операция яугирҙарының балалары университеттарға льгота менән уҡырға инергә хоҡуҡлы. "Шуныһы мөһим: депутаттарҙың башланғысына иғтибар иттеләр, был нормалар былйыл уҡ ғәмәлгә инергә тейеш", - тине Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин.

✓РИА Новости агентлығы юлдарҙың сифаты буйынса төбәктәр рейтингын төҙөгән. Ошо мәғлүмәттәргә ярашлы, Башҡортостан 17-се урынды биләй. Республикала автомобиль юлдарының 65,8 проценты норматив талаптарға тап килә. Был иһә Волга буйы федераль округында өсөнсө һөҙөмтә. Округта беренсе һәм икенсе урындарҙа - Пенза (66,7 процент) һәм Ульяновск (65,9процент) өлкәләре. Ләкин был төбәктәрҙә автомобиль юлдарының тығыҙлығы Башҡортостанға ҡарағанда күпкә кәмерәк.

✓ Ни өсөн полиция хеҙмәте торған һайын аяуһыҙыраҡ булып, яза машинаһына әйләнә бара һуң? Енәйәтселек һәм коррупция сәскә атҡан илдәрҙең власть структуралары полициянан йәмғиәтте ҡурҡытып тотоусы машина эшләй.



ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

**"Франция ут эсендә, бензин бысҡыһы менән ҡоралланған кешеләр юлындағы бөтә нәмәне юҡ итә, онтай, емерә..." - тип яҙып сыҡты ул көндәрҙә донъя мәғлүмәт саралары. 27 июндә Париждың Иль-де Франс бисҭәһендә полицейский 17 йәшлек ҡара тәнле үсмерҙе атып үлтергәндән һуң башланып киткән протест шаңдауы бөтөн Францияны ялмап алды: ҡораллы демонстранттар хөкүмәт биналарын яндыра, банк һәм магазиндарҙы талай. Урам буйҙарында емереклек, яндырылған транспорт һәм тупҡалыштар, төтөн. Ут һүндергес ҡорамалдар менән магазин витриналары онтала, таш, быяла, бетон плитә киҫәктәре тәртип һаҡсылары - полиция һәм спецназға ҡаршы елгәрелә. Кемдәрҙер бензин бысҡыһы тотоп, электр линияһы үткәргестәрен өҙгөләй...**

# КӨС БАР - АҠЫЛ КӘРӘКМӘЙ

Ҡыҫҡаһы, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәгән һәм шашҡан ҡиәфәттәге бунт күтәреүселәр ҡорал магазины һәм хатта складына бәреп инеп, винтовкалар менән ҡоралланып алған. Бер төн эсендә генә лә 3 880 урам янғыны сыҡҡан, 2 000 автомобиль яндырылған, 492 бина емерелгән, 250 полицейский йәрәхәттәр алған. Ә 1 июлгә ҡарата BFVTV Франция каналы мәғлүмәттәре буйынса, полиция тарафынан меңләгән кеше ҡулға алынған, улар араһында йәштәр һәм үсмерҙәр байтаҡ. Властар белдереүенсә, полицияға ҡаршы башланып киткән протест енәйәтсел төркөмдәр һәм талаусыларға юл асҡан.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, полицейскийҙың закон һәм әхлаҡ сигенә һыйғыһыҙ ҡылығы башҡа илдәрҙә лә протест тулҡыны тыуҙырҙы: Брюсселдә, шулай уҡ Швейцария ҡалаларында ла кешеләр урамдарға сыҡты, күмәк болалар башланды. Илдәге хәл менән бәйле, Франция президенты Макрон Брюсселдәге



Евросоюз саммитын ташлап, ашығыс рәүештә илгә ҡайта, ләкин тәртипһеҙлектәр киң ҡолас алыуға ҡарамаҫтан, ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителмәй, тәртипһеҙлекте баҫтырыу өсөн өстәмә саралар, атап әйткәндә, бронетехника эшкә егелә һәм тағы ла 45 мең тәртип һаҡсыһы урамдарға сығарыла.

Тәртип һаҡсыһы, тигәндәй, хәҙер улар араһынан бер кешенең дөрөҫ булмаған аҙымы арҡаһында ил, хатта донъя күләмендә бола килеп сығыуы "һә" тигәнсә. Тимәк, тәртип һаҡсыһы, үҙе лә уйлап еткермәҫтән, быны ошондай киң ҡоласлы бунт, агрессия һәм башҡа төр бәләләргә төп сәбәпсе була, йәғни үҙе тәртип боҙа түгелме? Һәм бындай хәлдәрҙең тәүгә генә түгеллеген иҫкә төшөрәйек. Бынан өс йыл элек, 2020 йылдың 25 майында, АҠШ-тың Миннесота штаты Миннеаполис ҡалаһында ялған аҡса ҡулланыуҙа ғәйепләп, 46 йәшлек ҡара тәнле эшһеҙ ир Джордж Флойдты, һис бер ҡаршылыҡ күрһәтмәһә лә, ергә йығып, патруль полицейский тубыҡы менән ҡорбанының муйынына 8 минут буйы көс менән баҫып тора (йәнәһе лә, тиҙ ярҙам килеп еткәнен көткән, имеш) һәм һөҙөмтәлә медицина ярҙамына мохтаж кешене ысын мәғәнәһендә быуып үлтерә. Был ҡанһыҙ полицейскийҙың исеме Дерек Шовин. Яҙмыш иронияһылырмы, уның фамилияһы ла хатта шовинист тигән һүҙ менән ауаздаш бит! Уның менән бергә эшләгән икенсе бер "тәртип һаҡсыһы"н да аҡлап булмай, сөнки ул ауыҙынан ҡан киткән һәм "Мин тын ала алмайым!" тип бер-ике тапҡыр ғына әйтә алған Флойдҡа ярҙамға ашыҡмай, ә Шовин дуҫының күрәләтә кеше үлтереүен тыныс ҡына ҡарап тора. Ә бит, уйлап ҡараһаң, Флойд та, атып үлтерелгән 17 йәшлек афрофранцуз да баш китерлек әллә ниндәй енәйәт эшләмәгән, ә полицейскийҙар уларға нишләптер ҡурҡыныс енәйәтселәргә ҡарата ғына ҡулланыла торған үлемесле яза бирә: полиция булегенә килтермәй, тикшермәй-нитмәй, судһыҙ-ниһеҙ...Урамда. Ә бит закон буйынса ҡулға алынған кешенең ғүмерен ҡыйыу йәки башҡа төр язаға тарттырыу һис тә полицияның эше түгел; быны өсөн махсус вәкәләтле органдар бар.

Әлеге фажиғәләр һуңғы ваҡытта полиция тарафынан ҡылынған ике генә осраҡ, ә донъя кимәлендә хоҡуҡ һәм тәртип һаҡсыһы мундиры кейгән палачтар ер йөҙөндә күпме! Ярай ҙа, әлеге ике үлтерелгән кешене расизм ҡорбандары тип, "айырым осраҡлыҡ" төҫө бирергә маташалар, ләкин был бөгөнгә полиция хеҙмәтенең йөҙөн һис тә аҡламай. Ғөмүмән, полиция хәҙер йәмәғәт тәртибен, граждандарҙың ғүмерен һаҡлаусы булып түгел, ә власть структураларын йәмғиәттән һаҡлаусы "ҡалҡан, ҡорал һәм яза" сараһы булараҡ сығыш яһай түгелме? Тап полиция ғәйебе һәм инициативаһы менән үлтерелгән, нахаҡ ҡулға алынған, яла яғылған, туҡмау һәм язалауҙар менән булмаған ғәйепте үҙ өҫтөнә алған көс ҡорбандары һаны күпме икән? Ни өсөн полиция хеҙмәте торған һайын аяуһыҙыраҡ булып, яза машинаһына әйләнә бара һуң? Был һорау күп илдәр йәмәғәтселеген борсой. Енәйәтселек һәм коррупция сәскә атҡан илдәрҙең власть структуралары маҡсатлы рәүештә полициянан йәмғиәтте ҡурҡытып тотоусы машина эшләй, тип яҙа, мәҫәлән, журналист Павел Пряников.

P.S. Дүрт тәүлеккә һуҙылған утлы протест ҡойоно, ниһайәт, меңләгән жандарм тарафынан контролгә алынды, тип хәбәр итте мәғлүмәт сығанаҡтары. Эйе, бола баҫылыр ҙа, әммә унан һабаҡ алынмаһа, түҙемлеге бөткән халыҡ янынан урамдарға сығырға, протест утын яңынан дөрләтергә лә әҙер булыуын аңғартты. Тик халыҡ-ара шаңдау тыуҙырған был оло боланан башҡалар һығымта яһармы?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

## *Атайыбыҙҙың тәрбиә һабаҡтарын тормошта ҡулланаһығыҙмы?*

***Зифа ИЛБАҠТИНА, педагог, тыуған яҡты өйрәнеүсе:*** Атай тәрбиәһе хаҡында һөйләгәндә күберәк ир-егеттәргә һүҙ бирелә, был аңлашыла ла, сөнки малайҙар бәләкәйҙән атаһы янында, уның һәр хәрәкәтен, һүҙен отоп алып, тормош һәм эш серҙәренә төшенә, киләсәктә үҙҙәре лә атай булырға әҙерләнә. Халҡыбыҙҙа ла бит "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән" тигән тапҡыр әйтем бар. Шулай ҙа зирәк аҡыллы әсәйемдең атайым һүҙен һәр саҡ өҫтөн тотоуы, уның абруйын күтәрмәләп тороуы һөҙөмтәһендә ғаиләбеҙҙәге өс ҡыҙ бала ла ысын мәғәнәһендә нескә һәм шиғри күңелле атайыбыҙ тәрбиәһен өс ҡустыбыҙ менән бергә күңелгә һеңдерҙек. Оҙон ҡышҡы кистәрҙә ярышып шиғыр һөйләү булһынмы, бесән осоронда ҡулға салғы-һәнәк тотоп, хәлебеҙсә ярҙам итергә тырышыу булһынмы - атайым өйрәтеү менән бөтә эштәр ҙә бергәләп, уның ҡул аҫтында башҡарылды: малайҙар эше, ҡыҙҙар шөғөлө, тип торманыҡ.

Тыуған ауылын, уның тәбиғәтен өҙөлөп һөйгән атайым Ғәлиаслан Ғәлиәскәр улы Иҙелбаев 1927 йылдың 15 июлендә Хәйбулла районы Урыҫбай ауылында тыуған. 17 йәшендә генә һуғышҡа китеп, беҙҙең бәхетебеҙҙә иҫән-һау әйләнеп ҡайта һәм Йылайыр районы Һабыр ауылында төпләнә. Беҙ ҙә шунда тыуып үҫтек тә, атайымдың тыуған ауылына юлды һыуытманыҡ. Ат егеп, арбаға тейәлешеп, йыл һайын Урыҫбайға сәфәр ҡыла инек. Юлда атайым беҙгә тирә-яҡ ер-һыу атамаларының тарихын һөйләр, тыуған ауылы һәм уның бай тәбиғәтенә арнап яҙған шиғырҙарын уҡыр ине. Әйтеүемсә, атайым тыуған яғындағы тау, аҡлан, йылғаларҙың атамаларын, легендаларын күп белә ине. Мәктәптән һуң БДУ-ның филология факультетына уҡырға инеүемдә ана шулай атайымдың йоғонтоһо көслө булды. Аҙаҡ, йылдар үтә тора, атайымдың күңел йәдкәре булған шиғырҙары, тыуған яҡ тарихы яҙмаларын аҡтарғанда, уның миңә адресланған хаты килеп сыҡты. "Өлкән ҡыҙым Зифаға! Үҙебеҙҙең тыуған төйәк, йәғни Урыҫбай еренең, тауҙарының, төрлө-төрлө йылғалары-шишмәләренең, бесәнлектәренең атамалары теркәлгән мәғлүмәттәрҙе һинә ҡалдырам", тиелгән ине унда. Ауыл аҡһаҡалдарынан төпсөрләп яҙып алынған был мәғлүмәттәр араһында Урыҫбайҙың тирәягындағы 40-лаған йылға, ҡушылдыҡтар, шишмәләр атамалары тупланған ине. Атайымдың алтынға тиң яҙма ҡомартҡыһы донъя күрергә, халыҡтыҡы халыҡҡа ҡайтарылырға тейеш тигән уй биләп алды күңелемде. Был бик кәрәк яҙмалар ине, сөнки бөгөнгө быуын үҙе тыуып-үҫкән яҡтарының тарихын да, атамаларын да белмәй үҫә бит. Ә бөгөн, йәш быуынға илһөйәрлек тәрбиәһе тураһында һүҙ барғанда, тыуған яҡ тарихы һәм топонимикаһы үҙе бер дәреслеккә тиң буласаҡ, тип уйланым һәм атайым яҙмаларына нигеҙләнеп, тыуған яғыбыҙҙың ер-һыу атамаларын артабан өйрәнә башланым һәм урындағы гәзиттәрҙә ошо темаға бик күп мәҡәләләр баҫтырып сығарҙым.

Атайымдың ныҡлап яҙышырға теләге бик көслө ине, хатта уны инсульт аяҡтан йыҡһа ла, әлеге маҡсаты уға көс бирҙе, үҙ тырышлығы, беҙҙең ярҙам менән өс йылдан, шөкөр, аяғына баҫты һәм яҙышыуын дауам итте. Шуныһына ҡыуанам, үҙе иҫән сағында ҡулъяҙмаларын туплап, Сибай һәм Аҡъяр типографияларында ике китабы баҫылып сыҡты, өсөнсөһөн үҙнәшер юлы менән атайымдың 90 йәшенә баҫтырып бүләк иттек. Быны шулай мәңгелек ҡиммәттәр ҡәҙерен белеп, тыуған яғымды яратып, уның тарихын, ер-һыу атамаларын өйрәнеп йөөшәргә мин атайымдан өйрәндем; ул теләгәнсә, өлкән ҡыҙы булараҡ, уның эшен дауам итәм, яҡташтарыма тыуған еребеҙ тарихын һөйләйем һәм атайым рухына сикһеҙ рәхмәтлемен.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы тәҡдиме менән башланған проблемалы юлдарҙы ремонтлау программаһына өҫтәп йәнә 12 объект индерелде. 2023-2024 йылдарҙа Асҡын, Ауырғазы, Благовещен, Дәүләкән, Дыуан, Кушнаренко, Стәрлебаш, Саҡмағош райондарында, шулай уҡ Межгорье, Сибай, Туймазы һәм Дүртөйлә ҡалаларында юл участкалары тәҙекләндерелә. Юлдарҙың проблемалы участкалары исемлеге халыҡтың ялыуҙары буйынса төҙөлә. Тәүге яңыртылған объекттар, Яугилде - Щучье автомобиль юлы участкаһы һәм Күгәрсен районы Мораҡ ауылының ике урамы файҙаланыуға тапшырылды.

✓Башҡортостанға федераль бюджеттан аграр секторға ярҙам күрһәтеү өсөн 1,455 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленә, тиелә Рәсәй Хөкүмәте бойороғонда. Субсидияларҙың күләме өс йылға - 2023 һәм артабанғы ике йылға планлаштырылған. 742,344 миллион һум - "Агросәнәғәт комплексының өҫтөнлөклө ярҙамсы тармаҡтары үҫешен әүҙемләштереү һәм хужалыҡ итеүҙең кесе формаларын үҫтереү" өсөн, 713 миллион һумдан ашыуы "үҫемлекселек һәм малсылыҡтың айырым тармаҡтарына" ярҙам күрһәтеү өсөн йүнәлтелә.

✓Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы комбайнсылар араһында конкурс иғлан итте. Ярыш иген йыйыу (18 урын), сөгөлдөр йыйыу (3 урын) комбайндары, үҙ йөрөшлө сапҡыс (3 урын) операторҙары, йөк машиналары водителдәре (2 урын), туңға һөрөү механизаторҙары (4 урын) араһында үткәрелә. Номинациялар техниканың төрҙәренә ҡарап билдәләнгән.Еңеүселәргә ҡиммәтле бүләктәр, шул иҫәптән автомобилдәр тапшырыла.

✓Башҡортостанда ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусыларға грант-тар конкурсына документтар ҡабул ителә. 2023 йылда һәр ҡайһыны 690 мең һумлыҡ 150 грант бүлеү ҡаралған. Ғаризаларҙы 30 июнгә тиклем ебәрергә кәрәк. Конкурста 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар ҡатнашырға хоҡуҡлы. Уларҙың уҡытыу йөкләмәһе бер ставканан кәм булмаҫҡа, ә йәшәгән тораҡ пунктында халыҡ һаны 15 меңдән артмаҫҡа тейеш. Грант алған уҡытыусылар Башҡортостандың бер үк районындағы төп белем биреү ойошмаларында ун йылдан ашыу эшләргә бурыслы.

*ҠЫҪҠАСА*

# БИК ТӘ УҢАЙЛЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә "Алға" транспорт картаһының Татарстанда, Сыуашстанда һәм Удмуртстанда, шулай уҡ Түбәнге Новгород өлкәһендә ғәмәлдә булыуын хәбәр итте.** "Башҡортостанда юл хаҡын "Алға" транспорт картаһы менән түләргә мөмкин. Уны башҡа төбәктәргә лә таратабыҙ. Хәҙер беҙҙең картаны Ырымбур өлкәһендә ҡулланырға була, Силәбе менән килешеү төҙөнөк", - тип иҫкә төшөрҙө Радий Хәбиров. Ул транспорт реформаһының "Бәхетле сәғәт" акцияһы менән дә ураҡлашты. Уның ярҙамында өфөләр 368 миллион һумға яҡын аҡсаһын экономиялаған. "Өфөлә 15,4 миллион пассажир "Бәхетле сәғәт" акцияһының мөмкинлектәре менән файҙаланған. "Алға" картаһы менән түләп, бер сәғәт эсендә бер маршруттан икенсеһенә күсеп ултырырға һәм ике тапҡыр түләмәҫкә мөмкин. Өфө халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары быны менән әүҙем файҙалана. Акция "Башавтотранс" маршруттарында, трамвайҙарҙа, троллейбустарҙа һәм "Дим - Шакша" электричкаһында ғәмәлдә", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ **15 июлдә Өфөлә башҡорт тоҡомло аттар өсөн "Терра Башҡортостан" республика атспорт турниры башлана.** Турнирҙың дөйөм бүләк фонды - 10 миллион һум. Ғәҙәттәгесә, бөтә этаптар ҙа Өфөнөң "Аҡбуҙат" ипподромында ойошторола. "Терра Башҡортостан" турнирын асыу тантанаһының хедлайнерҙары - популяр музыкант, мульти-инструменталист һәм шоумен ZAINETDIN, шулай уҡ "Бишбармаҡ" оркестры, - тип хәбәр итте республиканың "Аҡбуҙат" йылҡысылыҡ һәм ат спорты буйынса компетенция үҙәге директоры Руслан Фәйзуллин. - Тамашасылар өсөн бай күңел асыу программаһы ҡаралған". Турнирға 5 көн ҡалғас, ҡатнашыусылар өсөн йәрәбә һалыу ойоштороласаҡ. Финал- сентябрҙә. Бәйгенең дистанцияһы - 2400 метр.

✓ **Башҡортостанда спорт өлкәһендәге юғары ҡаҙаныштар һәм физик культураға тос өлөш индергән өсөн республика премияһы булдырылды.** Республика Хөкүмәтенең тейешле ҡарарында билдәләнеүенсә, спорт премияһының маҡсаты - спортсыларҙың, тренерҙарҙың, физик культура һәм спорт өлкәһендәге белгестәрҙең һәм ойошмаларҙың һөнәри эшмәкәрлеген дәртләндереү. Спорт премияһы конкурс һөҙөмтәләре буйынса район һәм ҡала бюджеттарына йүнәлтелә. Шәп спортсыларҙы, тренерҙарҙы һәм белгестәрҙе асыҡлауҙан һәм уларға ярҙам итеүҙән тыш, Башҡортостандың башҡарма власть органдарын, муниципалитеттарҙы, төбәк спорт федерацияларын һәм киң мәғлүмәт сараларын спортҡа һәм сәләмәт йәшәү рәүешен үҫтереүгә йәлеп итеү - уның төп бурысы булып тора. Ҡалаларға һәм районларға положениеға ярашлы 2 миллион һум күләмендә премия бирелә. Ойошмаларға - 1,5 миллион һум, Спорт федерацияһына ла шунса уҡ. Спорт ветерандары, тренерҙар һәм журналистар 200-шәр мең һум премия менән билдәләнһә, адаптив спортта мәшғүл тренерҙарға 250 мең һум түләнә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ШӘП КИЛЕП СЫҠТЫ!

**Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең X юбилей форумына йомғаҡ яһап, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә сараның планлаштырылғанса үтеүен билдәләне, шулай уҡ Өфө һәм республика халҡына рәхмәт белдерҙе.**

Республика үҙен Рәсәйҙең ошондай кимәлдәге сараларҙы ҡабул итә белгән ҡунаҡсыл һәм сағыу төбәге итеп күрһәтте, тип билдәләне ул. "Эшлекле һәм мәҙәни программаларҙан тыш, ҡунаҡтарға Өфөнөң, Башҡортостандың матурлығын күрһәтә алдыҡ. Улар һәйкәлдәргә, музейҙарға, беҙҙең ашығыу һәм традицияларға һоҡланыуын йәшермәне. Форумды әҙерләгән командабыҙҙың эшен юғары баһалаған өсөн Рәсәйҙең Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенкоға рәхмәт. Ул сараны ойоштороуҙа ҡатнашҡандарҙың барыһына ла рәхмәт әйтте. Беларусь Республикаһының Милли йыйылышы Советы рәйесе Наталья Кочановаға һәм ошо илдең делегацияһына хеҙмәттәшлек мөмкинлектәре һәм йылы мөнәсәбәттәр өсөн рәхмәт", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

Радий Хәбиров төбәк-ара, шул иҫәптән иҡтисади хеҙмәттәшлекте үҫтереү йәһәтенән форумдың әһәмиәтен баһаланы. Өфөлә 100-ҙән ашыу килешеүгә һәм меморандумға ҡул ҡуйылды, уларҙың өстән бер өлөшө - Башҡортостан яғынан. "Республика Минскиҙағы коллегалары менән дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәһендә тәжрибә уртаҡлашасаҡ. Минск трактор заводы һәм "Гомсельмаш" менән килешеүҙәр аграрийҙарҙы сифатлы ауыл хужалығы техникаһы менән тәьмин итәсәк. Киләсәктә МТЗ менән берлектә Дүртөйлөлә мини-тракторҙар йыйыу планы бар", - тине Радий Хәбиров.

## ЯУГИРҘАР ЯНЫНДА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һамар өлкәһендә "Башҡортостан" ирекле мотоуҡсылар полкы подразделениеларының хәрби әҙерлек үтеү майҙансығын ҡарап сыҡты.**

Республика етәксеһе уҡыу полигонында һәм атыу урынында булды, Таһир Күсимов исемендәге батальон яугирҙары менән аралашты. "Мәскәү" ҡушаматлы командир һүҙҙәренсә, инженер-тактик, атыу һәм медицина әҙерлеген үтеү, пилотһыҙ аппараттар менән эшләү күнекмәләрен махсус хәрби операцияла ҡатнашыу тәжрибәһе булған инструкторҙар алып бара. Радий Хәбиров яугирҙарҙы хәрби һөнәргә өйрәтеү барышын ҡараны, уларҙың йәшәү шарттары менән ҡыҙыҡһынды, ғаиләләрен ниндәй проблемалар борсоуын һораны.

Мотоуҡсылар полкы командиры билдәләүенсә, бөтә күнекмәләр ҙә расписаниеға ярашлы һәм тулыһынса үткәрелә. "Яугирҙар төрлө атыу ҡоралынан атып ҡарай, хәрби окоптарҙы штурмлай, гранаталар ташлай, уларҙы пилотһыҙ осоу аппараттары менән идара итергә өйрәтәбеҙ. Уларҙың бар нәмәгә лә өйрәнергә теләге ҙур. Әхлаҡи һәм һуғышсан рух юғары, белем һәм оҫталыҡ өсөн ваҡыт кәрәк. Беҙ көн һайын камиллашабыҙ һәм тиҙҙән хәрби бурысты үтәргә әҙер булырбыҙ", - тине полк командиры.

Радий Хәбиров 14 июнда үҙенең ҡушыуы буйынса хәрби подразделениеға диспансеризация үткәрергә килгән медицина хеҙмәткәрҙәре менән дә аралашты. Табиптар һәм шәфҡәт туташтары рентген тикшереүҙәр, УЗИ үткәрә һәм башҡа медицина процедураларын башҡара. Ике аҙнанан ашыу ваҡыт эсендә 1200-ҙән ашыу яугир диспансерлашыу үтеп өлгөргән. Медицина хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, хатта мәкерле сир осраҡтары ла асыҡланған.

## ӨҪТӘМӘЛӘР ИНДЕРЕЛДЕ

**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров рәйеслегендә комиссия "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары һәм дәүләт телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" дәүләт программаһын яңыртыу мәсьәләһен ҡараны.**

"Республика Башлығы Башҡортостан халыҡтары телдәрендә балалар контентын үҫтереү буйынса сараларҙы профилле программаларға индерергә ҡушты. Был йәһәттән "Башҡорт теле" программаһына яңы саралар өҫтәлгән. Республика халыҡтары телдәрендә уҡыусылар өсөн китаптар, баҫмалар, шул иҫәптән уҡыу әсбаптары һәм уҡыу әсбаптары етештереүҙе арттырыу планлаштырыла", - тине Андрей Назаров. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин Дәүләт программаһында 3 программа ҡаралыуын билдәләне. Улар: "Урыҫ теле", "Башҡорт теле", "Туған телдәр". Дәүләт программаһын маҡсатлы яңыртыу өсөн тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алып, уға үҙгәрештәр индереү буйынса ҡарар проекты әҙерләнгән.

Шулай уҡ республика Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса, Башҡортостан Республикаһы граждандар форумы йомғаҡтары буйынса Дәүләт программаһының "Башҡорт теле" программаһына башҡорт телендә "Ат уйнатып" телевизион хәрби-патриотик уйынын булдырыу һәм республика телеканалдарында урынлаштырыу йәһәтенән яңы саралар һәм башҡорт телендә "Нурбостан" балалар өсөн анимацион сериалдар төшөрөү ҡаралды. Башҡортостан Республикаһы Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты республика йәштәр конкурс-акцияһын үткәреү йәһәтенән үҙгәрештәр индерә. "Туған телемдә һөйләшәм" конкурс-акцияһы, йәштәр араһында башҡорт телендә дебаттар, турнирҙар, форумдар, уйындар, фестивалдәр уҙғарыу ҡарала. Башҡортостан Фәндәр академияһы республикала компактлы йәшәгән халыҡтар телдәренең этнолингвистик һүҙлектәрен баҫтырыу йәһәтенән үҙгәреш индерҙе.

## МАХСУС ҺАҠЛАНА!

**"Янғантау" геопаркы янындағы участкалар махсус һаҡланған ерҙәр исемлегенә индерелде.**

Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән Салауат районының ике участкаһы - төбәктең рекреацион әһәмиәтендәге айырыуса һаҡланған биләмәләр исемлегендә. Улар "Янғантау" геопаркында туризмды ойоштороу өсөн тәғәйенләнгән, тиелә документта. Асыҡланыуынса, ерҙәр геопарктың яңы объекттарын төҙөү һәм юридик яҡтан рәсмиләштереү өсөн индерелгән. Яңы Ҡаратаулы ауылынан көнсығыштараҡ 70-90 сутыйлыҡ тәүге участка - "Каруанһарай" этнокомплексының, икенсеһе - Йонос ауылынан төньяҡ-көнбайышҡа табан 2,5 саҡрым алыҫлыҡта 75-80 сутыйлыҡ майҙан "Салауат ере" тарихи-мемориаль паркының бер өлөшө була. 2021 йылда Республика адреслы инвестиция программаһы иҫәбенән "Салауат ере"н һәм "Мәсетле" геокомплексын булдырыуға 250 миллион һум бүлеү, ә "Каруанһарай" этнокомплексын үҫтереүгә шәхси инвестициялар йәлеп итеү планлаштырылғайны. Геопарктан хәбәр итеүҙәренсә, әлеге ваҡытта был объекттарҙа тикшереү эштәре алып барыла, финанслау көтөлә.

"Янғантау" геопаркы 2017 йылда ойошторолдо. 2020 йылда Рәсәйҙә һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһендә тәүгеләрҙән булып бөтә донъя ЮНЕСКО селтәренә инде. Геопарк биләмәһендә 20-нән ашыу геологик объект бар, уларҙың өсәүһе (Мәсетле ҡиҫелеше, Оло Лука ҡиҫелеше, Янғантау) - халыҡ-ара, 10-һы - милли һәм 21 объект белем биреү әһәмиәтенә эйә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда Туймазы районының "Тиҫтер" балалар-һауыҡтырыу лагерында педагогик хеҙмәткәрҙәр командаларының Педагог һәм остаз йылына арналған республика туристик слеты уҙҙы. Ярыш йомғаҡтары буйынса призлы урындар түбәндәгесә билдәләнде: 1-се урын - Өфө; 2-се урын - Туймазы районы; 3-сө урын - Салауат ҡалаһы.

✓Башҡортостан автоһөйәҫкәрҙәре бензинға хаҡтарҙың үҙгәреүе тураһында хәбәр итә. "Минең Өфөм" телеграм-каналында яҙыуҙарынса, Өфө районындағы билдәле яғыулыҡ ҡойоу станцияһында АИ-92 бензины 30 тингә артып, 47,55 һумға еткән. АИ-92 atum - 48,05 һумдан 48,35 һумғаса, ә АИ-95 atum 51,25-тән 51,55 һумғаса үҙгәргән. Башстаттың 26 июнгә мәғлүмәттәре буйынса, мотор яғыулығына хаҡтар түбәндәгесә: АИ-92 - 47,44 һум, АИ-95 - 51,01 һум, дизель яғыулығы - 57,56 һум.

✓2024 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә минималь эш хаҡы күләмен 19 242 һумға тиклем, йәғни 18,5 процентҡа арттырырға ниәтләйҙәр. "Башинформ" илдең Хеҙмәт министрлығы тәҡдим иткән закон проекты менән танышты. МРОТ-ты арттырыу 4,8 миллион хеҙмәткәрҙен эш хаҡын күтәрергә мөмкинлек бирергә тейеш. Ошо маҡсатҡа бөтә кимәлдәге бюджеттарҙан - 75,9 миллиард һум, бюджеттан тыш секторҙан 47,4 миллиард һум йүнәлтелә.

✓Башҡортостанда 70 ғаилә пары "Мөхәббәт һәм тоғролоҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә. Бүләкләү сараһы 8 июлдә Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнөнә арналған тантанаҙарҙа була. Миҙал 25 йылдан ашыу татыу ғүмер кисергән, ғаилә традицияларын һаҡлаған, лайыҡлы балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә тапшырыла. Миҙал менән бергә ныҡлы ғаиләләргә танытмалар һәм махсус билдә тапшырыла.

✓Башҡортостанда хәрби хәрәкәттәр һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары түләүле туҡталҡалар менән бушлай файҙаланырға хоҡуҡлы. Ошо туралағы ҡарарға Радий Хәбиров ҡул ҡуйған. Бындай хоҡуҡ республика биләмәһендә даими йәшәгән Рәсәй граждандарына бирелә. Бынан тыш, ветерандарҙы оҙатып йөрөүселәргә, шулай уҡ I, II һәм III төркөм инвалидтарына автомобилдәрен парковкала бушлай ҡалдырырға рөхсәт ителә. Был закон һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн дә ғәмәлдә - автомобиль уларҙың ата-әсәһе, опекундары йәки попечителдәренең береһе исемендә булырға тейеш.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Һәйкәлде реставрациялау проекты документы әле эшләнеп бөтмәгән. Унда тәкдим ителгән техник ысулдарҙың дөрөҫлөгөн раҫлатыу һәм смета хаҡын билдәләү маҡсатынан ул экспертиза үтәсәк.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ТИҘЛЕК ЯРАТЫУСЫЛАРҘЫ...

## яңы камералар күҙәтә



**Башҡортостандың юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге инспекцияһының юл хәрәкәте өлкәһендә административ хоҡуҡ боҙоуҙарҙы автоматлаштырылған теркәү үҙәге етәксеһе, полиция полковнигы Артур Сыңғыҙов яңы күҙәтеү ҡоролмалары ҡулланыуҙың өҫтөнлөгө һәм уның эше тураһында һөйләй.**

Был ниндәй прибор? Фототеркәүле үлсәү комплексы "Оракул-инсайт" тип атала. Рәсәй инженерҙары уйлап тапҡан. Тейешле реестрҙарға индерелгән ҡатмарлы сертификацияланған ҡорамал.

- 2012 йылдан алып юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарын автоматик рәүештә асыҡлау тәжрибәһенә ағымдағы йылдың майында һынау режимында яңы практика өҫтәлде. Атап әйткәндә, машинаның алғы панелендә һәм юл йүнәлешендә ҡуйылған фото һәм видеояҙма ҡоролмаһы тиҙлекте арттырырға теләүселәрҙе асыҡлай, - тине Артур Сыңғыҙов.

Яңы ҡулайламалар эшләгән урындар - Перспектив урамы һәм Р-240 Өфө - Ырымбур шоссеһы участкаһы (Дачниктан Металлобазаға тиклем). Перспектив урамы төрлө тиҙлек режимына эйә булғанлыҡтан һайланған: участканың бер өлөшө тораҡ пункт өсөн рөхсәт ителгән тиҙлеккә эйә - сәғәтенә 60 км, шул уҡ ваҡытта тиҙлек режимын сәғәтенә 40 км-ға тиклем сикләгән юл билдәләре лә бар.

- Әле беҙҙә булған һәм киләсәктә булыуы ихтимал ҡоролмалар һаны тулыһынса контролде тәьмин итмәйәсәк, ләкин водителдәрҙең оҙайлы күҙәтеү аҫтында булыуын аңларға ярҙам итер, тип ышанабыҙ, - тип аңлатты Артур Сыңғыҙов. - Ҡулайлама үҙен ыңғай яҡтан иҫбатланы ла инде. Шул уҡ ваҡытта бындай комплекстар һанын арттырыу тураһында ҡарарҙы башҡарма власть ҡабул итәсәк. Үҙ сиратыбыҙҙа, был ҡоролмалар күберәк кенә түгел, күп булырға тейеш, тигән фекер яҡлыбыҙ.

Статистика мәғлүмәттәре буйынса, тиҙлек режимын арттырыуҙың күбеһе 20-40 км/сәғ тәшкил итә. Шулай уҡ ыңғай тенденция күҙәтелә: һуңғы ете йылда тәүге тапҡыр 40-60 км.сәғәт, 60-80 км.сәғәт һәм 80 км.сәғәттән күберәк тиҙлек һаны кәмеүе теркәлгән. "Тимәк, "үлтереүсе" тиҙлек режимы кәмей башланы", - тип аңлатты Артур Сыңғыҙов.

Өфөнөң урам һәм юл селтәрендә алып барылған саралар, шул иҫәптән яңы приборҙар ярҙамында, транспорт хәрәкәтендә ғүмерҙе һаҡлап ҡалыуҙың иң яҡшы күрһәткестәренә өлгәшелә. "Ағымдағы йылдың биш айында Өфөлә юл фажиғәләрендә ете кеше һәләк булды, әммә был илебеҙҙәге бөтә миллиондан ашыу ҡалалар араһында иң түбән күрһәткес", - тип йомғаҡ яһаны Башҡортостандың ЮХХДИ вәкиле.

**"БАШИНФОРМ".**

*ДЕПУТАТ АҢЛАТА*

# ҠАЗАЛАНҺАҢ...

**Бер суд ҡарарына ентекле аңлатма биреп үтәм. "Ни өсөн ул беҙҙең өсөн мөһим?" тип һорарһығыҙ. Йыш ҡына халыҡ үҙенең хоҡуҡтарын нисек яҡларға белмәй ҡала. Күптәр әле һөйләйәсәк хәл-ваҡиғаларға тарығанда ни эшләргә кәрәк икәнен белмәҫкә мәмкин.**



2023 йылдың 23 февралендә Курск өлкәһенең Черницыно ауылында рейс автобусы пассажиры йәрәхәтләнә. Быға транспорттың киҫкен туҡтауы сәбәпсе була. Водитель ҡазаланыусыға ҡолаған урынынан тороп сығырға ярҙам итә лә, автобусҡа ултырып, ҡуҙғалып та китә. Ҡатын йәрәхәтен дауалағандан һуң водителгә яза биреүҙе һорап, судҡа мөрәжәғәт итә. Суд ултырышында водитель: "Ул пассажир хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен һанға һуҡмай, автобус туҡтамаҫ элек урынынан торған", - тип әлеге хәлдә ҡатындың үҙен ғәйепләй.

Ләкин суд бөтә материалдарҙы тикшергәндән һуң, был хәл юл-транспорт ваҡиғаһы тип ҡаралырға тейеш, тигән ҡарар сығара. Водитель автобусты туҡтатырға, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәрен саҡыртырға һәм пассажирҙың йәрәхәтләнеүен юл-транспорт ваҡиғаһы тип теркәп ҡуйырға тейеш булған.

Суд автобус водителен Рәсәй Федерацияһы Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 1.27 статьяһы 2-се бүлеге буйынса 1 йылға машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итә. Илдә шундай суд ҡарары беренсе тапҡыр ғына сығарылмай. Элегерәк Волгоград ҡалаһында ла була шундай хәл: троллейбус ҡапыл туҡтау арҡаһында бер пенсионер йығылып, аяғын һындыра. Ул суд аша транспорт компанияһынан әхлаҡи зыян өсөн 50 мең һум аҡса түләттерә.

Кешеләр автобуста, троллейбуста, трамвайҙа бындай хәүефле осраҡтарҙа йәрәхәтләнеүҙең юл-транспорт ваҡиғаһы булып һаналыуын һәм водителдәр ЮХХДИ-ға мөрәжәғәт итергә тейешлеген белмәй. Ә ҡаза күреүселәрҙең матди һәм әхлаҡи зыянды ҡаплатыуға хоҡуғы бар.

**Зариф БАЙҒУСҠАРОВ,**
**РФ Дәүләт Думаһы депутаты.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ЗЫЯН ИТӘЛӘР!

**Өфөлә парктарҙы һәм скверҙарҙы төҙөк тотоу эше яйға һалынһа ла, көн һайын уларҙың төрлө ҡоролмаларын, бәләкәй архитектура һәйкәлдәрен емереүселәр табылып тора.** Был турала ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев республика Хөкүмәтендә үткән оператив ултырышта белдерҙе. Ҡала хакимиәте хеҙмәткәрҙәре парк һәм скверҙарҙы йөрөп сығып, кәрәкле акттар төҙөй. Вандаллыҡ осраҡтары булғанда уларҙы тиҙерәк йүнәтеү сараһы күрелә. "Башта емерерҙәрҙә, яңынан төҙәтергә, эшләргә лә тура килер, тип, барлыҡ муниципалитеттарға ла әйтә киләм. Был осраҡта түҙергә, мөмкин тиклем вандаллыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙе тоторға кәрәк", - тине Радий Хәбиров һәм Өфөнөң йылдан-йыл матурая һәм таҙараҡ була барыуын билдәләне.

✓ **Башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевҡа һәйкәлдең реставрация проекты төҙәтеүҙәр индергәндән һуң, экспертизаға ебәрелә.** Был турала Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте белдерә. "Һәйкәлде реставрациялау проекты документы әле эшләнеп бөтмәгән. Унда тәкдим ителгән техник ысулдарҙың дөрөҫлөгөн раҫлатыу һәм смета хаҡын билдәләү маҡсатынан ул экспертиза үтәсәк, шулай уҡ БР Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡтың ла рөхсәте алынасаҡ", - тип белдерҙеләр ҡала хакимиәтенән. Мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге хеҙмәткәрҙәре һәйкәлде тикшереп, коррозия, постаменттың ултырыуы кеүек күп кенә етешһеҙлектәрҙе асыҡлағайны. БР Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ эргәһендә һәйкәлде реставрациялау мәсьәләһе буйынса күҙәтеү советы булдырылған. Салауат Юлаевҡа һәйкәл Көнсығыш Европала иң ҙур атлы скульптура иҫәпләнә. Суйын һәйкәлдең ауырлығы 40 тоннанан ашыу, бейеклеге - 9,8 (нигеҙе менән 14) метр.

✓ **РФ Дәүләт Думаһы балиғ булмағандарға вейптар һатыу һәм уларҙы асыҡтан-асыҡ һатыуҙы тыйыусы ҡанундың йыш боҙолоуы тураһында белдерә.** Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин пленар ултырышта сығыш яһап, төбәктәрҙә быны контролгә алырға ҡушты. Шулай уҡ хәүефһеҙлек, һаулыҡ һаҡлау, иҡтисади сәйәсәт буйынса профилле комитеттарға РФ Хөкүмәтенә мөрәжәғәт әҙерләп, вейптар менән сауҙа итеүсе магазиндарҙы тикшерергә кәрәклеген тәкдим итте. "Бындай магазин хужалары шуны аңларға тейеш: һүҙ балаларҙың сәләмәтлеге тураһында бара. Шуға ла улар был тауарҙы рекламалауҙан, асыҡтан-асыҡ һатыуҙан йә үҙҙәре тыйыла, йә тикшереүсе органдар тәртип урынлаштырасаҡ". Депутаттар шулай уҡ үҫмерҙәр һәм йәштәр араһында вейптарҙың зыяны тураһында мәктәптәрҙә, вуздарҙа мәғрифәтселек кампанияһы уҙғарыу кәрәклеге хаҡындағы тәкдимде ыңғай ҡабул итте.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡул

❖ 1 ҡалаҡ ыуылған юл япрағына 1 литр һыу ҡойорға һәм ҡулдарҙы 10-15 минут тотоп ултырып, таҫтамал менән ҡоротоп, майлы крем һөртөп ҡуйырға.

❖ 1 ҡалаҡ ромашка сәскәһенә 1 литр һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға. Шуға ҡулдарҙы 15-20 минут тығып ултырырға. Аҙаҡтан майлы крем һөртөп ҡуйырға.

## Бәүел юлында таштар

❖ Бәүел юлында, бөйөрҙә таштар булғанда файҙалы халыҡ ысулы: 200 грамм гөлйемеш, 10-ар грамм петрушка һәм укроп орлоғо, ҡырҡбыуын (хвощ), әрем, шиңмәҫгөл (бессмертник) үләндәре, ҡайын бөрөһөн алырға һәм өҫтөнә 1,5 литр һыу ҡойорға. Һыуы 0,5 литр ҡалғанға тиклем талғын утта ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Бәүел юлында таштар булғанда ауыртыуҙарҙы баҫа, ҡайһы саҡта таштарҙы операцияһыҙ ваҡлап организмдан сығарырға ла ярҙам итә.

❖ Торма (редька) һутын бал менән тигеҙ өлөштә ҡушып болғарға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр балғалаҡ эсергә. Бәүел юлында ғына түгел, үт ҡыуығында таштар булған осраҡта ла ярҙам итә.

❖ 4-6 ай дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ кишер һуты эсергә. Был сара бөйөрҙәге таштарҙан ҡотолорға ярҙам итер.

## Кәкүк емеше

❖ Мигрень, баш әйләнгәндә 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған кәкүк емеше (первоцвет лекарственный) сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә һәм йылы көйөнсә сәй һымаҡ эсергә. Йәки күберәк бешереп, көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә була.

## Ҡаҙ үләне

❖ Балтыр тартышҡанда (икроножная мышца) 3-4 ҡалаҡ ҡаҙ үләнен тамыры менән алып, 1 литр һыу ҡойорға һәм ҡайнар хәлгә еткереп, тағы 5 минут утта тоторға. Һыуынғас, һөҙөргә. Төнәтмәне бер көн эсендә 3-4-кә бүлеп эсеп бөтөргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Һәр һөнәрҙең ыңғай яғы ла, ҡатмарлыҡтары ла бар, шуға ла кешенең эшсәнлеге, яуаплылығы һәм үҙен тулыһынса күңеленә ятҡан һөнәргә бағышлауы бик мөһим. Сөнки яратмаған эштә эшләү - иң ҙур яза.**



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Ҡунаҡбай ауылы музейында һаҡлана. Оҙонлоғо 36 см, өскө киңлеге 23 см, аҫҡы киңлеге 29 см.



Яға. Ҡунаҡбай ауылы музейында һаҡлана. Оҙонлоғо 36 см, өскө киңлеге 23 см, аҫҡы киңлеге 30 см.



Яға. Ҡунаҡбай ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 35 см, өскө киңлеге 22 см, аҫҡы киңлеге 29 см.



Яға. Ҡалуй ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 42 см, өскө киңлеге 27 см, аҫҡы киңлеге 37 см.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

ӘЙТӘГҮР!

# ЗАМАНСА ҺӨНӘРҘӘРҘЕ ЛӘ...

## традицион булғандарын да үҙ итә йәштәр



**Йәш быуын үҙенең киләсәген ниндәй итеп күрә? Улар ниндәй һөнәрҙәргә өҫтөнлөк бирә һәм ни өсөн? Ошо һорауҙарға йәштәрҙең үҙҙәре менән бергәләп яуап эҙләйбеҙ.**

***Гәлиә БАСЫРОВА, абитуриент:*** Бөгөнгө көндә йәштәр башлыса программалау өлкәһе менән ҡыҙыҡһына. Быны заман мәғлүмәти технологиялары үҫеше һәм юғары эш хаҡы менән аңлатырға мөмкин. Күреүебеҙсә, интернет селтәрҙәрендә яңы төр һөнәрҙәр көндән-көн күбәйә, шуға ла йәштәр ошо өлкәгә иғтибарын күберәк йүнәлтә. Элек табип, юрист, иҡтисадсы, һатыусы, уҡытыусы кеүек һөнәрҙәргә өҫтөнлөк бирелһә, хәҙерге йәш быуын контент-менеджер, рекрутер, копирайтер, маркетолог, веб-дизайнер, видеографика һөнәрҙәре менән ҡыҙыҡһына. Шулай ҙа табип, юрист, уҡытыусы һымаҡ традицион һөнәрҙәр ҙә актуаллеген юғалтмай. Үҙем сит телдәр өйрәнеү менән ҡыҙыҡһынам. Күп йәштәр тәржемәсе, тел белгесе һөнәренең мәғлүмәт технологиялары менән алыштырып булмай икәнен аңлай, шуға ла лингвистика һәм филология өлкәләренә ынтылыусыларҙың һаны йылдан-йыл арта.

Мин дә үҙемде киләсәктә тәржемәсе итеп күрәм, сөнки сит телдә аралаша белеү бик кәрәкле ихтыяж тип уйлайым. Был һөнәр кешеләре ҡайҙа ла - мәктәптәрҙәме, юғары уҡыу йорттарындамы, төрлө ойошма һәм ведостволарҙамы, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ эш урын таба ала.

Берҙәм дәүләт имтиханын рус теленән 97 балға, йәмғиәтте өйрәнеү предметын 86 балға яҙҙым, математиканы "5"-кә тапшырҙым. Инглиз теленең һөҙөмтәләре лә һәйбәт. Төп маҡсатым - был өлкәлә киңерәк мөмкинлектәр бирер тиғән ышаныс менән Мәскәүҙәге берәй уҡыу йортона тәржемәсе һәм телселәр әҙерләү факультетына уҡырға инеү. Документтарымды Өфө фән һәм технологиялар университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына биреү - минең запас вариантым булып тора. Мәктәп балалары араһында үткәрелгән Төньяҡ-көнсығыш олимпиадаһында (Яҡут университеты менән берлектәге олимпиада) призер булыуым унда минә бер ҡаршылыҡһыҙ инеү мөмкинлеге бирә. Ниндәй генә юғары уҡыу йортон һайлаһам да, минең өсөн иң мөһиме үҙемә яҡты киләсәк булдырыу.

***Айһылыу ӘЛИБАЕВА, абитуриент:*** Был донъяла кеше ғүмерен һаҡлау менән бәйле күп һөнәрҙәр бар: янғын һүндереүсе, табип, ҡотҡарыусы, полиция хеҙмәткәре һ.б. Улар араһынан мин табип һөнәрен һайланым. Атайым, бер туған апайым - табиптар, шуға күрә лә был һөнәр минә бик яҡын. Пандемия ваҡиғалары кешеләрҙә табиптарға рәхмәт тойғоһон нығытты. Халыҡта медицина хеҙмәткәрҙәре эшенә оло ихтирам уянды, ғөмүмән, был һөнәр бер ваҡытта ла актуаллеген юғалтмаҫ, тип уйлайым. Мин дә үҙемде киләсәктә табип итеп күрәм. Биологиянан, рус теленән һәм математиканан Берҙәм дәүләт имтиханын яҡшы билдәләргә бирҙем. Медицина колледжын тамамлағас, ошо йүнәлеш буйынса уҡыуымды дауам итәсәкмен. "Ни өсөн тәүҙән үк юғары уҡыу йортон һайламаның?" - тип һорарһығыҙ. Һигеҙ йыл медицина университетында уҡыу минә бик үк оҡшап етмәй. Унан һуң, юғары уҡыу йортона бит мин башланғыс медицина белгесе булып киләм. Унда алған белемем тәрәнерәк буласаҡ, тип уйлайым. Хәҙерге йәштәр заман мәғлүмәт технологиялары менән бәйле һөнәрҙәргә генә түгел, һәр саҡ актуаль булған уҡытыусы, врач, тәржемәсе, юрист, иҡтисадсы һөнәрҙәренә лә өҫтөнлөк бирә. Шуға, бәхеткә күрә, кешелек ышанысլы ҡулдарҙа, тип уйлайым.

***Руслан ҠӘҘЕРБАЕВ, студент:*** Үҙемде төрлө яҡлап үҫешкән кеше тип әйтә алам, сөнки миңә барыһы ла ҡыҙыҡ һәм мин бөтә йүнәлештәрҙә лә үҙемде һынап ҡарарға әҙермен. Әлеге ваҡытта журналистика буйынса белем алам. Коммуникациялар өлкәһендә үҙемде күрһәтәм тиғән йәштәргә был факультет яҡшы мөмкинлектәр бирә, тип уйлайым. Хәҙерге заманда интернетһыҙ йәшәү мөмкин түгел. Шуға күрә мин үҙемде компьютер технологиялары өлкәһендә лә һынап ҡарар инем. Мәҫәлән, видеографика һәм режиссура миңә ҡыҙыҡлы. Әлбиттә, һәр һөнәрҙең ыңғай яғы ла, ҡатмарлыҡтары ла бар, шуға ла кешенең эшсәнлеге, яуаплылығы, маҡсатҡа ынтылышлығы һәм үҙен тулыһынса күңеленә ятҡан һөнәргә бағышлауы бик мөһим. Сөнки яратмаған эштә эшләү - иң ҙур яза, минеңсә. Һиңә тура килгән һөнәр рухи үҫеш сығанағы, күңелең аҫҡысы була аласаҡ. Үҙеңде табыу, теләктәреңде, хыялдарыңды асыҡлау - ауыр мәсьәлә булһа ла, бик мөһим.

Хәҙерге йәштәрҙең күбеһе ниндәй белем алырға, кем булырға теләүен уҡыу барышында йәки вузды тамамлағас ҡына асыҡлай. Әгәр һайлаған юлы оҡшаһа, йәш кеше көсөн мотлаҡ шул һөнәрҙең бөтә серҙәрен үҙләштереүгә йүнәлтәсәк һәм маҡсатына өлгәшәсәк. Ә инде һин вузда уҡып йөрөгән мәлдә үк был һөнәрҙең күңелеңә ятмаҫын аңлаһаң, уҡыуыңды башҡа йүнәлештә, хатта башҡа уҡыу йортонда дауам итеүҙән һис ҡурҡып тормаҫҡа тейешһең. Сөнки быны бер ҡурҡыныслы ла юҡ. Үҙ урыныңды табыу өсөн тегенеһен-быныһын һайлап ҡарарға тейешһең. 40-50 йыл йәшәп, үҙенең яратҡан шөғөлөн тапмаған, хыялдарын юҡҡа сығарған кешеләр бихисап донъяла. Шуға ла үҫмер саҡтан ваҡытты дөрөҫ файҙаланырға, уны бушҡа үткәрмәҫкә, телдәр өйрәнергә, китаптар уҡырға, яңынан-яңы һәләттәр тупларға, киләсәк тураһында уйларға кәрәк. Яңы быуынға шул фекеремде еткерергә теләр инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәштәрҙең төрлө йүнәлештәр менән ҡыҙыҡһыныуы асыҡланды. Заман мәғлүмәт технологиялары күп һөнәрҙәргә заманса һулыш бирә, яңы йүнәлештәр барлыҡҡа килтерҙе. Бәхеткә күрә, хәҙерге быуын йәштәре үҙҙәренең киләсәген компьютер артында ғына түгел, фән, йәмғиәт, медицина, бизнес, юриспруденция, телде һәм тарихты өйрәнеү, белем биреү өлкәләрендә лә күрә.**

**Гөлназ ӘХМӘТЙӘНОВА**
**яҙып алды.**

ҺАБАҠТАР

# СУДЬЯ. АДВОКАТ.




Ейәнем менән таксиҙа киләбеҙ. Таксист бер туҡтауһыҙ әрләшә:

- Ошо Мәләүез урамдары! Ошо Рәсәй юлдары!

Шул саҡ ят кеше менән бик һөйләшеп бармаған ейәнем Камил:

- Бында Рәсәйҙең, Мәләүеҙҙең ни ғәйебе бар? Ни өсөн үҙегеҙ йәшәгән илде әрләйһегеҙ? Ошо юлды һалған кешене генә әрләргә булмаймы ни? - тип һүҙ ҡыҫтырҙы.

Водитель артына боролоп ҡараны ла башҡа өндәшмәне. Алты йәшлек малай нисек шулайтып әйтә алды, тип ғәжәпләнеүе булғандыр инде. Ә миңә оҡшаны. Таксист ауыҙын ябыуы түгел. Ейәнемдең фекерләүе оҡшаны.

...Был водитель бер танышымды иҫкә төшөрҙө. Мин уны күргән һайын: "Был әлдә судья булмаған", - тип ҡыуанам. Уны судья итеп күрергә теләмәгәнемдең сәбәбе шунда: танышым һәр ваҡыт кеше йәки ниндәй ҙә булһа күренеш, ваҡиға тураһында тик кире фекер булдырыусан. Мәҫәлән, берәһе хаҡлы ялға сығып, мәҙрәсәгә уҡырға инһә, ураҙа тотһа, намаҙ уҡыһа, ул был ҡатындың ҡасандыр булған йәки булмаған элекке гонаһтары тураһында иҫенә төшөрә. Берәйһенең таҡыя кейеп, йәмәғәт намаҙына йөрөгәнен ишетһә: "Комған тотоп йөрөүең менәнме, күңелең бысраҡ булғас..." - тип әрләй. Йомортҡанан да йөй таба ул. Судья булһа, моғайын да, береһенә лә мәрхәмәтлек күрһәтмәҫ ине.

Икенсе бер танышымды, киреһенсә, адвокат итеп күргем килмәҫ ине. Ни өсөн икәнен аңлап торағыҙҙыр. Эйе, ул бөтәһен дә яҡлай. Иң ҡурҡыныс енәйәтсене лә суд барышында ғәйепһеҙгә сығарып ҡуйыр ине, билләһи.

Ошо ҡапма-ҡаршы холоҡло таныштарымдың тормошон сағыштырып ҡараным да, үҙем өсөн бик ҡыҙыҡлы асыш яһаным. Тышҡы яҡтан ҡараһаң, уларҙың көнитмеше бер төрлө кеүек. Хатта баҡса-сәскә үҫтерергә яратыуҙары менән дә бер-береһенә оҡшаш. Айырма шунда ғына: кешенең кире яғын эҙләгәненең ғаиләһендә бер ҙә тыныслыҡ юҡ. Кешенең тик яҡшы яғын ғына күргәне - бәхетле әсәй, һөйөклө ҡатын. Хатта баҡсаһындағы сәскәләр ҙә тәүгеһенекенә ҡарағанда күберәк сәскә ата, көҙөн оҙағыраҡ ултыра кеүек...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

21

Ғаиләм-ҡәлғәм

8-14 ИЮЛЬ (майай) 2023 йыл №26 (1068)

ҺОРАУ - ЯУАП

## НИСЕК ОҘАЙТЫРҒА?

**Балалар пособиеһын оҙайтыу өсөн ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Рәсәйҙең Социаль фондында әйтеүҙәренсә, берҙәм пособие 12 айға тәғәйенләнә. Түләүҙе оҙайтыу өсөн ата-әсәләргә Дәүләт хеҙмәттәре порталында ғариза бирергә йәки Рәсәй Социаль фондының клиенттар хеҙмәтенә йә иһә Күп функциялы үҙәккә шәхсән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Әсәлек капиталынан түләү ҙә 12 айға тәғәйенләнә, уны Дәүләт хеҙмәттәре аша онлайн йәки Социаль фондҡа һәм Күп функциялы үҙәккә шәхсән мөрәжәғәт итеп оҙайтырға була. Элекке ҡағиҙәләр буйынса 3 йәшкә тиклемге беренсе балаға пособие - бер, һуңынан ике һәм өс йәшкәсә тәғәйенләнә. Уны сабыйҙың тыуған көнөнән һуң оҙайтырға кәрәк. Быны Дәүләт хеҙмәттәре порталында онлайн, шулай уҡ Социаль фондта йәки Күп функциялы үҙәктә шәхсән эшләргә мөмкин.

## СПОРТ ӨСӨН...

**Әсәлек капиталы аҡсаһын балаларҙың спорт секцияларына түләргә мөмкинме икән?**

- Федерация Советының иҡтисади сәйәсәт комитеты етәксеһе Андрей Кутепов һүҙҙәренсә, ошо мәсьәлә ҡарала. Әлеге башланғысты тормошҡа ашырыу ата-әсәгә Әсәлек капиталы ярҙамында балаһы йөрөгән спорт секцияларына һәм түңәрәктәргә түләргә мөмкинлек бирергә тейеш. "Мәсәлән, хоккей, футбол, теннис, бал бейеүҙәре ҡиммәтле спорт төрҙәре булып тора, ай һайын 10 мең һумдан ашыу аҡса кәрәк. Әсәлек капиталы аҡсаһын физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәттәренә йүнәлтеү бик күп балаларға физкультура һәм спорт менән шөғөлләнергә мөмкинлек бирер ине", - тип иҫәпләй автор. Документҡа ярашлы, Әсәлек капиталы аҡсаһын балалар шөғөлләнгән спорт секциялары һәм клубтары өсөн түләүгә йүнәлтергә тәҡдим ителә. Был беренсе, икенсе, өсөнсө һәм артабанғы 18 йәшкә тиклемге балаларға ҡағыла. Билдәле булыуынса, 2023 йылдың 1 февраленән беренсе балаға Әсәлек капиталының күләме - яҡынса 587 мең һумға, икенсеһенә 775,6 мең һумға еткерелде.

УҠЫТЫУСЫ КӘҢӘШЕ

# ОЛАТАЙ-ӨЛӘСӘЙҘӘРҘЕҢ...

## яуаплы осоро

**Оҙаҡҡа һуҙылған йәйге каникулдар башланды. Ғәҙәттә, ҡалаларҙағы ата-әсәләр балаларын ауылдарҙа йәшәгән олатай-өләсәйҙәргә оҙаҡ ҡына ваҡытҡа ҡунаҡҡа ебәрә. Рәхәтләнеп ял итһендәр һәм эшләһендәр, һаулыҡтарын нығытһындар, шулай уҡ башҡорт телен дә өйрәнһендәр, тигән ниәттән инде. Тәүгеләре тормошҡа ашалыр, ә бына аҙаҡҡыһы йыш ҡына килеп сыҡмай: балалары башҡорт телен өйрәнәһе урынға, киреһенсә, олатай-өләсәйҙәрен рус теленә өйрәтеп ҡайтып китә. Төп проблема шунда: өләсәйҙәр рус телендә һөйләшкән ейәндәре менән үҙҙәре рус телендә һөйләшә башлай. Былай барһа, киләсәктә телебеҙҙе һаҡлауы бик ҡыйын буласаҡ икәне кемдең башына инеп сыға икән?**



...Шуға мин ейән-ейәнсәрҙәрен ҡабул итәсәк өләсәй-олатайҙарға әсә телен өйрәтеү өсөн ете кәңәшемде тәҡдим итәм:

● Әлбиттә, беренсе сиратта, ейәндәрегеҙ һеҙҙе яратырға тейеш. Сөнки нимәнелер өйрәнеү уны яратыуҙан башлана. Белем биреү өлкәһендә шундай закон йәшәй: балалар уҡытыусы менән уның предметын бер бөтөн итеп ҡабул итәләр. Шуға уҡытыусыны яраталар икән, уның предметын да яраталар һәм теләп өйрәнә башлайҙар. Һеҙҙең осраҡта ла был закон эшләйәсәк.

● Ейәндәрегеҙ һеҙҙең менән рус телендә һөйләшә башлай икән: "Балам, мин рус телен аңламайым бит әле", - тип әйтегеҙ. Шул ваҡыт улар һеҙҙең менән башҡорт телендә һөйләшергә тырыша башлаясаҡ. Әйтергә кәрәк, был бик көсlө алым.

● Ҡартатай, ҡартәсәй, олатай, өләсәйҙәр (һәм башҡа туғандары) ейәндәре алдында тик башҡорт телендә генә һөйләшергә тейеш. Улар аңлаһын тип, рус теленә күсеп китергә ярамай.

● Ғөмүмән, балаларҙың аҡылы әле яңы барлыҡҡа килә, ә олатай-өләсәйҙәргә юғары кимәлдә, тип уйлайбыҙ. Был осраҡта әсә теленең яҙмышы кемдең ҡулында булырға тейеш? Әгәр ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ ыңғайына рус телендә һөйләшәһегеҙ икән - был аҡылһыҙлыҡ. Шуға аҡыллы булығыҙ.

● Ейән-ейәнсәрҙәр һеҙҙең менән рус телендә һөйләшеүҙәрен дауам итә икән - һеҙ барыбер башҡорт телендә яуап бирегеҙ һәм һөйләшегеҙ. Өйҙәге предметтарҙы тик башҡорт телендә атағыҙ. Мөмкин булғанда, үҙҙәренән әйттереп ҡарағыҙ.

● Ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ килеүенә уның йоҡо һәм уйын бүлмәләрен башҡорт телендәге һүрәтле китаптар һәм журналдар менән тултырып ҡуйығыҙ. Аш бүлмәһендә һәр ваҡыт "Юлдаш" радиоһы һөйләп торһон (һ.б). Йоҡлар алдынан ҡыҫҡа ғына әкиәттәр һөйләгеҙ. Бер үк әкиәтте бер нисә көн ҡабатлағыҙ. Һәм үҙҙәренән һөйләтеп ҡарағыҙ. Йәки бер һөйләгәнегеҙҙә йөкмәткеһен боҙоғоҙ. Улар шул ваҡыт һеҙҙе туктатып, дөрөҫ итеп үҙҙәре һөйләп иштерәсәк.

● Ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ башҡорт телендә һөйләһә, шулай уҡ ниндәйҙер һүҙҙе әйтергә өйрәнһә, ысын күңелдән һоҡланығыҙ, ҡыуанығыҙ һәм шатланығыҙ. "Афарин" тип арҡаларынан һөйөгөҙ. Ошо мәлдә тойоу өсөн улар тағы ла нығыраҡ тырышасаҡ.

Уңыштар теләйем!

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ТӘРБИӘГӘ БАЛА АЛАҺЫҢМЫ?

***Кем тәрбиәгә бала алырға мөмкин - Башҡортостан Республикаһының Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы белгестәре аңлата.***



Балиғ булған һәм эшкә һәләтле кешеләр генә тәрбиәгә бала алыу мөмкинлегенә эйә. Улар ир һәм ҡатын, шулай уҡ бер баланы йәки балаларҙы үҙ ғаиләһенә тәрбиәгә алырға теләгән яңғыҙ кеше лә булыуы мөмкин. Бының өсөн түләүле нигеҙҙә баланың опекуны йәки попечителе булырға, йәғни опека һәм попечителлек органы менән тәрбиәгә бала алыу тураһында килешеү төҙөргә кәрәк.

Үҙ-ара никахта тормаған кешеләр бер үк баланы тәрбиәгә ала алмай.

Кемдәр тәрбиәгә бала алыу хоҡуғына эйә түгел:

● ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгәндәр;

● алкоголизм йәки наркомания менән сирлеләр;

● опекун (попечитель) вазифаһын башҡарыуҙан ситләтелгән һәм, баланы уллыҡҡа алыу уларҙың ғәйебе менән юҡҡа сығарылған булһа, элек баланы уллыҡҡа алыусылар;

● кешенең ғүмеренә, һаулығына, намыҫына, енси теләгеһеҙлегенә ҡаршы енәйәттәр өсөн хөкөм ителгәндәр йәки енәйәт эше ҡуҙғатылғандар;

● ауыр йәки айырыуса ауыр енәйәттәр өсөн хөкөм язаһы бөтмәгән кешеләр;

● опекаға бала алыу мөмкинлеге бирмәгән сир менән яфаланғандар;

● тәрбиәгә бала алыу йәһәтенән әҙерлек үтмәгән кешеләр (яҡын туғандарынан, шулай уҡ уллыҡҡа бала алыу йәки тәрбиәләү тәжрибәһе булған кешеләрҙән тыш);

● икенсе илдә бер енесле никах теркәп, бергә йәшәгәндәр;

● никахта тормаған бер енесле никах рөхсәт ителгән дәүләт граждандары.

***Баланы уллыҡҡа алғанда ниндәй түләүҙәр ҡаралған - Рәсәйҙең Башҡортостан Республикаһы буйынса Социаль фонды белгестәре аңлата.***

Баланы тәрбиәгә алған бөтөн ғаиләләр ҙә бер тапҡыр бирелә торған түләү ала. Ул йылына бер тапҡыр индексациялана.

Пособиены уллыҡҡа алыусыларҙың, опекундарҙың, попечителдәрҙең йәки тәрбиәгә алған ата-әсәнең береһе ала. 2023 йылдың 1 февраленән түләү күләме 26 345 һум тәшкил итә.

**Ниндәй осраҡтарҙа түләү арттырылған күләмдә тәғәйенләнә?**

Бындай түләүҙәр:

● инвалид баланы

● 7 йәштән өлкән баланы

● бер туған балаларҙы тәрбиәгә алған ғаиләләргә бирелә.

2023 йылдың 1 февраленән ул артты, хәҙер уның күләме - 201 300 һум. Әгәр бер нисә баланы уллыҡҡа алалар икән, уларҙың һәр береһенә ҙур күләмдә түләү ҡаралған.

**Пособиены нисек юлларға?**

Баланы уллыҡҡа алыу тураһында суд ҡарары көсөнә ингәндән һуң 6 ай эсендә түбәндәге ысулдарҙың береһе буйынса ғариза бирергә:

● Дәүләт хеҙмәттәрендә

● Рәсәй Социаль фондының йәшәгән урын буйынса клиент хеҙмәтендә шәхсән йәки почта аша (был осраҡта документтарҙың раҫланған күсермәһен ебәрергә кәрәк)

● йәки Күп функциялы үҙәк аша

Ғариза биреү өсөн түбәндәге документтар кәрәк:

● уллыҡҡа алынған баланың тыуыу тураһында таныҡлығы;

● баланы уллыҡҡа алыу тураһында суд ҡарарының күсермәһе;

● балаға опека тәғәйенләнеүе тураһында документ.

Ғариза 10 көндән 20 эш көнөнә тиклем ваҡыт арауығында ҡарала. Аҡса 5 эш көнөндә күсә. Был турала тулыраҡ мәғлүмәт - Рәсәй Социаль фонды сайтында.

> ✓ ***Кеше үҙенең нәҫел тарихын белмәһә, алдан булған белемдәрҙе бөтөнләйгә юғалта һәм тормоштағы юлын "нуль" булып, яңынан башлай икәнен төшөндөм. Шәжәрәңде белмәһәң, һин бер кем дә түгел.***

# БАЛАЛАРЫБЫҘҒА БИРГӘН ТӘРБИӘ

## ейән-ейәнсәрҙәребеҙ тәрбиәһендә лә

**Тормошта шул ҡәҙәре бер-береһенә тап килгән парҙар осрай: бындай ҙу тиңен тапҡан бәхетлеләрҙең күңеле берҙәй асыҡ, уй-фекерҙәре уртаҡ була. "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2023" республика асыҡ конкурсында ҡатнашып, "Ғаилә ижады" номинацияһында икенсе урын яулаусы, уҙҙәренә терәк булырҙай ике ул үҫтереүсе Азалия һәм Юлай ВӘЛИЕВтар шундай парҙарҙың береһе. Улар менән 8 июлдә Рәсәйҙә билдәләнгән бик мәғәнәле байрамдарҙың береһе - Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө айҡанлы әңгәмә ҡороу форсаты тейҙе. Йәштәрҙең өлкәндәргә ҡарата мөнәсәбәте, балалар тәрбиәһе, бәхет серҙәре тураһында фекерҙәрен һеҙгә лә еткерәбеҙ, ҡәҙерле гәзит уҡыусылар.**

**▸ Өлгөлө башҡорт ғаиләһе кем өлгөһөндә барлыҡҡа килде? Ата-әсәйҙәрегеҙҙән ниндәй үрнәк алып үҫтегеҙ, ниндәй тәрбиә бирҙеләр һеҙгә?**

**Азалия:** Әлбиттә, ғаиләбеҙ тәү сиратта атай-әсәйҙәребеҙ өлгөһөндә, күңелдәребеҙгә улар һеңдергән инаныстарға таянып барлыҡҡа килде. Сығышым менән мин Әбйәлил районы Дәүләт ауылынан, әсәйем рус теле һәм әҙәбиәтенән, атайым тарих буйынса мәктәптә балаларға белем бирҙеләр, атайым хәрби-патриотик тәрбиә буйынса директор урынбаҫары булып та эшләне. Шуға атайымдың хәрби званиеһына ҡарап, мине бала саҡта "Азалия - дочь капитана" тип тә йө-рөттөләр. Тик ул арабыҙҙан бик иртә китте, ә әсәйем, шөкөр, 72-се йәшен ҡыуып, беҙҙе ҡыуандырып йәшәй. Ғаиләлә беҙ өс бала: апайым Әлфиә Ғәләмова Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, ағайым Азамат Магнитогорск металлургия комбинатында энергетик. Мин беренсе юғары белемде Башҡорт дәүләт аграр университетында алдым һәм декрет ялына тиклем Өфө ит-консерва комбинатында технолог булып эшләнем. Һуңынан юридик белем үҙләштереп, әле күсемһеҙ милек өлкәһендә һәм бер үк ваҡытта Орджоникидзе районының "Дуҫлыҡ" мәҙәниәт һарайында эшләйем.

Мин төпсөк булғас, өләсәй һәм олатай тәрбиәһе бик эләкмәне, улар оло йәштә инеләр. Атай-әсәй араһындағы матур мөнәсәбәтте, ир менән ҡатын бер-береһенә ярҙам итергә, терәк булырға тейеш, тигән өлгөнө күреп үҫтем. Улар миндә өлкәндәргә ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәт, эшһөйәрлек, туған телебеҙгә һәм мәҙәниәтебеҙгә һөйөү, туғандар менән аралашып йәшәү кеүек сифаттар тәрбиәләне, аҡты ҡаранан айырырға өйрәтте. Мин апайым менән ағайыма һис ҡасан исемдәре менән өндәшмәйем, малайҙарыма ла ошо тәрбиәне бирергә тырышам. Кешенең холоҡ-фиғеле генә түгел, тәрбиәһе лә нәҫелдән килә, тип уйлайым. Беҙҙең нәҫелдә талантлы кешеләр күп, атайым яғынан бөтәһе лә уҡытыусылар тиергә була. Әйткәндәй, беҙҙең тоҡомдоң фамилияһы Байымовтар ул. Тик атайым һәм беҙ генә ҡартатайымдың исеменән алынған Ғәләмов фамилияһын йөрөтәбеҙ. Был боронғо бер йолаға бәйле: баҡтиһәң, атайыма тиклем тыуған балалары үлеп тик торғас, шул бәләне яҙлыҡтырыу өсөн атайыма олатаһының исемен фамилия итеп биргәндәр. Был ярҙам иткән һәм унан һуң тыуған бер туғандары Байымов фамилияһын дауам итәләр. Бына шулай боронғо йола арҡаһында тоҡом үрсеп киткән.

**Юлай:** Мин Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында тыуып үҫтем. Әммә атайымдың тамырҙары Баймаҡ районы Темәскә, әсәйемдеке Күгәрсен районы Игебай ауылына барып тоташа. Атайым ғүмерен юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә арнаны, дәүләт автоинспекцияһында эшләне, ә әсәйем тегеүсе булды. Беҙ дүртәү: Урал ағайым, Айгөл апайым һәм игеҙәгем Азат. Мин Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органында эшләйем.

Ғаиләлә бирелгән тәрбиә тураһында әйткәндә, атайымдың эшенә бәйле буш ваҡыты бик һирәк булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙе тәртипкә, эшкә өйрәтте. Тимер-томор менән булышырға, төрлө транспортты ремонтларға ла атайҙан белдек. Иҫәнғолда йәшәгәс, мал тотманыҡ, әммә бесән мәле етһә, ул беҙҙе туғандарға, әсәйемдең яғынан олатай-өләсәйгә ярҙамға ебәрә торғайны. Ә Бөйөк Ватан һуғышы ветераны олатайым балта оҫтаһы булды, уның заманына күрә бик яҡшы йыһазландырылған оҫтаханаһы бар ине. Шунда беҙ бармаҡтарға сүкеш тейҙерә-тейҙерә ағастан төрлө кәрәк-яраҡ яһарға өйрәндек. Атай менән олатайҙан ир-егет тәрбиәһен шулай алһаҡ, әсәйебеҙ наҙлап ҡына беҙҙе бөхтәлеккә, таҙалыҡҡа, яҡындарыбыҙҙы хәстәрләргә өйрәтте. Мин уның тегеү, бәйләү оҫталығын да үҙемә алғанмын әле. Әсәйебеҙ бер ваҡытта ла ауыр һүҙ әйтмәне, шуклыҡтарыбыҙ өсөн әрләмәне, эш ҡушһа ла матур ғына итеп үтенесен әйтә лә, беҙ баш тарта алмай ҙа ҡуя инек. Ғаиләбеҙҙә башҡорт мәҙәниәте, тарихына ҡыҙыҡһыныу уятып үҫтерҙеләр, мин музыка мәктәбендә ҡурай курсын да тамамланым. Шулай ҙа бик күп нәмәне беренсе юғары белем алған Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында уҡығанда анланым. Иң мөһиме, шәжәрәбеҙҙе таптым.

**▸ Шәжәрәле булыуҙың әһәмиәте тураһында ла һөйләп үтегеҙ әле улай булғас...**

**Юлай:** Уҡыған йылдарҙа төрлө тарихи сығанаҡтарҙы өйрәндек һәм үҙебеҙҙең шәжәрәне белеү теләге тыуҙы. Атай-әсәйҙән һорашҡас, 2-3 быуын ата-бабаларыбыҙҙы ғына хәтерләүебеҙ асыҡланды. Ә бына туғыҙынсы быуынбыҙға тиклем мәғлүмәтте курсташымдың шәжәрәһенән таптым, ул Темәстән туғаным булып сыҡты. Вәлиев фамилияһы Вәлиәхмәт атлы ҡарт олатайыбыҙҙан башланып китеүе асыҡланды. Кеше үҙенең нәҫел тарихын белмәһә, алдан булған белемдәрҙе бөтөнләйгә юғалта һәм тормоштағы юлын "нуль" булып, яңынан башлай икәнен төшөндөм. Шәжәрәңде белмәһәң, һин бер кем дә түгел. Ә белһәң, үҙеңде тотошон, тойомлауың бөтөнләй башҡаса була. Шәжәрәмде күргәс, тамырҙарым шул тиклем боронға барып тоташыуына, шәжәрә ағасыбыҙҙың яңынан-яңы ботаҡтар ебәреп үҫә барыуына иҫем китте. Был башҡорт халҡының да бай тарихлы, бик боронғо милләт булыуын раҫлаусы бер сығанаҡ бит. Сөнки һәр милләт кешеһе лә беҙҙең кеүек тамырҙары ҡайҙа барып тоташыуын аныҡ белә, раҫлай алмай. Бында төрлө заман һынауҙарына бирешмәй, тарихыбыҙҙы һаҡлап килгән өлкән быуын кешеләренә рәхмәт әйтергә кәрәк. Билдәле булыуынса, кеше һәр саҡ үҙен ниндәйҙер ҙур нәмәнең мөһим өлөшө итеп хис итергә теләй һәм "бер боронғо халыҡтың тоҡомо мин" тигән аңлау "төркөм өлөшө", "компания хеҙмәткәре" тигәнгә ҡарағанда күпкә көслөрәк хистәр уята, кешенең үҙаңы барлыҡҡа килә. Ә бының үҙ сиратында ниндәй әһәмиәткә эйә булыуы хаҡында әйтеп тораһы ла түгел.

Шәжәрәңде белеүҙең тағы бер бик мөһим әһәмиәте күптән донъя кимәлендәге ғалимдар ғилми хеҙмәттәрендә раҫлаған фактҡа бәйле: ете быуын үтмәйенсә, туған тейеш кешеләр өйләнһә, уларҙан тыуған быуында ген кимәлендә кире үҙгәрештәр булыуы ихтимал. Беҙҙең ата-баба быны бик яҡшы белгән һәм тоҡомдарының сәләмәтлеге өсөн хатта икенсе ырыу һылыуҙарын урлау йолаһы ла ҡуҙәтелгән.

**▸ Яңы ғына килен һәм кейәү булғанда бер-берегеҙҙең ғаиләһендә хайран иткән ниндәй матур йолалар, ғәҙәттәр күрҙегеҙ? Һеҙҙең ғаиләлә улар дауам ителәме?**

**Азалия:** Тәү сиратта урындағы һөйләшкә бәйле ҡыҙыҡ осраҡтар күп булды. Билдәле булыуынса, Әбйәлилдә атай-әсәйҙән өлкән ир кешегә "апа" тип өндәшәбеҙ, ә Юлайҙар яғында олатай йәки бабай тип әйтәләр икән. Ҡыҙының балаларына олатай-өләсәй булһалар, улының балаларына - ҡартәсәй-ҡартатай. Минең өсөн сәйер генә күренгән ошо йолаларына тәүҙә ҡаршы әйтеп маташтым. Шулай ҙа был осраҡта бик үк хаҡлы булмауымды аңланым һәм ҡабул иттем.

Атай-әсәйем гел мәктәптә эштә, өйҙә дәфтәрҙәр тикшереү, ял-дарҙа уҡыусылар өсөн саралар ойоштороу тип йүгереп йөрөгәс микән, көн һайын ҡоймаҡ, бәлештәр бешерелгәнен хәтерләмәйем. Ә иремдең ғаиләһендә нәҡ шулай ине: ҡәйнәм көн һайын иҫ киткес тәмле ҡоймағын ҡоя, төрләндереп бәлештәр бешерә, аш-һыу яраштыра һәм бөтә балаларын бергә йыйып, матур табын ҡора торғайны. Бына ошо берҙәмлек мине хайран итте, күңеләмә ятты һәм үҙ ғаиләмдә лә дауам итергә теләгән күренештәрҙең береһе булды.

**Юлай:** Был теманы дауам итеп, Азалияларҙа бишбармаҡты ҙур табаҡҡа һалып яраштырыуҙары, һәр кемдең шунан үҙенә һоҫоп алып ашауы ҡыҙыҡ күренде тәүҙә мәлдә. Был тиклемде нисек ашап бөтмәк кәрәк, тип хайран ҡалдым... Унан һуң, Әбйәлилдә ҡайҙа барһаң да, кемгә мөрәжәғәт итһәң дә башҡортса һөйләшеүҙәре һоҡландырҙы ла, аптыратты ла. Район үҙәге Аҫҡарҙа дарыуханала, магазинда, банкта ла йомошоңдо башҡортса йомошлап сығырға була. Иҫәнғолда урыҫлашыу көслөрәк ине шул элек.

**▸ Бер-берегеҙҙе ниндәй сифаттарығыҙ өсөн оҡшатып ҡауыштығыҙ?**

**Юлай:** Рухлы башҡорт ҡыҙына өйләнгем килгәйне һәм юлымда Азалия осраны. Ул башҡортса матур һөйләшә, башҡорт мәҙәниәтен, халыҡ ижадын ярата, сәләмәт тормош яҡлы. Башҡорт ҡыҙҙарына хас һылыулығы, асыҡ күңеле, яҡшылығы, донъяға оптимистик ҡараште булыуы оҡшаны. Уның менән барыһы тураһында ла һөйләшеп, кәрәк саҡта бер-беребеҙгә дөрөҫ йүнәлеш, кәңәш биреп ебәрәп була.



**Азалия:** Юлайҙың сәләмәт тормош алып барыуы, ғаилә ағзаларына ҡарата хәстәрлекле, ышаныслы булыуы арбағандыр мине. Ул балаларға яҡшы атай. Ҡасан, ҡайһы юлдан барырға белә. Ул минең көн эсендә бойомға ашырырға кәрәкле мең дә бер үйниәтем араһынан кәрәклеһен, әһәмиәтлеһен һайларға ярҙам итеүсе, йүнәлеш биреүсе терәгем.

**▸ "Ыҫын ир-егет" тигән төшөнсә бар бит инде. Һеҙҙеңсә ул ниндәй кеше? Улдарығыҙға ла шундай тәрбиә бирергә тырышаһығыҙмы?**

**Азалия:** Ыҫын ир-егет - яҡындарына ҡарата хәстәрлекле, иғтибарлы кеше, тип иҫәпләйем. Был йәһәттән улдарыбыҙ аталарынан үрнәк ала, дуҫ ҡыҙҙарының байрамдарына һәр ваҡыт сәскәләр тотоп барырға ла ғәҙәтләндерҙем. Ә инде малайҙар булаҫаҡ тормош иптәшен әсәйҙәренә ҡарап һайлауын күҙ уңында тотоп, үҙем уларға башҡорт ҡатын-ҡыҙының тик матур сифаттарын күрһәтергә тырышам. Улдарыбыҙ икеһе лә тәүгә эш хаҡынан миңә матур күлдәк алып бирәбеҙ тинеләр. Маҡсаттарына ирешеүсән дә булһындар, тип теләйем. Билдәле бер йәшкә етеүҙәренә ниндәйҙер кимәлдә унышҡа өлгәшһендәр.

**Юлай:** Үҙен яҡлай алырлыҡ булырға һәм яҡындарына ла ошо ышанысты бирергә тейеш ысын ир-егет. Шуға физик яҡтан көс-

✓ *Ир менән ҡатын да бер-береһенең етешһеҙлектәрен ҡапларға, бүтәндәргә күрһәтмәҫкә яратылған. Һинең тормош юлдашың һинең турала бер кеше белмәгәнде белә. Ул, кейем кеүек, һине ҡаплап торор өсөн кәрәк.*

лә булһындар тип, улдарыбыҙҙы бәләкәйҙән спорт секцияларына йөрөтәбеҙ, был уларҙы дисциплинаға ла өйрәтә.

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр бит инде. Был йәһәттән дә дөрөҫ тәрбиә бирергә тырышам: ниндәйҙер эшкә тотонам икән, мотлаҡ малайҙарҙы эргәмә саҡырып алам. Эш ҡоралдарын үҙҙәренә биреп ҡуям, көстәренән килгәнсә миңә ярҙам итәләр. Миңә уларҙың ярҙамы кәрәк түгел, үҙем генә лә эшләп ҡуя алам, әммә малай кеше күреп, эш рәтен белеп үҫергә тейеш. Шул арала уларҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙан алып, мөһим тәрбиәүи темаларға тиклем һөйләшеп тә өлгөрәбеҙ. Ғөмүмән, балалар үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡас, юғалып ҡалмаһындар өсөн бөтә яҡлап та тәрбиәне дөрөҫ һәм үҙ ваҡытында биреп өлгөргөбөҙ килә.

**Бөгөн йәмғиәттә бала тәрбиәһе ҡатын-ҡыҙ иңенә һалынып, ир-егеттәр һирәк ҡатнаша, тиҙәр. Һеҙҙең ғаиләлә быны тап киреһе күҙәтелә, ахыры, ошо турала фекерҙәрегеҙҙе белдереп китһәгеҙ ине.**

**Юлай:** Ваҡыт шул тиклем тиҙ үтә, балаларҙың үҫкәнен һиҙмәй ҙә ҡа-рөттөк. Ә хәҙер М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уҡыйҙар. Был ике мәғариф учреждениеһында ла башҡорт мөхитен булдырыу өсөн бик күп көс һалына, яҡшы педагогтар эшләй һәм улар телде өйрәтеүҙә, рухи тәрбиә биреүҙә төп ярҙамсыларыбыҙ. Үҙебеҙҙең башҡорт донъяһына ҡағылған сараларҙы ла ситтә ҡалдырмайбыҙ, әүҙем ҡатнашып торабыҙ. Был да уларҙы башҡорт мәҙәниәтенә, теленә, сәнғәтенә, мираҫына яҡынайта. Бала саҡта Иҫәнғолда беҙгә бына шундай тел мөхите булмауы үкенесле, шуға улдарым өсөн барыһын да эшләргә тырышам, үҙем дә башҡортса яҡшыраҡ аңлай, һөйләшә башланым.

**Азалия:** Эйе, башҡортса белһендәр, уҡыһындар, һөйләшһендәр тип тырышабыҙ. Мин балалар менән башҡортса аралашырға тырышам, атайыбыҙ туған телдә китаптар, журналдар алып ҡайта. Башҡорт йолаларын, ауыҙ-тел ижадын, мәҙәниәтен белһендәр, тамырҙарын онотмаһындар өсөн дә бар көсөбөҙҙө һалабыҙ. Өлкән улыбыҙ Таһирҙы атаһы думбыра түңәрәгенә яҙҙырҙы, ҡурайҙа уйнарға үҙе өйрәтә. Ә кесебеҙ Хәйҙәр ҡумыҙҙа сиртә, мин

# МЕНӘН...

## ҡатнашабыҙ булып сыға

лаһың. Шул арала уларға дөрөҫ рухи, әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһе биреп тә, яҡшы кеше итеп үҫтереп өлгөрөргә лә кәрәк. Шуға улдарым менән үткәргән һәр минутым ҡәҙерле, буш ваҡытымды улар менән һөйләшеүгә, уйнауға, ниндәйҙер ҡул эштәре эшләүгә, дәрес әҙерләүгә бүләм. Әйткәндәй, тәүҙә балалар баҡсаһына, хәҙер инде мәктәпкә үҙем алып барам, алып ҡайтам балаларҙы һәм юл ыңғайында көн буйы йыйылған хәбәрҙәрен һөйләп, ҡыуаныс-көйөнөстәрен бүлешеп киләләр. Тик ысынлап та балаһын килеп алған атайҙарға ҡарағанда әсәйҙәр күберәк шул, был нимәгә бәйлелер инде. Ни тиһәң дә, заман үҙгәрә, элекке кеүек, ирҙәр иртәнән кискә тиклем эшкә китеп, ҡатындар өй ҡарап ултырған мәл түгел хәҙер. Ҡалала бигерәк тә инде: хужалыҡ юҡ, мал юҡ, ашарға мультиварка бешерә, керҙе машина йыуа. Атайға ла, әсәйгә лә бала тормошонда бер тигеҙ ҡатнашырға, бурыстарҙы, яуаплылыҡты уртаҡ бүлергә шарттар бар, тимәк. Шуға беҙ хатта дәрестәрен дә алмашлап әҙерләшәбеҙ. "Баланы тәрбиәләйем тиһәң, үҙеңдән башла", тиҙәрме әле. Балаң менән үҙеңде нисек тотһаң, ул да үҙ сиратында балаларына шундай мөнәсәбәт күрһәтәсәк. Тимәк, беҙ ейәнейәнсәрҙәребеҙҙең тәрбиәһендә лә ҡатнашабыҙ килеп сыға. Атай кеше быны һәр ваҡыт хәтерендә тоторға тейеш.

**Ҡала шарттарында балаларҙы башҡорт мөхитендә тәрбиәләү ҡатмарлымы?**

**Юлай:** Был мәсьәләнең мөһимлеген аңлағас, үҙебеҙ өсөн ҡатмарлы тип иҫәпләмәйбеҙ. Алыҫ булһа ла, баш ҡаланың иң яҡшы милли учреждениеларының береһе - 308-се Башҡорт балалар баҡсаһына йөбейейем. Шулай үҙебеҙҙең ғаилә ансамбле лә барлыҡҡа килде.

**Һеҙҙеңсә бәхетле, ныҡлы ғаиләнең, ир һәм ҡатындың татыу йәшәү сере нимәлә?**

**Юлай:** Моғайын да, үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн ҡуймауҙа, бер-береңә ихтирам менән ҡарауҙа һәм аңларға тырышыуҙалыр. Сөнки илерткес мөхәббәт хисе йылдар үтеү менән һүрелә төшөргә мөмкин, гел ғашиҡ булып та йөрөп булмай. Ә бына һайлаған кешеңде тыңлай, аңлай һәм ҡабул итә белһәң, тормош ығы-зығыларын еңеп сығырға мөмкин.

**Азалия:** Мин дә бер-береңде ишетә белеү, күтәрмәләү, кәңәшләшеп эшләү, бер-береңде ҡайғыртыу парҙарҙы бәхетле итә, тип иҫәпләйем. Атай-әсәй, ҡайны-ҡәйнәнең дә йәштәргә ҡарата матур мөғәмәләһе ғаилә нигеҙен нығыта, уларҙың ризалығын белеп йәшәү ышаныс өҫтәй. Рәхмәтле була белеү ҙә татыулыҡты арттыра.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күптәргә матур өлгө күрһәтерҙәй, әммә шул тиклем тыйнаҡ, итәғәтле парҙың йәштәргә әйтер һүҙе тураһында һорағас, Юлай Мәхмүт улы: "Кеше тормошонда ғаилә ҡиммәттәренән дә юғарыраҡ нәмә юҡ", - тине һәм оло быуын кешеләре менән йышыраҡ аралашыу, туғандарҙы ҡунаҡҡа саҡырыу, балаларҙы затырыу менән таныштырыу, ғаилә ағзаларына иғтибарҙы күберәк бүлеү мөһимлеген әйтте. Һәр кемебеҙ быларҙы иҫтә тотайыҡ һәм үҙ ғаиләбеҙҙә гүзәл ғәҙәттәргә нигеҙ һалып, киләсәк быуындарға тапшырып, ошондай матур башҡорт ғаиләләре төҙөлөүенә сәбәп итәйек.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ИР ҺӘМ ҠАТЫН...

## бер-береһенең кейеме

**Изге Ҡөрьәндә "Ир менән ҡатын бер-береһенең кейеме", тип әйтелә. Был һүҙҙәргә тәрән мәғәнә һалынған, сөнки Аллаһы Тәғәлә беҙҙең асылды беҙгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ белә. Әйҙәгеҙ, "кейем" һүҙенең мәғәнәһенә төшөнөп ҡарайыҡ башта, ошо юҫыҡта үҙебеҙҙең икенсе яртыбыҙға күҙ һалайыҡ.**



Халыҡта "Кейемгә ҡарап ҡаршылайҙар" тигән мәҡәл бар. Кейемеңдең таҙалығы, бөхтәлеге, төҫө - һинең визит карточкаң ул. Кейемең матур икән, тимәк, һин үҙеңде баһалай, ҡәҙерләй беләһең, тигән һүҙ. Ә бысраҡ, йыртылған, иҫкергән кейем үҙеңде һанламауыңды күрһәтә. Кейем һинең шәхесеңдең визит карточкаһы.

Икенсе яртың да - һинең визит карточкаң. Әгәр уны йонсотһаң, хәлдән тайҙырһаң, өҫ-башын ҡарамаһаң - иң тәүҙә үҙеңә зыян килтерәһең. Үҙ шәхесеңә, үҙ көсөңә ышанысын юғалтҡан, бер ҡиммәте лә булмаған хәләл ефетең һинең дә шундай уҡ яҙмышлы булыуыңа ишаралай. Тимәк, һеҙ бер-берегеҙҙе генә түгел, үҙүҙегеҙҙе лә баһалай белмәйһегеҙ.

Бәхеткә күрә, кейем беҙҙе матурлау менән бергә, кеше күҙенән йәшерергә тейеш булған урындарыбыҙҙы ла ҡаплай. Кейенеү - ул ниндәйҙер дәрәжәлә серҙәреңде һаҡлаусы ла булып тора. Уйлап ҡара, кейемең йыртылып йәки һүтелеп китһә, кешеләр алдында ниндәй уңайһыҙ хәлгә ҡалыр инең.

Ир менән ҡатын да бер-береһенең етешһеҙлектәрен ҡапларға, бүтәндәргә күрһәтмәҫкә яратылған. Һинең тормош юлдашың һинең турала бер кеше белмәгәнде белә, башҡаларҙан йәшерелгәнде күрә. Ул, кейем кеүек, һине ҡаплап торор өсөн кәрәк. Әгәр хәләл ефетеңдең хаталарын, кәмселектәрен йәшерер урынға уларҙы асып һалырға тырышаһың икән, һин уның өсөн "кейем" була алмайһың. Бына шуның өсөн дә икенсе яртыңды башҡалар менән сағыштырырға тырышма, сөнки башҡаларҙы бит һин "кейем"дә генә күрәһең.

Кеше кейеп йөрөгән әйберҙең генә ҡиммәте бар. Бер кейем дә төргәктә ятыр өсөн тегелмәй. Икенсе төрлө әйткәндә, кеше кейемгә мохтаж булған кеүек, әйбергә лә хужа кәрәк. Кеше өҫтөндәге кейем һөйләй, ишетә, күрә, хатта уйлай кеүек. Иң матур кейем дә хужаһын икенсе төрлө итә алмай. Мәғәнәһеҙ кешенең кейеме лә матур күренмәй.

Беҙ ҙә шулай бөтә яҡтан килгән өлгөлө тормош иптәше эҙләйбеҙ. Ә үҙебеҙҙең шул өлгөгә ярау-ярамауыбыҙ тураһында күп осраҡта уйлап та бирмәйбеҙ. Иң шәп кейем дә бөтә кешене матурлай алмаған кеүек, яҡшы тормош иптәше лә өлгөлө ғаилә тормошон үҙе генә ҡора алмай. Иң беренсе үҙебеҙгә яҡшы юлдаш булыу юлдарын эҙләргә, таҙа, һәйбәт мөнәсәбәттәр булдырырға, уларҙы һаҡларға өйрәнергә кәрәк.

Ир менән ҡатын бер-береһенә кейем булғас, улар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең гүзәллеге хаҡына уларҙың бер-береһенә яраҡлашыуы мотлаҡ. Кейем кейеп кенә танылып булмай, кейемгә ниндәйҙер деталдәр өҫтәргә тейешбеҙ. Шуның кеүек, үҙебеҙҙең хәләл ефетебеҙгә ярашлы йөрөргә, торорға, эшләргә, нимәлер хәл итергә тейешбеҙ.

Кейем - беҙҙе һаҡлаусы ла. Ҡаплауҙан тыш, кейем беҙҙе һалҡындан, түҙеп торғоһоҙ эҫенән, бысраҡтан, саңдан һәм башҡаларҙан һаҡлай. Беҙҙең тормошҡа, тирегә ниндәйҙер ҡурҡыныс янаһа, беҙ кейемгә нығыраҡ төрөнәбеҙ бит. Ә киреһенсә эшләһәк һәм кейемде ғәйепләһәк, беҙ иҫәр һәм ғәҙелһеҙ булыр инек.

Тормош юлдары ҡатмарлы, ир менән ҡатын араһын һалҡынайтыусы сәбәптәр ҙә етерлек. Һеҙ ғүмер юлында осраған шатлыҡ һәм ҡайғыларҙы бүлешергә вәғәҙә биргәнһегеҙ икән, төрлө ҡаршылыҡтарға осрағанда ла арағыҙҙағы мөхәббәт нығынырға, бер нисек тә һүнмәҫкә тейеш. Һеҙ бит ауыр ваҡытта бер-берегеҙгә терәк булырға яралғанһығыҙ. Ауырлыҡ осраған һайын, айырылышыу тураһында уйлау йәки икенсе яртыңды ғәйепләү - туңған саҡта кейемдәреңде сисеп ташлау менән бер. Тап шул мәлдә ул һеҙгә кәрәк бит. Ауыр мәлдәрҙә хәләл ефетеңдең терәге мөһим. Әгәр кейемгә ныҡлап төрөнмәһәң, ел уны йолҡоп алып китәсәк, тимәк, һеҙҙең аралар һыуынасаҡ.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**"Ир менән ҡатын бер-береһенең кейеме" тигән һүҙҙәр менән килешәһегеҙме? Һеҙҙең тормош иптәшегеҙ һеҙгә "кейем" була алдымы?**

***Лариса Фәтҡуллина, пенсионер:*** Мин Ҡөрьән Кәрим китабын бер нисә тапҡыр башҡортса тәржемәлә уҡып сыҡтым. Ундағы тәрән фекерҙәргә хайран ҡалдым һәм, ысынлап та, ундағы һүҙҙәр беҙҙе Яратыусы тарафынан әйтелгәндер, тигән фекерҙәмен. Ҡөрьән беҙҙе тик яҡшылыҡҡа һәм инсафлыҡҡа өйрәтә. Ә был аятта иһә ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында һүҙ бара. Әлбиттә, мин был фекер менән килешәм. Әгәр ир менән ҡатын бер-береһен ҡаплаусы, һаҡлаусы булып, ярашып йәшәй алмай икән, тормош та килеп сыҡмай.

***Фәйзрахман Сәғетдинов, эшсе:*** Был фекер бик дөрөҫ, ләкин тормошта барыһы ла ыңғай ғына килеп сыҡмай. Ғаилә ҡорғанда уҡ, бер-беребеҙ менән ярашып йәшәй алырбыҙмы икән, тип уйланырға кәрәк. Кешеләр төрлө-төрлө ғаиләлә тыуа, йәшәй, төрлө тәрбиә ала. Шуға ла бер бөтөн булып йәшәп китеү өсөн күп ауырлыҡтар кисерергә, утты-һыуҙы үтергә тура килә, түҙмәгәндәр айырылышып та ҡуя. Түҙгәндәр генә ҡартайғансы бергә йәшәй, хатта береһе донъя ҡуйһа, икенсеһе лә тиҙ генә уның артынан китә. Бына минең ҡайным менән ҡәйнәм шулай булды. Улар бер-береһенә ярап, бер-береһенә "кейем" булып, 75 йәшкә тиклем йәшәнеләр ҙә, бер-бер артлы донъя ҡуйҙылар.

***Сәрбиямал Монасипова, мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Аллаһы Тәғәлә биргән бер генә ғүмерҙе нисек башҡаларға сарыф итмәк кәрәк! Мин кейәүгә сығып ҡараным да, кешегә яраҡлашып, тик уның көйөнә генә бейеп йәшәгем килмәгәс, ташланым да ҡайттым. Башҡаса ғаилә ҡороу тураһында уйлап та ҡараманым. Былай рәхәтерәк, бер кем ҡамасауламай, бер кемгә лә ярарға кәрәкмәй. Бала аҫрап, ир ҡарап, кем рәхәт күргән, әйтеп ҡарағыҙ әле миңә?

***Айсыуаҡ Ғәлимов, механизатор:*** Эйе, ир менән ҡатын бер-береһенә "күлдәк" булырға тейеш. Минең ҡатын миңә "күлдәк" була алманы, минең эсеүем, етешһеҙлектәрем менән килешергә теләмәне. Артыҡ ғауғалашмай, тыныс ҡына айырылыштыҡ. Бар мөлкәтемде, һалған йортомдо ҡатыным менән улыма ҡалдырҙым да, атай йортона ҡайтып киттем. Үҙем теләгәнсә йәшәйем. Әлбиттә, яңғыҙыма күңелһеҙерәк, ләкин ireклемен, шуға маһайып йәшәйем.

ТОРМОШ БИТ УЛ!

# ХЫЯНАТТЫ ЛА...

## ғәфү итеп була торғандыр

**Яҡын кешемдән иремдең икенсе ҡатынға әүрәп йөрөгәнен, бына ошо мәлдә йән кисәгемдең теге ханымда ҡунаҡта булыуын ишеткәс, шаҡ ҡаттым. Һыуыҡ ут ялмаНы тәнемде, хатта дерелдәп ултырҙым бер килке. Шунан башым әйләнеп, күңелем болғанды. Үҙемә ҡарағанда ла нығыраҡ ышанған иремде икенсе бисә ҡуйынында күҙ алдына килтереү менән ашҡаҙаным булған ғына ризыҡты укшытып "сығарҙы". Яттым һуҙылып. Ауыҙымды асһам, тағы ла ҡоҫоп ебәрермен тип, шымдым. Хәбәр килтергән кеше бүләмәмә килеп ингәс кенә яңғыҙ түгеллегем иҫемә төштө. Ул: "Бер һинең генә ирең йөрөмәй, онотма. Бәлки, бөтә ирҙәрҙең дә һөйәркәләре бар икәнен белеү хәлеңде еңеләйтер, тип кенә әйтәм. Бирешмә!" - тине лә сығып китте.**

Мәктәптән ҡайтҡан ҡыҙымды ашаттым да кире ауҙым. Мейемде берең-нән-береһе зәһәрерәк, хәтәрерәк мең төрлө уй-пландар ыраулай башланы. "Тимәк, ул эргәләге ҡалала, һөйәркәһендә! Ә беҙҙең өсөн ул эштә. Барырға! Икәүһен дә тоторға! Ике уйнашсыны фашлауымдан тантана итеп, шарҡыл-дап көлөргә, битгәрен тәкөрөп, арттарына тибеп сығып китергә! Ю-ю-ю-юҡ, хәлдән килмәй улай мәсхәрәләнергә... Ай Аллам, ғәрлеге ни тора бит әле! Белмәгән-нитмәгән бисә булһа, бер хәл. Тьфү, ике ирҙән айырылғанына бар-маһа, башҡа ҡатын-ҡыҙ бөткәндер!

Иртәгә "эштән" ҡайтырға тейеш. Ни йөҙө менән күренер икән? Тукта, ҡәйнәмә, әсәйемдәргә шылтыратайым, рисуай итәйем әле үҙен!

Шуны ғына көткәндәй, әйберҙәрен төйнәп сығып китһә? О-о-о-й, нисек кенә күтәрер икән быны йөрәгем? Кемгә барырға, кемгә һөйләргә? Булмай! Үҙ даныңды үҙең һатырға өлгөрөрһөң, бер кем белмәҫкә тейеш! Ҡыуам, ана бара юлы! Үҙе аңлатыр туғандарына, ә минең ғәйеп юҡ!

Аһ! Йөрәгем сәнсә, ир уйлап үлеп ятаһы түгел! Күкрәгем яна ла ул, ирендәр кибә... И-и-и-и, меҫкен, һыу баҫа торған утмы ул? Күнәкләп һемермәйһең-ме? Ни эшләргә һуң? Әҙәм алдында ҡайһылай оят, ире ташлап китте, тип көлөрҙәр инде...

Ҡайһы ерем оҡшаманы икән туғыҙ йыл бергә йәшәп? Оҡшамағас, нишләп өндәшмәй генә гонаһҡа батып йөрөй икән битемдән көлөп... Үләмме икән... Тын алыуҙары ла ҡыйын... Күкрәгем янып бара... Һыу, һыу...

Балаҡайым, рәхмәт. Ю-ю-ю-ҡ, бер нәмә лә булманы. Эйе, иртәгә ҡайта. Бешерәм. Ҙур бәлеш, әлбиттә. Иртәгә ҡайта бит, сабыр итәйек саҡ ҡына, йөмә.

О-о-о-о, битһеҙ, балаһының өҙәләнеп көткәненә төкөрөп тә бирмәй йөрөгән атай кәрәкме икән? Уф, нисек ер йотмай уҙҙәрен...

Ҡыуам. Йүнһеҙ кәнтәйҙән, даны әллә ҡасан сыҡҡан бисаранан ҡалған ирҙе нисек эргәмә һалырмын? Фу, ерәнгес...

Мине яратҡан һымаҡ итеп ҡыланамы икән унда? Бышылдаймы икән миңә генә әйткән һүҙҙәрен? Башым ауырта, дарыу... Әллә шул дарыуҙы күберәк итеп эсергә лә йығылырға? Минһеҙ ҡалһа, ҡәҙеремде белер!

Аллаҡайым, тәүбә,тәүбә! Ни һөйләйем мин, ауыҙымдан ел алһын, әстәғәфирулла тәүбә! Балам, балам хаҡына кисер мине, Аллам, яңылыш әйттем!

Ни эшләргә... Ни эшләргә... Бәлеш тағы уға! Шулайтмай ней!

Улай ҙа булмай, бала көтә бит. Бәлешен бешерермен, мунсаһын ягырмын, эт күңеле бер һөйәк. Әммә! Инде үҙемә ҡағылдырмам! Бармағы менән дә ҡа-ғылмаясаҡ ул миңә, әҙәм аҡтығы! Һөйәркәһенән наҙлар, туймаған нәмә!

Йә Алла... Үҙем һуң? Һағынманыммы мин уны? Көтмәнемме? Яратма-ныммы ни?... Ул бит эшлекле, аҡыллы, уңған... Сығып та китер, индереп тә алырҙар. Ана, ҡатыны бар, тип тормаған бит әле, иң әрһеҙе ҡуйынына һи-кергән, кәнтәй!

Ирһеҙ, унһыҙ нисек йәшәрмен? Унан башҡа минең кемем бар? Булырмы? Кәрәкме? Юҡ. Миңә башҡа кемдер кәрәкмәй. Уның һымаҡ мине белгән ке-ше юҡ, булмаҫ та.

Тимәк, ул мине яратмай хәҙер. Шуға... Ҡайһылайтып көлөргә булды минән яҙмыш, ә? Көтмәгән яҡтан килтереп туңҡайта һуҡты. Ни эшләргә? Былай ғына ла ҡалдырып булмай...

Тукта, тукта... Ә ни өсөн мин уның менән һөйләшмәйенсә, илаулап, теләһә нәмә уйлап ятам әле? Яратышып өйләнештек, матур ғына йәшәй инек. Ни-лектән яңылышып китте икән? Минең бер ҙә генә ғәйебем юҡмы икән? Шу-лай укмы? Кем-кем, ул юктан ҡуба торған кеше түгел. Мин, үәт, исмаһам, дыуамал, телем ни һөйләгәнен ҡолағым ишетмәй китә.

Тыныслан әле, үҙең нисек йәшәрһең унһыҙ? Ә бөртөк балағыҙ ике уртала йөрөрмө илаулап? Кемде тағы ла уны яратҡан һымаҡ һөйә алырһың икән? Яңғыҙ йәшәүҙәре кемгә рәхәт икән? Сеү! Ҡайтыр. Аңлатыр.

Таң да атты. Тор. Йыуын. Матур күлдәгеңде эләктер, биҙән-төҙән! Беҙ ҙә нисауа! Бәлешеңде ҡуй! Яратмаһа - инәлеп тә ҡалдыра алмаҫһың, яратһа - ҡыуһаң да китмәҫ! Кем яңылышмай?

Ана, һин яратҡан гөлләмәләрҙе тотоп инеп тә килә.

Ҡапыл! Ҡапыл ғына уның ни тиклем ҡәҙерле икәнен аңланым. Бер генә мәл, бер генә һөйләм, бер генә яңылышыу кәрәк булған икән! Бұлһын! Кем-дендер ҡосағын татып, сит ҡатындың наҙҙарына иҫереп йөрөһә лә - ул мине-ке! Минеке! Минең йәрем, минең ирем, минең баламдың атаһы! Ул - тик ми-неке! Яратам, уны ғына һөйәм, уны ғына көтәм, ул тип йән атам, уны һағы-нам, ул тип зарығам, һарыларға һабышам... Ишетәһегеҙме? Йоғонаһы бул-маһыҙ! Бер кемгә лә бер ҡасан да бирмәйем мин уны!

Әлегә... "Иҫәр" ҡатын ролен уйнап алайым саҡ ҡына. Ниҙәр һөйләрһең икән, йәнем? Тыңлайым. Үҙең аңлатаһыңмы? Аңлайым. Мин дә яратам. Мин дә һағындым. Кисерәм. Ғәфү итәм мин һине, яратҡан, берҙән-бер ирем, баламдың атаһы!.."

**Альмира ИҪӘНОВА.**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

**Баланың һаулығын ҡайғыртыу, уның тормошон кәрәкле әйберҙәр менән тәьмин итеү һәр ата-әсәнең төп бурысы. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, ҡайһы бер осраҡта ололар матди хәстәрлек менән генә булып, баланың рухи торошоноң ни хәлдә булыуына иғтибар бирмәй, кеше менән аралашыу, йәмғиәттә үҙен нисек тотоу ҡағиҙәләрен өйрәтеүҙе күҙ уңынан ысҡындыра. Һәр кешенең шәхси сиге (личная граница) була һәм бер кемдең дә уны боҙорға хаҡы юҡ. Ошо хаҡта ла әйтергә, аңғартырға, аңлатырға онотабыҙ. Үҙен рәнйеткәндәргә ҡаршы һүҙ әйтеүҙән тыйылған, уларға ҡаты итеп яуап бирергә белмәгән, әйберҙәренә һорауһыҙ тейгәндәрҙе урындарына ултырта белмәгән баланы мәктәптә лә, унан һуң, эштә, шәхси тормошонда ла ҙур ауырлыҡтар көтә. Ул һәр ваҡыт йәмғиәт өсөн ҡорбан ролен үтәйәсәк. Был хәлдән уны нисек араларға? Психологтар кәңәшенә ҡолаҡ һалайыҡ. Был хәлгә юл ҡуймаҫ өсөн улар ата-әсә телмәренән түбәндәге 7 фразаны алып ташларға кәңәш итә.**

# БАЛАҢДЫҢ РУХИ ТОРОШО



### "Ҡаңғыртма мине, бар, кит әле".

Сабый бер аҙ ҙурайып, тирә-яғын аңлы рәүештә күҙәтә башлағас, телмәре асылғас, уның бихисап һорауҙары барлыҡҡа килә. Үҙе әлегә аңлап етмәгән күп күренеште һәм әйберҙәрҙе белер өсөн ул ата-әсәһенә мөрәжәғәт итә. Эйе, ҡайһылыр осорҙа бындай һорауҙар иҫ киткес күп була. Ләкин ошондай ваҡытта ла баланың һорауҙарына яуап бирер урынға, уға ҡул һелтәп кенә ҡарайҙар икән, балала: "Мин эшкинмәгән, мин бер кемгә лә кәрәк түгел, мине ситкә этеп кенә ҡуйырға, миңә ҡул һелтәп ҡарарға мөмкин", тигән тойғолар барлыҡҡа килеүе мөмкин. Һәм артабан бик кәрәк саҡта ла, уға айырыуса ҡыйын булған саҡта ла ул ата-әсәһенә өндәшмәүе, килеп тыуған хәл тураһында әйтмәүе бар. Был иһә, үҙ сиратында, ҙур бәләләргә килтереүе лә ихтимал. Шуға күрә балағыҙҙың һәр бер һорауына ҡыҙыҡһыныу белдерегеҙ, бөтә эшегеҙҙе ҡуйып тороп, уның һорауына яуап биреүҙе, аңлатыуҙы маҡсат итегеҙ.

### "Әй, быларҙың барыһы ла ахмаҡлыҡ, иғтибарға алаһы ла түгел!"

Әгәр ҙә бала менән әңгәмәне "Мин генә дөрөҫ әйтәм, ә һин - юҡ", тигән мөнәсәбәттә алып бараһығыҙ икән, уның үҙ фекерен белдереү хоҡуғына сик ҡуяһығыҙ. Һөйләшеүҙе уның ниндәй дәлилдәре менән риза булыуығыҙ тураһында башлағыҙ ҙа, һуңынан: "Ә был хәлдә бына ошолай ҡарарға ла мөмкин бит әле. Бына, ҡара әле...". Былай эшләгәндә, балағыҙҙың фекере һеҙҙең өсөн мөһим икәнлеген аңғартаһығыҙ һәм шул уҡ ваҡытта ике яҡты ла ризалатҡан дөйөм бер фекергә килә алаһығыҙ. Дөйөмләп әйткәндә, үҙегеҙҙең оло булыуығыҙҙы, атай-әсәй икәнлегегеҙҙе өҫтөн ҡуйып, баланың фекерен "тапарға, юҡ итергә" тырышмағыҙ.

### "Һин бер ҡасан да..."

Балаға "һин һәр саҡ" йәки "һин бер ҡасан да", тип йыш ҡабатлаһағыҙ, һеҙ уны һаҡланыу йәки яраҡлашыу позицияһын һайларға мәжбүр итәһегеҙ. Ғәйепләү урынына, уға үҙегеҙҙең хис-тойғоларығыҙҙы аңлатырға тырышығыҙ. Мәҫәлән, "Һин һәр ваҡыт оҙаҡ йыйыныу арҡаһында мин гел генә эшкә һуңлайым", тип әйтер урынға: "Беҙ һуңлаған һайын, мине эштә әрләрҙәр тип ҡурҡам", тиеүегеҙ бөтөнләй икенсе төрлө яңғырай һәм баланы уйларға ла мәжбүр итә. Ғөмүмән, "һәр ваҡыт" һәм "бер ҡасан да" фразаларын телмәрҙән алып ташларға тырышырға кәрәк.

### "Шым-шым! Тыныслан әле!"

Балаға бындай һүҙҙәр әйтеүҙән тыйылығыҙ. Был тынысландырыу һүҙҙәре бөтөнләй кире һөҙөмтә тыуҙырырға мөмкин, сөнки уның артында баланың кисерештәренә ҡул һелтәп ҡарау тора. Шәхси сиктә һаҡлауҙың мөһим принциптарының береһе - балаға үҙ кисерештәрен, хис-тойғоларын күрһәтергә мөмкинлек биреү. Был рәүешле һеҙ уға тәбиғи булырға мөмкинлек бирәһегеҙ. Шуға күрә, уны тиҙерәк тынысландырырға тырышыу урынына: "Мин һинең ни тиклем күңелең төшкәнлеген аңлайым. Мин һиңә ярҙам итергә теләйем, ни өсөн илайһың, һөйлә әле миңә", тиеү күпкә дөрөҫөрәк.

### "Һинең теләгең миңә барыбер"

Был фраза менән һеҙ баланың эске иркен һындырып, тирә-йүндәгеләргә ярарға тырышҡан кеше генә "әүәләйегеҙ". Икенсе тапҡыр үҙенекен дәлилләргә тырышҡан баланы "Һинең теләгең барыбер миңә, мин яҡшыраҡ беләм", тип ҡырт киҫеү урынына, уның менән алтын урталыҡты табыу әмәлен эҙләгеҙ.

### "Был дөрөҫ түгел, был аҡылға һыймай"

Ә кем нәк һеҙҙең ҡарашығыҙ, фекерегеҙ дөрөҫ, ә уныҡы дөрөҫ түгел, тип әйтте? Ни өсөн һеҙҙең башҡарған эштәрегеҙ дөрөҫ, ә уныҡы - юҡ? Был хәҡиҡәтте кем билдәләгән? Һеҙҙең атай-әсәй булыу тәртибеме? Был рәүешле һеҙ балағыҙҙың инициативаһын юҡҡа сығараһығыҙ. Шуға күрә бында ла ике яҡты ла ҡәнәғәтләндергән ҡарарҙы табырға өйрәнегеҙ - баланы "һындырмағыҙ".

### "Һин рәхмәтле була белмәйһең, һин насар..."

Әгәр ҙә бер үк нәмәне даими рәүештә ҡабатлаһаң, һәр кем ошоға ышана башлай, тиҙәр. Ә бала бигерәк тә. Шуға күрә уны яманлаған, бөтөргән, кәмһеткән, бер нәмәгә ҡуймаған һүҙҙәрҙе йыш әйтәһегеҙ икән, тора-бара ул үҙенең ысынлап та шундай икәнлегенә ышанасаҡ.

Ә быға өҫтәп, үҙ балағыҙҙы икенсе балалар менән сағыштыра башлаһағыҙ, уның күңелендә төҙәлмәҫлек яра һаласаҡһығыҙ. Шуға күрә, "һин эшкинмәгән", "ҡулыңдан бер нәмә килмәй" һәм башҡа һүҙҙәр менән ташлаһыу урынына: "Ярай, була торған хәл, һәр кем шулай өйрәнә", тип әйтһәгеҙ, күпкә яҡшыраҡ буласаҡ.

✓ ***Иршат менән Зәлиә ата-әсәләренең көтөлмәгән тәҡдименә атҡа менгәндәй ҡыуанды. Нимә генә тимә, уларҙы Ҡаҙырша ауылындағы данлыҡлы Насибулла мулла олатай үҙе ҡунаҡҡа саҡырып хәбәр әйтеп ебәргән бит.***



Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

# ТУРАЙҒЫР ҺАБАҒЫ

(Хикәйә)

Иршат менән Зәлиәнең өйләнешеү хаҡында белдергән теләгенә ике яҡтан да ата-әсәләре аяҡ терәп ҡаршы торҙо. Яҡын да килмәнеләр. Тыңларға ла теләмәнеләр. Йәштәр иһә үҙҙәренсә эш итте, дөрөҫөрәге, ата-әсәләренең һүҙҙәрен ҡолағына ла элмәне. Район загсына барып никахтарын теркәргә ғариза бирҙеләр, туй үткәреү мөҙҙәтен дә билдәләнеләр. Кисә генә мәктәп партаһы артында ултырған балалар тимәҫһең үҙҙәрен.

Һәр ике яҡтың да егет менән ҡыҙға белдергән дәғүәләре бер төрлө һәм ҡәтғиҙәрҙән ҡәтғиерәк яңғыраны: "Беҙ һеҙҙең өйләнешеүегеҙгә ҡырҡа ҡаршы. Сөнки һеҙ яҡын туғандар. Башҡорттоң борондан ҡалған йолаһы буйынса егет менән ҡыҙға, ете ата айырылмайынса тороп, өйләнешеү яҙыҡ, гонаһ. Һеҙҙе дүрт ата ғына айыра. Әгәр ҙә был юлға барһағыҙ, балаларығыҙ зәғиф булып тыуасаҡ, ике яҡтан да тоҡомобоҙ ҡороясаҡ. Картуфтың картуфының бер үк сортлыһын бер үк ергә йыл һайын сәсһәң, ҡоторлаҡҡа әүерелә. Беҙгә аҡылы зәғиф, бәләкәй буйлы, йәмһеҙ ейән-ейәнсәрҙәр кәрәкмәй. Шуға күрә беҙ һеҙгә бер нисек тә фатиха бирә алмайбыҙ, ана, кеше бот сабып көләсәк..."

Ата-әсәләренең быңдай дәғүәһе егет менән ҡыҙҙы, киреһенсә, оторо ярһытып ҡына ебәрҙе. Быңдай һүҙҙәрҙе ишеткәндән һуң улар икеһе ярты көнгә юғалып торҙо. Аҙаҡ һәр икеһенең ата-әсәһе ҡашына килеп, икеһе бер тауыштан ятлап тиерлек алған бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы: "Атай-әсәй! Боронғо ғөрөф-ғәҙәтегеҙ менән үҙегеҙ генә йәшәгеҙ. Хәҙер ундай замандар үтте. Беҙ бер-беребеҙҙе бала сағыбыҙҙан алып яратабыҙ. Бөгөн килеп шуны аңланыҡ: бер-беребеҙһеҙ йәшәй ҙә алмайбыҙ. Беҙҙең мөхәббәткә бер кем дә ҡаршы тора алмаясаҡ. Әгәр ҙә рөхсәт итмәһәгеҙ, фатихағыҙҙы бирмәһәгеҙ, бәхетебеҙҙе үҙебеҙ ҡорасаҡбыҙ, Себергә, кәрәк икән сит илгә сығып китеп, үҙебеҙгә нисек кәрәк, шулай йәшәйәсәкбеҙ һәм барыбер бәхетле буласаҡбыҙ..."

Ауылдың өлкән йәштәге кешеләрен йәлеп итеп өгөтләүҙәр, аңлатырға тырышыуҙар бер нисек тә ярҙам итмәне. Хатта Иршат менән Зәлиәгә мәктәптә биологиянан һабаҡ биргән уҡытыусының "Төрҙәр анатомияһы, яҡын ҡандар ҡушылыуы патологияһы" тигән бер сәғәтлек лекцияһы ла егет менән ҡыҙҙың бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән ситкә сығып осто. Хатта заттарының шәжәрәһен дә төҙөп биреп ҡаранылар. Файҙаһыҙға. Уларҙың бер дәлиленә йәштәр ун дәлил менән яуап ҡайтарҙы. Шуларҙың иң замансаһы һәм кире ҡаҡҡыһыҙы: "Ышанмаһағыҙ, ана үҙегеҙ ауыҙ һыуығыҙ ҡоротоп яратып ҡараған Европа телесериалдарында ике туғандарҙың өйләнешеүе ҡәҙимге күренеш итеп ҡабул ителә..."

Егеттең ата-әсәһе Ҡадир менән Кәримә, ҡыҙҙың ата-әсәһе Самат менән Ғәлиә һуңғы сиктә шундай ҡарарға килде: берҙән-бер юл - Насибулла муллаға мөрәжәғәт итергә. Уларҙың ауылынан алыҫ булмаған Ҡаҙыршала йәшәй оло йәштәге аҡһаҡал. Ярҙам итә алһа, тик уның ғына ҡөҙрәте менән йәштәрҙе был яҙыҡ аҙымға барыу уйынан кире дүндерә алырҙар.

Насибулла мулла уларҙың районында ғына түгел, ғөмүмән, төбәктә һәм республикала, унан ситтә лә киң танылған абруйлы дин әһеле, арҙаҡлы шәхес, ил ағаһы. Төбәктә уның кешеләрҙе һауыҡтырыу, төрлө сирҙәрҙән арындырыу һәләтенә бәйле легенда-риүәйәттәр йәшәй. Уның хаҡындағы бәйәннамәләрҙең араһында шундайҙары ла бар: "Насибулла шәпле мулла, өшкөрөү, доға ярҙамында ғына түгел, донъяуи аҡылы, тормош тәжрибәһе, кеше тәбиғәтен тәрән белеүе, кинәйә, ым-ишара, кәрәк саҡта мәрәкә һүҙе ярҙамында әллә күпме кешене тормошонда яҙыҡ аҙымдан ҡурсалап алып ҡалған әүлиәләр затынан ул..."

Йәки булмаһа: "Бер мәл үҙ-үҙенә туҡтауһыҙ ҡул һалған берәүҙе Насибулла муллаға алып килгәндәр. Дин әһеле тәүҙә ат егеп арбаһына тегене ултыртып тауҙар ашаһына алып киткән. Бер урынға барып сыҡҡас атын туғарып менгән дә, һыбай килеш ҡулына сыбыртҡы алып, тегене ҡыуып йөрөтә, баҫтыра башлаған. Төнө буйына артынан ҡыуалаған, саҡ ҡына туҡтап ҡалһа, сыбыртҡының осо тегенең янбашын тағы яндырып алған. Һуҡҡан һайын мулла унан: "Тағы ла шулай итәһеңме?" - тип һорай икән. Теге әҙәм тәүҙә муллаға төрлөсә янап маташҡан да, һыбайлы тағы ла ҡатыраҡ эләктерә башлағас, ахыры: "Юҡ, мулла олатай, бүтән улай итмәйем, валлаһи", - тип илай-илай ялбара икән. Таңға телен арҡыры тешләп, ахмалға төшкән ир, мулланың менгеһе лә шыбыр тиргә батҡан. Таң атып килгәндә илай-илай тәүбәгә килгән үҙ-үҙенә ҡул һалыусы һәм был сиренән ҡотолған. Мулланың быңдай ысулының хикмәте шунда: кешене сыҙай алмаҫлыҡ үтә ауыр хәлгә ҡуйғанда ғына ул йәшәүҙең, ғүмерҙең ҡәҙерен шул тиклем аңлай икән..."

Балаларының яҙмышы өсөн уғата борсолған ата-әсәләр Насибулла муллаға кисекмәҫтән барырға ниәт итте. Иртәгәһенә үк Ҡадирҙың машинаһы менән аҡһаҡал йәшәгән Ҡаҙырша ауылына барып та еттеләр. Бәхеттеренә мулла ҡырҙа йылҡы көтөп йәйләүсе фермер улы янынан ҡайтып ҡына тора икән. Тәүҙә килеүселәр алдына йола буйынса аш-һыу ҡуйылды, ҡарттың йәйләүҙән алып килгән йәш ҡымыҙынан да ауыҙ иттеләр.

Янына килеүселәрҙе ике һүҙҙән аңлап өлгөрҙө мулла. Ыңғайы бер шундай тәҡдим дә индерҙе:

- Мин иртәгә иртүк йәйләүгә кире китәм. Балаларығыҙҙы иртә таңдан миңә ебәрегеҙ. Йәйләүгә минең менән барып, ҡымыҙ эсеп, ял итеп ҡайтырҙар...

Ҡарт шулай тине лә, һүҙем тамам, тигән ишара менән әпәр итеп, битен һыпырып та ҡуйҙы. Бына һиңә кәрәкһә! Ғәҙәттән тыш етди мәсьәләгә шулай еңел генә ҡараймы икән ни был атаҡлы Насибулла мулла тигәндәре? Уның ошондай анһат ҡына тәҡдименә риза булмаған ата-әсәләр ни тип әйтергә лә белмәне. Бер-береһенә ҡараштылар. Ыҡмыҡ килде. Улар мулланан бөтөнләй икенсе төрлө һүҙ, оҙон-оҙаҡ вәғәз көткәйне. Барыһы ла башын түбән эйҙе. Һуң, атаҡлы муллаға ҡаршы һүҙ күтәреп ултырырғамы ни? Шулай ҙа Ҡадир һүҙһеҙ ҡала алманы.

- Һуң, Насибулла ағай, беҙ бит һиңә аңлаттыҡ. Иршат менән Зәлиә яҡын ғына туғандар. Ана ултырған Самат минең ике туған ҡустым. Уларға өйләнешергә һис ярамай...

- Ә һин, ағай, уларҙы ҡунаҡҡа саҡырып, фатиха бирергә, ял итеп ҡайтарырға итәһең... - Быныһын инде Зәлиәнең атаһы Самат өҫтәп әйтте.

Саматтың үҙенә үпкә белдергән һымаҡ әйтелгән һүҙҙәрен Насибулла мулла бик еңел ҡабул итте. Һәр хәлдә, һиҙҙермәне. Сәсрәп китмәне. Йотто. "Балаларығыҙға кескенә сағынан тәрбиә бирмәгәнһегеҙ, ә үҙегеҙ килеп миңә үпкә белдереп ултыраһығыҙ. Үҙ-үҙегеҙгә үпкәләгеҙ", тип тә әйтә ала ине ул. Сытыймай ҙа әйтер ине. Әммә икенсе бер нәмәне аңлап тора аҡһаҡал: ата-әсәләрҙе уның янына балаларының киләсәге өсөн сикһеҙ хафаланыу, борсолоу алып килгән. Шуға күрә Саматтың һаҡһыҙыраҡ әйтелгән һүҙҙәренең сәбәбен дә аңлай мулла.

- Иншалла, бик ваҡытлы килгәнһегеҙ. Мин шуның өсөн дә балаларығыҙҙы иртәгә бында ебәрегеҙ, тинем бит. Ҡалғаны минең хәстәр...

Һикһәнен тултырһа ла, һаман да төҫ-һын ташламаған, баһадир кәүҙәле, күҙ ҡараштарына тәрән тормош аҡылы һеңгән аҡ һаҡаллы нурлы ҡарттың был һүҙҙәрен ишеткәндән һуң егет менән ҡыҙҙың ата-әсәләренең күңеленә йылы йүгергәндәй булды. Ҡарттың әле үҙе генә белгән сараһын улар легендаларҙа ғына һөйләнелгән кирәмәтенә бәйләне. Самат ҡыҙыулыҡ менән әйтелгән һүҙҙәре өсөн мулланан ғәфү үтенергә ынтылыпынтылып ҡараны ла, хужаның һис бер үпкәләүҙе белмәгән сифатын күҙ-ҡараштарынан аңлап, кире тыйылды.

Ҡунаҡтар Насибулла муллаға һәм үҙҙәрен самауыр сәйе менән һыйлаған Зөләйха абыстайына рәхмәт әйтеп, ҡайтыр яҡҡа юлланды. Юлда ҡайтҡанда үҙ-ара килешеп, шундай фекергә лә килделәр: Насибулла мулла янына Иршат менән Зәлиә Ҡадирҙың машинаһында үҙҙәре генә барасаҡ.

* * *

Иршат менән Зәлиә ата-әсәләренең көтөлмәгән тәҡдименә атҡа менгәндәй ҡыуанды. Нимә генә тимә, уларҙы Ҡаҙырша ауылындағы данлыҡлы Насибулла мулла олатай үҙе ҡунаҡҡа саҡырып хәбәр әйтеп ебәргән бит. "Мин уларҙы ике көнгә саҡырам, йәйләүгә апарам, тип тә әйткән, етмәһә.

Йәштәр был хәлде ата-әсәләренең өйләнешеүҙәренә ризалығы итеп тә ҡабул итте. Тимәк, уларҙың араһындағы боҙлоҡтоң ирей башлауына ишара был. Өйләнәсәктәр, бәхетле ғаилә ҡорасаҡтар. Атаһының Ҡаҙыршаға барыр өсөн машинаһын улына ышанып тапшырыуы Иршатты сикһеҙ ҡанатландырҙы. Ул иртә таңдан һөйгәнен өйҙәренән барып алды ла, юлға сыҡтылар. Уныһы ла әллә ҡасан уҡ тороп әҙерләнеп көткән. Бына бит, тип уйланы йәштәр, барыһы ла ыңғай яҡҡа китеп бара. Икенсенән, әле яңы урта мәктәпте тамамлаған егет менән ҡыҙ алдарындағы тотош ғүмерҙе тәшкил иткән киләсәктәре хаҡында бер ни уйларлыҡ хәлдә лә түгелдәр. Иң мөһиме: улар бер-береһен үлеп ярата, ә яратышҡан кешеләр мотлаҡ ғаилә ҡорорға тейеш. Ә ҡайҙалыр уҡырға барыу, һөнәр үҙләштереү мәсьәләһенә килгәндә, улар шулай уйлай: кеше тормошонда иң төп хәҡиҡәт - ул мөхәббәт, мөхәббәт бар урында кешегә бер нәмә лә ҡаршылыҡ була алмай. Етмәһә, хәҙерге заманда үҙенең алған юғары белеме буйынса эшләй алған кешеләр юҡ кимәлендә...

Тағы ла... Быныһын инде ғашиҡтар тик үҙҙәре генә белә... Бер-береһенә әйтмәһәләр ҙә... Тап улар Насибулла мулланың йәйләүендә ҡушыласаҡтар... Таҡтан йоп буласаҡтар... Шуның рәхәтлеген татыясаҡтар... Бер-береһен иң яҡындан тороп беләсәктәр... Улар быңдай ҡарарға әллә ҡасан уҡ килгән... Тик бына күңелдәре көҫәгән сәхрә, йәйләү ауҡанлығы, романтик ерлек кенә быға са осрамағанлыҡтан, ҡушылыуҙы ошоғаса һуҙып килделәр. Икәүләшеп бергә рәхәтләнеү мөҙҙәтенең килере ҡотолғоһоҙ ысынбарлыҡ, әммә ул мәл оҙаҡлаған һайын, ләззәтенең дә көсәйә барыуын тоя улар. Дөрөҫөн әйткәндә, егеттең ярһыулығын ошоғаса көскә тыйып килде ҡыҙ, төндә инде ул ҡаршы тора алмаясаҡ...

Иршат менән Зәлиәне Насибулла мулла үҙе үк урамға сығып, ихата ҡапҡаһын ҙур итеп асып, ололоҡлап, әйҙүкләп ҡаршыланы. Оло башын кесе итеп.

- Рәхим итегеҙ, йәштәр, килеп бик йәтеш иттегеҙ. Әбей, әбей, тим, самауырыңды яңырт, көткән ҡунаҡтарым килде, - тине лә ҡарт, еңел машина ихатаһына уҙып ҡунаҡлағас, ыңғайы бер ҡапҡаһын ябып та ҡуйҙы.

Шундайын оло, абруйлы кешенең үҙҙәрен шул рәүешле итеп ҡаршылауынан Иршат менән Зәлиә юғалып ҡалды. Көтмәгәйнеләр. Ихатаға инеп, машиналарынан төшкәс тә ғәйепле кешеләй баштарын эйеп тора бирҙеләр.

Йорт хужаһы егет менән ике ҡуллап күреште, ҡыҙҙың иһә арҡаһынан һөйөп ҡағып ҡына ҡалды.

- Һаумы, олатай...

- Әйҙә, тәүлә инеп инәйегеҙҙең сәйен эсеп алайыҡ та, артабан мин һеҙҙе йәйләүгә апарам...

- Йәйләүгә? Хәҙер үк китәбеҙме? - Егет менән ҡыҙ мулланың был тәҡдимен ҡыуанып ҡабул итте.

Сәй эскәндән һуң Насибулла мулланың тәҡдиме буйынса йәштәр машинаны уларҙың ихатаһында ҡалдырып, йәйләүгә ат арбаһына ултырып киттеләр. Иршат мулла олатаһына ат егеште, Зәлиә Зөләйха инәһенә үҙҙәре менән алып китергә тейеш булған әйберҙәрҙе, әүҡәт-монаятты төйнәште.

**(Дауамы бар).**

**✓ Ҡымыҙ етештереп, уны һатыу тимер юл буйында урынлашҡан башҡорт ауылдарының кәсебенә әйерелә. Шуға күрә лә башҡорттар ҡымыҙҙы шешәләргә тултырып, һатыуға сығарыр булғандар.**



ИНТЕРНЕТТАН



# МУНСА - ДАУА

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, артерия стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан күҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Эйнштейндың даһилыҡ сере уның баш мейеһенә бәйле - АҠШ-тың Флорида университеты эксперттары фаразлауынса, бөйөк ғалимдың баш мейеһенең формаһы бигерәк үҙенсәлекле була. Улар был асышҡа Эйнштейндың быҒаса бер ҡайҙа ла баҫылмаған баш мейеһе фотоларын тикшергәндән һуң килә. Стандарт ҙурлыҡта һәм ауырлыҡта булыуына ҡарамаҫтан, Альберт Эйнштейндың мейе бураҙналары ҡатмарлыраҡ булған. Маңлай өлөштәре лә ғәҙәти кешеләрҙекенән айырылып торғанға күрә ғалимдар ошондай фекергә килгән дә инде.

■ АҠШ-тың Аризона университеты хеҙмәткәрҙәре депрессия менән көрәшеүҙең ҡыҙыҡлы ысулын тәҡдим итә. Улар пациентты башын тышта ҡалдырып, йылытыу элементтары менән йыһазландырылған ҡыҙыу палаткала 2 сәғәт тотоп дауалап ҡараған. 38 градус йылылыҡтағы палаткала тәндә кәйефте яҡшыртыу өсөн яуаплы химик матдәләр бүленеүе яҡшыра икән. Был бетаэндорфиндар ауыртыуҙы баҫа, шулай уҡ кешегә ыңғай эмоциональ тойғолар кисерергә булышлыҡ итә. Был ысулды ҡулланып ҡарауға пациенттарҙың мунсанан физик ҡына түгел, ә психологик йәһәттән дә хәлдәре яҡшырыуы этәргес биргән.

■ Артыҡ күп йоҡларға ярамай, сөнки оҙаҡ йоҡлау һөҙөмтәһендә ҡанда шәкәр күләме арта. Артыҡ ауырлыҡтан яфаланыусы балаларҙы тикшергәндән һуң, ғалимдар ошондай фекергә килгән. Шулай уҡ аҙ йоҡлау ҙа организм өсөн зарарлы, был осраҡта инсулин секрецияһы ҡыҫҡарған. Филадельфияның балалар дауаханаһы эндокринологы Дорит Корен әйтеүенсә, глюкоза күрһәтестәре үҙгәреп тормаһын өсөн, тәүлегенә 7,5-8,5 сәғәт йоҡларға кәрәк.

■ Британия тикшеренеүселәре фекеренсә, төрлө проблемаларҙан ҡотолоу өсөн картиналар галереяһына йыш йөрөү ҙә етә. Бигерәк тә донъя һынлы сәнғәте шедеврҙары кеше психикаһына ыңғай тәьҫир итә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Клод Моне йәки Сандро Ботичелли кеүек бөйөк рәссамдарҙың һүрәттәрен ҡараған саҡта кешенең баш мейеһе әүҙемлеге кеше ғашиҡ булғандағы мейе торошона оҡшаған була. Бынан тыш, тикшеренеүҙә ҡатнашыусыларҙың ҡанында дофамин гормоны ла күберәк була, был гормон кеше ниндәйҙер кинәнес кисергәндә бүленә. Бындай реакция тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусының һәр береһендә күҙәтелә. Эксперттар әйтеүенсә, сәнғәт өлгөләре ҡурҡыу, тынысһыҙланыу кеүек тойғоларҙан арынырға һәм хатта ауыртыуҙан ҡотолорға ярҙам итә.

ХӘТЕРЛӘП...

**Ҡымыҙ борон-борондан башҡорт халҡының бәрәкәтле, шифалы эсемлектәренең береһе булып тора. Башҡорттар элек яҙ етеү менән малдарын йәйләүгә ҡыуған, йәй буйы ҡымыҙ эскән, шуның арҡаһында ла уларҙың һаулығы ныҡ булған, төрлө ауырыуҙарға бирешеп бармаған. Сөнки ҡымыҙ еңел үҙләштерелә торған аҡһымдарға, витаминдарға һәм микроэлементтарға бай.**

# БАШҠОРТТАРҘА ҠЫМЫҘ КӘСЕБЕ

Был шифалы эсемлек ашҡаҙан, үпкә, йөрәк ауырыуҙарын, нервы һәм эндокрин системаларын дауалауҙа, матдәләр алмашыныуын көйләүҙә, иммунитетты нығытыуҙа яҡшы дауа булып тора.

XIX быуаттың уртаһында ҡымыҙҙың кеше һаулығына шифаһын Рәсәйҙә лә аңлап ҡалалар. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән Башҡортостанға башҡорт ҡымыҙы менән дауаланырға халыҡ ағыла башлай. Ҡымыҙ һәм Башҡортостандың хозур тәбиғәте тынсыу ҡалаларҙан килгән кешеләргә һаулығын нығытыу өсөн шифахана ролен үтәй. 1890 йылда яҙыусы Сергей Аксаковтың ейәнсәре Ольга Аксакова Башҡортостанда (хәҙерге Бәләбәй районында) тәүге ҡымыҙ менән дауалау учреждениеһы төҙөй (хәҙерге "Аксаков" шифанахаһы). Ул саҡта шифахана "Кумысная колония О.Г. Аксаковой", тип атала. Артабан Шафран тимер юл станцияһы (хәҙерге Әлшәй районы) тирәләй башҡа "Ҡымыҙ колониялары" селтәре барлыҡҡа килә. 1898 йылда Андреевский шифаханаһы асыла.

Ольга Аксакованың шифаханаһындағы ҡымыҙ тураһында бына нимә тип яҙалар: *"Кумыс здесь, настолько нам известно, всегда был хорошим, благодаря хорошему пастбищу, хорошему подбору дойных маток и опытности приготовляющего кумыс башкир, работающего в колонии с самого ее основания".* Революцияға тиклем башҡорт ҡымыҙының даны бөтә Рәсәйгә генә түгел, сит илдәргә лә тарала. Инглиз Дж. Каррик башҡорт аттарын Англияға ла алып ҡайтып, унда ошо бәрәкәтле эсемлекте етештереүҙе юлға һалырға уйлай. Әммә Англия ерендә Башҡортостандағы кеүек тәмле ҡымыҙ килеп сыҡмай. Сөнки башҡорт ҡымыҙы башҡорт далаһында үҫкән үләндән генә шундай бәрәкәтле, шифалы сифаттар ала.

Башҡорт ҡымыҙын билдәле рус яҙыусылары үҙ итә. Лев Толстой Ҡаралыҡ йылғаһы буйындағы Һамар башҡорттарына килеп, ҡымыҙ менән һыйланырға яратҡан. Антон Чехов Башҡортостанға килеп, ҡымыҙ менән дауалана. Әйткәндәй, ул дауаланған шифахана бөгөн Чехов исемен йөрөтә (Әлшәй районында Чехов исемендәге шифахана).

Ҡымыҙ менән дауаланырға килгән кешеләрҙе "кумысник", тип атағандар. Әлбиттә Рәсәйҙең бөтөн төбәктәренә килгән меңләгән "кумысниктарҙы" шифаханалар һыйҙыра алмаған. Шуға улар тимер юлға яҡын булған башҡорт ауылдарында (мәҫәлән, Дәүләкән, Шишмә, Әлшәй районындағы башҡорт ауылдарында) ҡымыҙ менән дауаланғандар. Бынан тыш, башҡорттар ҡымыҙҙы тимер юл станцияларында юлаусы халыҡҡа һатҡан. *"Летом у каждой станции можно купить кумыс от башкир, приносящих этот напиток в бутылках для продажи ко всем поездам"*, - тип яҙылған Һамар-Златоуст тимер юлы буйынса урынлаштырылған юлъҡүрһәткестә.

Ҡымыҙ етештереп, уны һатыу тимер юл буйында урынлашҡан башҡорт ауылдарының кәсебенә әйерелә. Шуға күрә лә башҡорттар ҡымыҙҙы шешәләргә тултырып, һатыуға сығарыр булғандар. Бындай ҡымыҙҙы һаҡлау буйынса үҙенсәлекле технология барлыҡҡа килгән. 1915 йылда доктор Хейсин М.Л. башҡорттарҙың шешәлә ҡымыҙ әҙерләү ысулы тураһында бына нимә яҙа: *"После закупорки несут бутылки в теплую комнату и ставят их на полки. Под влиянием теплоты молоко бродит. Всю ночь с небольшими промежутками взбалтывают руками одну бутылку за другой... К 6 часам утра уже готов средний кумыс. Теперь его переносят в погреб, где охлаждают. Там его или кладут прямо на лед, если хотят прекратить в нем брожение, или на заранее постеленную солому, чтобы брожение продолжалось, хотя и очень медленно".*

Шиңгәккүл станцияһы (Шишмә районы) тирәһендә башҡорт ауылдары (Ябалаҡлы, Суҡраҡлы, Әлибай) ҡымыҙ кәсебе менән ярайһы уҡ яҡшы килем алыр булғандар. *"Для деревень, расположеных в кумысном районе, кумысный промысел составляет серьезный заработок. От 4000 кумысников, поселяющихся в деревнях, считая расход на каждую не менее 100 рублей и расход на разъезды каждого по 2 р., получим весь заработок для местного населения в сумме 408 000 рублей. Так что общий заработок от кумысного промысла почтенной суммы, приближающейся к полумиллиону рублей в лучший сезон"*, - тип яҙа Станкеевич тигән кеше 1912 йылда.

Башҡортостанда ҡымыҙ хәҙерге көндә яңынан популярлыҡ яулай башланы. Хәҙер ҡала супермаркеттарында уны йыл әйләнәһенә һатып алып эсергә була. Йәй көнө ҡымыҙ бигерәк тәмле була. Йәйге каникулдарҙа халҡыбыҙҙың борондан килгән бәрәкәтле, шифалы эсемлеге - ҡымыҙҙы эсеп, тәндәрегеҙгә көс-ҡеүәт алырға онотмағыҙ.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**




*Башҡорттар ҡымыҙ бешеп, уны шешәләргә тултырып, һатыуға әҙерләй. 20-се быуат башы.*




*Бейәләрҙе һауыу мәле. 20-се быуат башы.*



*Башҡорт ғаиләһе ҡымыҙҙы шешәләргә тултыра. 20-се быуат башы.*

ҺАБАҠТАР

# ҠУНАҠСЫЛ БУЛҺАҢ...

**Кеше яратмаған танышым бар минең. Яратмау ғына түгел, бөтә уңышһыҙлығында, бәхетһеҙлегендә гәйепләй ул эргә-тирәһендәгеләрҙе. Шул сәбәпле туғандары менән дә яҡынлығы юҡ. Күҙ тейгеҙә, боҙом эшләй тип, күрше-тирәһе менән дә аралашмай. Эш урынында ла шикләнә, ҡурҡа, барыһы ла уға аяҡ салған, уға тейешле аҡсаны башҡалар алған кеүек тоя. Һәр ваҡыт шик-шөбһә менән йәшәп, ҡайһы берҙә, ысын мәғәнәһендә, депрессияға бирелә. Шул ваҡыттарында уны үҙемә саҡырам. Бергәләп һөйләшеп, сәй эсеп, күңеле күтәрелеп ҡайтып китә.**



Яңыраҡ шылтырата. "Һин өйҙәме? Ҡоймаҡ ҡойҙом да, һиңә сәй эсергә барырға ине", - ти был. Ә мин тап ул йәшәгән йорт янында магазин буйлап йөрөйөм. "Сәйеңдә ҡуй һуң, хәҙер инәм", - тием. Танышым ҡырҡа баш тартты: "Беләһең дә инде - мин береһен дә өйөмә саҡырмайым. Ҡунаҡсыл түгелмен", - тине.

Шул ваҡытта ғына ошо бөхтә генә йәшәгән, кешенән йәшерерлек бер ниндәй насар ғәҙәте булмаған танышымдың, ысынлап та, үҙенең шәхси тормошон ете йоҙаҡ артында тотоуына иғтибар иттем. Был нимә - депрессияның бер төрөмө? Әллә, үҙе әйтмешләй, ҡунаҡсылһыҙлыҡмы?

Сәйгә тәм-том алдым да, фатирының шылтырағына баҫтым. Ҡыуып сығарманы, әлбиттә. Әйткәндәй, танышлығыбыҙ күптән булһа ла, өйөндә беренсе тапҡырмын. Ингәс тә, китап кәштәһендә "Төрлө халыҡтарҙың риүәйәттәре" исемле йоҡа ғына тышлы йыйынтыҡ күҙгә салынды. Танышым сәйен шыжлатҡансы, ошо риүәйәтте табып уҡып ишеттерҙем уға. Ул ниндәй һығымта яһағандыр, белмәйем. Әммә риүәйәт үҙемә бик оҡшаны.

"...Бер ҡатын бәйғәмбәргә иренең өйөнә йыш һәм күп ҡунаҡ алып ҡайтыуына зарланған. Аллаһ илсеһе бер нәмә лә әйтмәгән, әммә бер аҙҙан уларға ҡунаҡҡа барасағын иҫкәрткән.

Ҡатын да, ир ҙә бик ҡыуанған. Мул табын әҙерләп, бик йылы ҡаршы алалар. Бәйғәмбәр бер аҙ ултыра ла, ҡунаҡсыллыҡтары өсөн рәхмәт әйтеп, ҡайтырға була. Сыҡҡан ваҡытта ҡатындың ишек тупһаһына ҡарауын үтенә.

Ҡатын шулай эшләй һәм саҡ һуштан яҙмай: Бәйғәмбәрҙең артынан ҡуңыҙҙар, тараҡандар, ҡорттар һәм башҡа береһенән-береһе ҡурҡыныс һәм имәнес нәмәләр сыҡҡанын күрә. Шул ваҡыт Бәйғәмбәр артына әйләнә лә:

- Бына шулай... Килгән һәр ҡунаҡ артынан бөтә насар нәмә китә. Шуға күрә йортоғоҙға ингән һәр кешене яҡшы итеп ҡаршы алырға, хөрмәт күрһәтергә кәрәк. Аллаһы Тәғәлә ҡунаҡсыл йортто һәм уларҙың хужаларын ярата, - ти".

Ысынлап та, ҡунаҡ яратҡан кешеләрҙең йорто ҡотло ла, йылы ла, һәр ваҡыт тәмле ризыҡ еҫтәре аңҡып тора һәм... һәр ваҡыт йыйыштырыулы ла...

**Лена БАРЫЕВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Өс тыйылған уй

Мин уңыш ҡанундары тураһында семинарҙар үткәргәндә, уҡыу барышында һәр кем башынан ҡыуалап сығарырға тейешле өс фекерҙе һанауҙан башлайым:

1) "Эйе уның бер нисә ҡыҙыҡлы идеяһы бар, әммә мин 30 йыл инде тормошҡа икенсе төрлө ҡарайым. Ни өсөн миңә үҙ ҡарашымды үҙгәртергә һуң?" - тип уйлау ҡәтғи тыйыла!

2) "Эйе, бик ҡыҙыҡ, әммә был миңә ҡағылмай. Минең башҡаларҙа булмаған үҙ проблемам бар. Минең осрағым үҙенсәлекле" - тип уйлау ҡәтғи тыйыла! Һеҙҙең осраҡ башҡаларҙыҡынан бер нәмәһе менән дә айырылмай, уларҙың ысынбарлығы - һеҙҙең ысынбарлыҡ.

3) "Эйе, әммә..." тип уйлау ҡәтғи тыйыла! Ныҡлы рәүештә бер тапҡыр ҡарар ҡабул итегеҙ: һеҙ йә риза, йә юҡ, бер ниндәй урталыҡ булырға тейеш түгел.

### Аң торошо

Белемде алтынға әйләндерергә мөмкин. Был һеҙҙең һоро, күңелһеҙ тормошоғоҙҙо ҡыҙыҡлы итеүгә иң ҡыҫҡа һәм тура юл. Сере нимәлә? Файҙалы инаныуҙар булдырып, һәр кем лайыҡ булған күҙаллаған тормошон һорарға өйрәнеүҙә. Был - бик күп мөмкин булған һәм ҡыҫҡа юлдарҙың береһе. Әммә, белеүемсә, кешеләр ҡатмарлы һәм ауыр юлға өҫтөнлөк бирә - тырышлыҡ, ауырлыҡ менән яулаған уңыш һеҙгә үҙ күҙ алдығыҙҙа үҫергә ярҙам итә. Шуға кешеләр оҙайлы һәм ауыр вариантты һайлай.

Беҙгә рациональ аңды тап ошо эштең тормошоғоҙҙа төп ролде уйнамауына ышанырға мәжбүр итергә кәрәк һәм был бик еңелдән түгел. Бының өсөн аныҡ юлды һайларға һәм мәсьәләне ентекле өйрәнергә тейешбеҙ. Тәүҙә аңдың унышҡа илткән биш торошо менән танышасаҡбыҙ, тәгәрмәскә таяҡ тығып ҡамасаулап торған биш төп дошман һәм ерҙәге ожмахты эҙләгәндә өс мөһим союздаш менән танышырбыҙ. Артабан эшкә күсербеҙ. Идеялар һәм концепциялар - бик шәп, әммә беҙ уларҙы тормошҡа ашырмай тороп, уларҙан файҙа юҡ. Рухиәт матдилекте үҙ эсенә ала, шуға күрә ожмахты әле һеҙҙән алыҫ булмаған урын менән алмаштырыу зарурлығы юҡ. Әгәр беҙ Аллаһы Тәғәләгә ышанабыҙ икән, ул бер үк ваҡытта бөтөн ерҙә.

Шуға эшкә тотонорға ваҡыт. Беҙ идеаль тормошобоҙҙо "юл күрһәтеүсе йондоҙ" тип аталған ысул буйынса башлайбыҙ. Һуңынан газға баҫып, бизнеста даоның ете төп ҡанунын һәм ошо ҡанундарҙы кәсеткәүсе ете йогонтоно ҡарарбыҙ.

Ҙур тиҙлек йыйғас, илаһи һәм магик өлөштәргә ҡағылышлы мәлдәргә туҡталырбыҙ. Минең маҡсатым - һеҙҙән изге илаһ эшләү. Быйың өсөн һеҙгә ниндәйҙер ҙур нәмә һорарға кәрәк буласаҡ! Ахырҙа, әгәр беҙ Аллаһы Тәғәләгә оҡшатып яралтылғанбыҙ икән, ошо өҫтөнлөк менән уңайһыҙланмай ҡулланырға тейешбеҙ...

**Пьер МОРАСИ.**

ҒӘЖӘП ДОНЪЯ!

# ҠУРСАУЛЫ КӨМБӘҘ



Метеориттар - миллиард йылдар буйы Марс һәм Юпитер орбиталары араһында Ҡояш тирәләй әйләнгән емерек планеталарҙың ярсыҡтары. Төрлө дәүмәлдәге бихисап шул ярсыҡтар планеталар араһында осоп йөрөй һәм Ергә килеп бәрелә. Әгәр ҙә ки Ер һауа ҡабырсағы менән ҡапланмаған булһа, кешелек "күк снарядтары"нан зыян күрер ине. Метеориттар, атмосфера ҡатламына ҙур тиҙлек менән үтеп ингәндә, һауала тотҡарланып, меңәр градусҡа ҡәҙәр ҡыҙа һәм арттарында оҙон утлы ҡойроҡ ҡалдырып, ирей, яна башлай. Атмосфераның түбәнге тығыҙ ҡатламдарына шәберәк үтеп ингән һайын, метеорит һауаның арта барған ҡаршылығына осрай, хәрәкәте тотҡарлана һәм 10-20 километр бейеклектә, үҙенең йыһан тиҙлеген юғалтып, һауала "бата" тиергә лә була. Бында инде метеориттың йылыныуы һәм емерелеүе туҡтала. Унаң тирәһендәге ҡыҙған газ ҡабырсағы юҡҡа сыға, һәм ирегән ҡалдыҡтары тартыу көсө арҡаһында вертикаль рәүештә тиерлек, берәүгә лә зыян килтермәйенсә, Ергә ҡолай. Атмосфера беҙҙе йыһан һыуығынан да һаҡлай, сөнки асыҡ йыһанда температура - Цельсий буйынса минус 270,45.

"Беҙ Күк йөҙөн ҡаплауыс (һаҡлаусы түбә) түшәм кеүек итеп ярлттыҡ. Улар (кәферҙәр иһә Күк йөҙөнөң дәлилдәренән, Аллаһтың) аяттарынан баш тарта" (Әнбийә (Бәйғәмбәрҙәр), 32).

XX быуатта "ҡаплауыс түшәм"дең йәнә бер функцияһы билдәле була - 70-се йылдарҙа ғалимдар Ерҙе Ҡояштың зарарлы ультрафиолет нурҙарынан һаҡлап торған озон ҡатламы барлығын асыҡлай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, фреондарҙы самаһыҙ ҡулланыу озон ҡатламын йоҡарта һәм Төньяҡ менән Көньяҡ ҡотоптарҙа озон тишектәре барлыҡҡа килә. Ғалимдар фекеренсә, озон ҡатламының үҙгәреүе үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһына ла мотлаҡ йогонто яһаясаҡ. Ҡайһы бер ауыл хужалығы культураларының ундырышлылығы кәмей. Йәшәү шарттарының үҙгәреүе микроорганизмдарға, мәҫәлән, планктондарға - диңгеҙҙә көн итеүселәрҙең төп ризығына - кире йоғонто яһай. Ультрафиолет нурҙарҙың дозаһы артыуы кешенең иммунитет системаһын ҡырҡа насарайтыуы, тирене, күҙҙең мөгөҙсә шекәрәһен яндырыуы һәм катаракта, тире яман шеше кеүек етди ауырыуҙар тыуҙырыуы ихтимал.

Ер ниғмәттәрен рациональ файҙаланмауҙың һәләкәттәргә алып киләсәге тураһында Изге аят та хәбәр итә: "Кешеләрҙең ҡылмыштары арҡаһында ҡоро ер өҫтөндә лә, диңгеҙҙә лә тәртип боҙолдо. Ҡылған гонаһтарына күрә (Әхирәттә) бирелә торған язаларҙың бер өлөшөн (был донъяла) татытыр. Бәлки, улар тәүбә итерҙәр!" (Рум (Рум), 41).

# ЯМҒЫРҘЫҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ



Ямғыр болоттары тропосферала, атмосфераның иң түбәнге ҡатламында барлыҡҡа килә. Тропосфера ҡатламы ерҙән йыльна, шуға күрә Ергә яҡын температура 8-9 километр бейеклектәге $-30^{0}C$ температураға ҡарағанда күпкә юғарыраҡ. Болоттар ер өҫтөндәге һыу яткылыҡтарынан күтәрелгән пар арҡаһында барлыҡҡа килә. Һыуҙар өҫтөндәге ул тамсылар шул ҡәҙәр бәләкәй, улар үтә күренмәле еңел быу рәүешендә йылы һауа ағымдары менән күшыла һәм өҫкә үктала.

Болот эсендә һыу парҙары ҡуйыра. Билдәле булыуынса, был процесс өсөн ниндәйҙер тигеҙлек ҡатламы булыуы зарур. Быу һыу тамсыларына, боҙ кристалдарына әүерелә, ел менән күтәрелгән туҙан һәм сүпкә ултыра. Тамсыларҙың күләме һәм ауырлығы бик тиҙ арта, улар, болотта ҡала алмайынса, аҫҡа төшөп китә. Һыу парҙарын, туҙан кисәксәләрен күсереү функцияһын ел атҡара, йәғни, Изге Ҡөрьән буйынса, елдәр "ундырыш килтерә": "Беҙ ундырыш килтереүсе елдәрҙе яһаныҡ, Күктән ямғыр яуҙырҙыҡ; шулай итеп, һеҙҙең һыуһау ихтыяжығыҙҙы баҫтыҡ, ләкин һеҙ ул һыуҙарҙы һаҡлай алмайһығыҙ" (Хижр (Хижр иле), 22).

Елдең болоттар хасил итеүҙәге роле фәндәр үҫешкәс кенә өйрәнелә. Изге аятта елдең үҫемлектәрҙе һеркәләндереү вазифаһы хаҡында ла әйтелә. Ел үҫемлек сәскәләрен һеркәләндерә, саң-һеркәләрҙе алыҫ-алыҫтарға күсерә.

**Усман НУРИЕВ.**



## 10 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Магомаев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "София". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Сын". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает все!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Это моя профессия. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**10.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 Атлас Баженова. [12+]**
**16.45 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Нарушение правил". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 "Бай". [12+]**
**21.00 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Мариуполь. Возвращение". [16+]**
**0.00 Х/ф "Мой друг мистер Персиваль". [6+]**
**2.30 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.00 История одного села. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Следопыт. [12+]**
**5.30 Вечерний телецентр. [12+]**

## 11 ИЮЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Магомаев". [16+]
0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "София". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Сын". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает все!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Это моя профессия. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 23.45, 4.45 "Курай даны". [12+]**
**11.00, 17.00 "Автограф". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00, 5.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.30 Т/с "Нарушение правил". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 Елкән. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**0.00 Х/ф "Как прогулять школу с пользой". [12+]**
**2.45 Спектакль "Зятек". [12+]**
**5.30 Вечерний телецентр. [12+]**

## 12 ИЮЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Магомаев". [16+]
0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "София". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Сын". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает все!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Это моя профессия. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**10.00 Әлләсе... [6+]**
**10.45, 23.45, 3.15 "Курай даны". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]**
**16.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Нарушение правил". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 Тормош. [12+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Автограф". [12+]**
**0.00 Х/ф "Зависть Богов". [16+]**
**1.30 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**3.30 Бәхетнамә. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.30 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 13 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Магомаев". [16+]
0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "София". [16+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Сын". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает все!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Это моя профессия. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Преображение. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 Т/с "Нарушение правил". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 Башкорттар. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ковчег". [12+]**
**1.45 Спектакль "Близнецы". [0+]**
**4.00 "Курай даны". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Спортивная история. [12+]**
**5.30 Вечерний телецентр. [12+]**

## 14 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.30 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Творческий вечер Алексея Рыбникова. "Через тернии к звездам". [12+]
23.30 Д/ф "Джим Моррисон - Последние дни в Париже". [18+]
0.35, 1.15, 1.50, 2.25, 3.00, 3.35, 4.10, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.40, 21.35 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.05 Д/ф "Веймарская республика". [16+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.50 Торжественная церемония открытия XXXII Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
23.55 Х/ф "Танец для двоих". [12+]
3.25 Х/ф "Обменяйтесь кольцами". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Это моя профессия. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30 Д/ф "Избранный судьбой" . Нугуман Мусин". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00, 16.45, 19.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**12.15 Преображение. [12+]**
**12.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**13.45 Үткән гүмер. [12+]**
**14.15 "Курай даны". [12+]**
**15.00 Лит-ра. [6+]**
**15.30 "Физра". [6+]**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Круиз-контроль". [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жизнь одна". [12+]**
**2.15 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**
**6.00 Аль-Фатиха. [12+]**

## 15 ИЮЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Поехали!" [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Прерванный полет Гарри Пауэрса". [16+]
14.15 Т/с "Вариант "Омега". [16+]
17.00 Д/ф Премьера. "Султанат Оман. Аравийское чудо". Фильм 2-й. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Поём на кухне всей страной". [12+]
19.55 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.05 Премьера. "Леониду Агутину - 55". Концерт в Зеленом театре. [12+]
0.55, 1.35, 2.10, 2.45, 3.20, 3.55, 4.30, 5.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.30, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.30 Т/с "Водоворот". [12+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Из чувства долга". [12+]
1.10 Х/ф "Память сердца". [12+]
4.30 Х/ф "45 секунд". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Байтус". [6+]**
**10.45 "Семәр". [6+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Верность". [12+]**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Т/с "Желтоухий". [12+]**
**3.30 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

## 16 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.35, 0.15, 0.55, 1.30, 2.05, 2.40, 3.15, 3.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.10 Д/ф Премьера. "Михаил Пуговкин. Житие мое". К 100-летию любимого артиста. [0+]
15.10 Х/ф "Свадьба в Малиновке". [0+]
17.00 Д/ф "Кто, кроме нас". Специальный репортаж. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". [12+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с "Серебряный волк". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
6.10, 1.30 Х/ф "Отпуск летом". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.30 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.30 Т/с "Водоворот". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.13 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 М/с "Нурбостан". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Д/ф "Избранный судьбой" . Нугуман Мусин". [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30, 4.15 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 "Расскажи, Курай..." Концерт Айнура Аминева. [12+]**
**18.30 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**19.00, 3.30 Әлләсе... [6+]**
**19.45 Д/ф "Уфимский хоспис. История создания". [12+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Преображение. [12+]**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Х/ф "Принцесса специй". [12+]**
**0.30 Спектакль "Последние". [12+]**
**3.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**

✓ *2023 йылда Башҡортостан университеттары бюджет урындарға 14 886 абитуриентты ҡабул итергә йыйына, был уҙған йылға ҡарағанда 512-гә күберәк. Ә илдең юғары уҡыу йорттарында бөтәһе 626 мең бюджет урыны бар.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 8 ИЮЛЬ - БӨТӘ РӘСӘЙ ҒАИЛӘ, МӨХӘББӘТ ҺӘМ ТОҒРОЛОҠ КӨНӨ



"(...) бәләкәй сағында беләккә ауыр, үҫкәс, йөрәккә ауыр"



"Ҡулында бар - (...), ҡулында юҡ - ҡомағый"

Рәсәй-ҙәге ҡала-курорт

Оло ир

Менделеев таблицаһында 11-се

Кеҫ һынаш

"Татыу булһа (...), ары торһон алтыһың"

"Атаға ул булмаһаң, (...)ға ҡол булырһың"

1

"Һәр һаҡаллы (...)ың булмаҫ"

⌘

Буйы бәләкәйгә кәрәк ҡоролма

"Туйҙым" тигән (...) туғыҙ мөсәй кимергән"

Үҫемлек "башланғысы"

Ергә ҡаҙылған "һарай"

"Ҡапҡа ауыҙына (...) килһә, ҡабам менән орсоғом; Кейәүем менән ҡыҙым килһә, һабам менән турһығым"

Крәҫтиәндең аяҡ кейеме

"(...) алдым - һөйөндөм, һалмаһына төйөлдөм"

Иллегә илле

Үҙендән оло ир кеше

Ҡымыҙ, бал "башланғысы"

Ярты йәшкә тиклемге мышы

"Бохар даны менән буҙ үтер, ата даны менән (...) үтер"

2

Һурпала бешерелгән йәймә

Һан

Автомобиль маркаһы

Насар гәзәтләләр бөлмәгән нәмә

Башҡортостандағы йылға

"Осорғос" ағза

Башы - күн, ҡунысы - тула

Эштең тәртибе

Йорт һаҡсыһы

Даға менән биҙәлгән

Эре япраҡлы үҫемлек

3

Күл тирәһендәге үҫемлек

"Ҙ" хәрефенә һүҙ

Алмала "өң" яһаусы

"(...) өйө - айыу өңө"

"Өйҙәш менән торғансы (...) менән тор"

Һыу буйы ағаслығындағы асыҡ ер

Кавказ сәсәне



"Ҡырҡ улың булғансы, ҡаптыр (...)ең булһын"

"Ҡояш янында йылылыҡ, (...) янында изгелек"

4

⌘

Уны ҡыш әҙерләйҙәр

"(...) барҙа ир таны, атың барҙа ер таны"



"Атанан (...) тыуһа ине, ата юлын ҡыуһа ине, Биленә һаҙаҡ быуһа ине, Битенә килер оятты үҙе белеп йыуһа ине"

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**25-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тәңкә. Бәпембә. Йыһан. Турта. Оҫҡон. Мурҙа. Муҡса. Тәгәс. Бөтнөк. Ранчо. Тоҡ. Сәрмә. Ара. Ауыл. Урман. Кишер. Наян. Күгүлән. Артыш. Башҡоҙа. Боланут.

**Вертикаль буйынса:** Мәтрүшкә. Туҡранбаш. Автопарк. Болт. Үт. Амеба. Тәпәй. Түләү. Аҡса. Һаҙанаҡ. Инә. Андыҙ. Әсә. Аят. Оят. Сауна. Әрйә. Әрем. Нәс. Әрнеш.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Июль (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (22) дүшәмбе | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 18:55 | 21:47 | 23:17 |
| 11 (23) шишәмбе | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 18:54 | 21:46 | 23:16 |
| 12 (24) шаршамбы | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 18:54 | 21:45 | 23:15 |
| 13 (25) кесе йома | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 18:53 | 21:44 | 23:14 |
| 14 (26) йома | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 18:52 | 21:43 | 23:13 |
| 15 (27) шәмбе | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 18:51 | 21:42 | 23:12 |
| 16 (28) йәкшәмбе | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 18:50 | 21:41 | 23:11 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*


# К ЕДИНОМУ ДНЮ ГОЛОСОВАНИЯ 10 сентября 2023 года

МБУ "Издательский дом "Уфа" сообщает о предоставлении на платной основе печатной площади в газетах "Киске Өфө", "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости" и "Уфимская неделя" для размещения агитационных материалов зарегистрированных кандидатов в депутаты Государственного Собрания-Курултая Республики Башкортостан седьмого созыва, представительных органов местного самоуправления городских округов, муниципальных районов, городских поселений, сельских поселений Республики Башкортостан. Стоимость 1 кв. см - 60 рублей.

Стоимость размещения агитационных материалов на сайтах **ufaved.info, vechufa.ru, pressaufa.ru** составит 30 тысяч рублей за статью до 6 тысяч знаков. Цены указаны с учетом 20% НДС.

**По вопросам сотрудничества обращаться по адресу: г. Уфа, ул. Революционная 167/1, по тел. 216-35-39, на эл.почту vureklama2007@mail.ru.**

*Реклама*


ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ЙҮТӘЛДЕҢ БЫЛ ТӨРӨНДӘ...

**Тәмәкесе йүтәленән ярҙам итеүсе саралар, йәғни үләндәрҙән ошондай дауалар әҙерләргә мөмкин.**

## Беренсе ысул

Был дауаны әҙерләү өсөн бер литр кәстрүлгә 1 стакан балан һалып, өҫтөнә ҡайнатылған таҙа һыу йәки ҡар һыуын ҡойорға һәм 10-20 минут тирәһе талғын утта быҡтырырға. Килеп сыҡҡан эсемлекте термосҡа ҡойоп, 2 сәғәт төнәткәндән һуң, бер нисә ҡат марля аша һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан ҡайнатмаға 1 балғалаҡ бал ҡушып эсергә.

## Икенсе ысул

Таҙартылған торманы ҡырғыстан үткәреп, марля аша һутын һығып алырға кәрәк. Тын юлдарынан ҡаҡырыҡ сығарыу өсөн торма һутына шыйыҡ бал ҡушып, ас ҡарынға 1-2 ҡалаҡ эсергә.

## Өсөнсө ысул

Үпкәне һәм ҡурылдайҙы таҙартыу өсөн 1-әр өлөш үгәй инә үләне япрағы, әнис орлоғо, 2-шәр өлөш кейәү үләне һәм бесәй тырнағы (алтей) тамыры, 5 өлөш татлы тамыр (солодка обыкновенная) кәрәк. Барыһын да ваҡлап, быяла банкаға һалып болғатырға. Шунан бер ҡалаҡ йыйылмаға бер стакан таҙартылған һалҡын һыу ҡойоп, йылы урынға ҡуйығыҙ. 2 сәғәт үткәс, ҡайнар хәлгә еткереп, уттан алырға һәм термоста 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне һөҙөп, ас ҡарынға көнөнә 3-4 тапҡыр йылы көйөнсә сирек стакан эсергә.

## Дүртенсе ысул

1 өлөш мәтрүшкә, 2 өлөш бесәй тырнағы тамыры, үгәй инә үләне сәскәһе һәм япрағын ҡушып, шуның 1 ҡалағына ике стакан һыу ҡойорға. Талғын утта ҡайнар хәлгә еткереп, термоста 2 сәғәт тоҡтас, марля аша һөҙөргә һәм 1-әр балғалаҡ бал менән әфлисун ҡабығы ҡушырға. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 100-әр грамм эсергә. Бындай таҙарыныу ысулын 5-9 көн ҡулланырға.

**Был халыҡ ысулдарын бауыр, бөйөр, бәүел юлдары, киҫкен гепатит, энтерит, энтероколит ауырыуҙары, ашҡаҙан һәм бөйән сей яралары, дауамлы аллергия менән интеккәндәргә, йөклө һәм имеҙгән ҡатындарға, 15 йәштән бәләкәй балаларға ҡулланыу тыйыла. Табип менән кәңәшләшергә онотмағыҙ!**

**Гөлназ ТАҺИРОВА әҙерләне.**

*ИҒТИБАР!*

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫ САҠЫРА

2023 йылда Башҡортостан университеттары бюджет урындарға 14 886 абитуриентты ҡабул итергә йыйына, был уҙған йылға ҡарағанда 512-гә күберәк, тип хәбәр итә "Аңлатабыҙ. Башҡортостан" телеграм-каналы. Ә илдең юғары уҡыу йорттарында бөтәһе 626 мең бюджет урыны бар, шул иҫәптән 36 меңдән ашыуы - яңы төбәктәрҙә.

260 000 абитуриент шәхсән үҙе, почта аша, юғары уҡыу йорттарының мәғлүмәт системалары аша һәм "Һанлы иҡтисад" милли проекты сиктәрендә үҫеш алған "Уҡыу йортона онлайн уҡырға инеү" суперсервисы аша документтарын тапшырған. Унын менән 126 000 кеше файҙаланған, 400 000-дән ашыу ғариза бирелгән. Вице-премьер Дмитрий Чернышенко сервистың хәүефһеҙ һәм мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүҙә юғары тиҙлеккә эйә булыуын билдәләне. Уға меңдән ашыу уҡыу йорто тоташҡан. Һанлы профиль булдырыу һөҙөмтәһендә абитуриентҡа мәғлүмәттәрҙе ҡулдан индереү кәрәкмәй. Ғаризаны 1,5-5 минут эсендә тапшырырға мөмкин. Ҡабул итеү кампанияһы 25 июлгә тиклем дауам итә.

*ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ*

# ОҪТА ҠУЛДАР МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Башҡортостандың Милли музейында "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре берекмәһенең 60 йыллығына арналған күргәҙмә үҙ эшен дауам итә.**



"Башҡорт биҙәү-ҡулланма сәнғәте: "Ағиҙел"дең ҡул оҫталығы даны" экспозицияһында ағастан эшләнгән һәм ҡулдан биҙәлгән сувенир, һауыт-һаба, һандыҡ, милли кейем һәм милли биҙәктәр ҡулланып тегелгән көндәлек кейем, балаҫ һуғыу өлгөләре, сигелгән әйберҙәр һәм башҡа төрлө башҡорт халҡы кәсептәре өлгөләрен күрергә мөмкин. Һәр әйбер нәзәкәтле ҡул эше булыу менән бер рәттән, ҡабатланмаҫ үҙенсәлеккә эйә, бай үҫемлек биҙәктәре ҡулланып, башҡорт орнаменты стилендә эшләнгән.

Бөгөнгө көндә этник стилдәге, милли колоритлы әйберҙәр зур һорау менән файҙаланыла. Был тенденция кейемдә лә, биҙәнеү әйберҙәрендә лә сағыла. Шулай уҡ күптәр өйөн биҙәүҙә лә милли орнаментлы әйберҙәргә өҫтөнлөк бирә. Ә "Ағиҙел" етештергән һәр әйбер бөгөнгө заман интерьерына яраҡлашып, уны тулыландырып тора.

Быны күргәҙмәне асыу тантанаһында ҡатнашҡан "Бәхет биләмәһе" хәйриә фондының попечителдәр советы рәйесе Каринә Хәбирова ла һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Бөгөнгө көндә күптәр үҙен этник әйберҙәр менән уратып алырға тырыша, сөнки улар халыҡтың, үҙең йәшәгән ерҙең көсөн бирә, йолалар һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен белергә ярҙам итә", - тине ул үҙ сығышында. Шулай уҡ Каринә Владимир ҡыҙы барыһын да күргәҙмәне килеп ҡарарға һәм Башҡортостандың мәҙәниәте һәм йолалары хаҡындағы белемдәрен арттырырға саҡырҙы.

"Ағиҙел" дәүләт унитар предприятиеһы - Башҡортостанда традицияларҙы, халыҡ ижадын һаҡлаусы һәм уны киләсәк быуынға бөтә тулылығында тапшырыусы берҙән-бер ойошма. Унда үҙ эшенең оҫталары булған рәссамдар, тегеүселәр, дизайнерҙар һәм башҡа һөнәр эйәләре эшләй. Һәм нәҡ уларҙың оҫта ҡулдары аша тыуған матурлыҡ "Ағиҙел"дең данын булдыра ла инде.

**Гөлназ МАНАПОВА**

# КЕЛӘМ НИ ҺӨЙЛӘЙ?

**X Рәсәй һәм Беларусь төбәктәре форумы сиктәрендә асылған "Дуҫлыҡ урамы" этник мәҙәниәттәр фестивалендә үҙенсәлекле проект - "Дуҫлыҡ келәме" менән таныштырҙылар.**

2023 йылдың 15 майында, халыҡ-ара ғаилә көнөндә, Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто Рәсәй һәм Беларусь төбәктәре форумы уңайынан "Дуҫлыҡ тирмәһе" этник мәҙәниәт марафонын башлап ебәргәйне. "Марафондың төп маҡсаты "Дуҫлыҡ келәме"н баҫыу ине. Сөнки келәмдәрҙә, панноларҙа һәм ошондай япмаларҙа халыҡтың тарихы сағыла, - тип билдәләнеләр Халыҡтар дуҫлығы йортонда. - Проектта Халыҡтар дуҫлығы йортоноң тарихи-мәҙәни үҙәктәре белгестәре, Башҡортостан оҫталары ҡатнашты. "Дуҫлыҡ келәме"нә Башҡортостан Республикаһында йәшәгән халыҡтарҙың милли орнаменттары төшөрөлдө".

"Дуҫлыҡ келәме"нә Башҡортостан белорустары ла биҙәк һалған. Аҡ төҫ сафлыҡты, ә ҡыҙыл төҫ - ҡанды, ҡояшты һәм йәшәү көсөн аңлата. Белорус халҡында йыш ҡына байлыҡ һәм муллыҡ теләйҙәр. Келәмдәге биҙәк байлыҡты символлаштыра. "Дуҫлыҡ келәме"н Рәсәй һәм Беларусь төбәктәре форумы көндәрендә, 26-28 июндә, "Дуҫлыҡ урамы" фестивале биләмәһендә урынлашҡан "Дуҫлыҡ тирмәһе"ндә күрергә мөмкин ине. Көндөҙ "Дуҫлыҡ тирмәһе"ндә балаҫ һуғыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо, ә кисен бөтә ҡунаҡтар өсөн "Дуҫлыҡ келәме" мотивтары буйынса махсус мультимедиалы шоу күрһәтелде.

# МИНИСТР - ТЫУҒАН ЯҒЫНДА

**Бөрйән районында Ырғыҙлы ауылының 270 йыллығы уңайынан башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары ҡатнашлығында концерт үтте. Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова "Атайсал" проекты сиктәрендә яҡташтарына йыр-моң байрамы бүләк итте.**

Ведомстводың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, концертта Башҡортостандың халыҡ артисы Рәсүл Ҡарабулатов, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Заһир Иҫәнсурин, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәнис Алтынбаев, Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты Гөлшат Ғирфанова ҡатнашты. Байрамдың көтөп алынған ҡунаҡтарының береһе Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Радик Юлъяҡшин булды.

Бөрйән районының Ырғыҙлы ауылы - республикабыҙҙың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованың тыуған төйәге. "Атайсал" проекты сиктәрендә ул өсөнсө йыл рәттән асыҡ һауала концерт үткәреүҙе ойоштора. Унан алдараҡ Әминә Шафиҡова ике балалар бейеү коллективына сәхнә костюмдары, "Умырзая" ансамбленә мандолиналар һәм теген машиналары бүләк иткәйне. Бөрйән районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Клара Теләүбаева әйтеүенсә, Әминә Ивнәй ҡыҙы был юлы ла буш ҡул менән килмәгән. Ведомство етәксеһе Бөрйән районының мәҙәниәт өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының Маҡтау грамоталары һәм Рәхмәт хаттары тапшырҙы. Шулай уҡ Яңы Собханғол ауыл мәҙәниәт йортоноң "Ағиҙел һылыуҙары" һәм "Инсебикә" бейеү коллективтарына сәхнә костюмдары бүләк итте. Быйыл Ырғыҙлы ауылында ойошторолған концерт Йәштәр көнөнә тура килде, шуға бында Бөрйәндән генә түгел, күрше районДарҙың халҡы ла әүҙем йыйылды.

# ҺЫЛЫУҘАР ЯРЫШЫ

**Башҡорт дәүләт филармонияһында "Башҡортостан гүзәле-2023" Бөтә Рәсәй матурлыҡ һәм традициялар конкурсының финалы уҙҙы. Финалда бөтәһе 18-35 йәшлек 17 гүзәл зат ҡатнашты, тип хәбәр итте ойоштороусылар.**

Гран-призы Ейәнсура һылыуы Илүзә Вәлитова яуланы. Енеүсегә спонсорҙарҙан ҡиммәтле бүләктәр һәм 100 000 һумлыҡ сертификат тапшырылды.

"Russian Beauty - Bashkortostan 2023" номинацияһында гран-приға, 50 000 һумға һәм "Miss Beauty Russia 2023" Бөтә Рәсәй матурлыҡ конкурсы финалында ҡатнашыу хоҡуғына Әбйәлил районынан Зарина Йәнбирҙина лайыҡ булды.

Беренсе урынды Сибайҙан Силәүә Миҙәтҡәлина алды, икенсе урынды Сорготтан Зөлфиә Мостафина һәм Баймаҡ районынан Гөлнара Ҡазарбаева бүлеште. Ә өсөнсө призлы урындарҙы Әлиә Хөснөтдинова (Ҡырым Республикаһы), Назгөл Йомашева (Силәбе өлкәһе) һәм Илнара Лоҡманова (Әбйәлил районы) яуланы.

Үҫмерҙәр араһында гран-призы Шишмә районынан Гөлназ Мәзитова алды һәм "Рәсәйҙең йәш һылыуҡайы" конкурсының финалына юллама менән бүләкләнде. Төркиәгә халыҡ-ара конкурсҡа юллама һәм 1-се урын - Эльвина Фәйрушинала, икенсе урында - Учалынан Алтынай Әхмәтова.

"Башҡортостан гүзәле" конкурсы директоры һәм режиссёры Айгөл Үтәгәнова быйылдан башлап Башҡортостанда "Йәш Рәсәй һылыуҡайы", "Miss Beauty Russia 2023" кеүек ил кимәлендәге һәм халыҡ-ара гүзәллек конкурстарының рәсми вәкиле. Көҙ көнө Өфөлә Мәскәүҙә уҙғарылған абруйлы бьюти-шоу өсөн һайлап алыу этабы була. Ә декабрҙә, ғәҙәттәгесә, иң сибәр Башҡорт Ҡарһылыуын һайлайҙар.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪЫҢ КҮП БУЛҺА...

## дошманың үҙе үлер

Ғәҙел кеше үҙенә ҡаты, башҡаларға йомшаҡ булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп ир-егеттәр биттәге уймаҡҡа ғашиҡ булып, яңылыш ҡына ҡатын-ҡыҙҙың үҙен кәләш итеп алып ҡуя.

**(Стивен Ликок).**

Гел генә уңышлы алдау өсөн бер кемдең дә хәтере етмәйәсәк.

**(Авраам Линкольн).**

Доға ҡылыу өсөн ышаныу кәрәкмәй, ышаныу өсөн доға ҡылыу кәрәк.

**(Франсуа Мориак).**

Алҡыштар ишетер өсөн, йә һәр кеше аңларлыҡ еңел, йә бер кеше лә аңламаҫлыҡ ауыр нәмә яҙырға кәрәк.

**(Вольфгант Амадей Моцарт).**

Көслө рухлы булыр өсөн көн һайын ике батырлыҡ эшләргә кәрәк. Мин шулай эшләйем дә: иртән торам һәм кис йоҡларға ятам.

**(Сомерсет Моэм).**

Мин сәләмәтмен һәм оҙаҡ йәшәйем, сөнки бер тапҡыр ҙа тәмәкегә лә, рюмкаға ла, ҡатын-ҡыҙға ла тейгәнем булманы... Ун йәшкә хәтлем...

**(Джордж Мур ).**

Ҡатын-ҡыҙ күҙҙәренә "ҡом һибеүҙе" ярата. Ҡом күберәк булған һайын, ул күҙҙәрен нығыраҡ аса.

**(Альфред де Мюссе).**

Нимәгә кешене насарлап һөйләү кәрәклеген мин аңламайым. Яуызлыҡ эшләргә теләһәң, уның турала берәй ысынбарлыҡты әйт.

**(Фридрих Ницше).**

Оптимист беҙ иң яҡшы донъяла йәшәйбеҙ, тип уйлай. Пессимист быны белә.

**(Роберт Оппенгеймер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт университет профессоры Мэйдзи эраһында йәшәгән Нан-ин исемле япон аҡыл эйәһенә килгән.**

**Нан-ин сәй яһауы менән булған. Ҡунаҡтын кәсәһен тултырһа ла, барыбер ҡойоуҙы дауам иткән. Профессор түҙелеп торған сәйгә оҙаҡ ҡараған да, түҙмәйенсә йәнә ҡысҡырған:**

**- Тулған бит инде. Бүтән һыймай!**

**- Бына ошо кәсә кеүек, - тип яуап биргән Нан-Ин,- һеҙ ҙә үҙ уйҙарығыҙ, фекерҙәр, ышаныуҙар менән тулыһығыҙ. Кәсәгеҙҙе бушатмаҫаҡ, мин һеҙгә нисек аҡыл өйрәтергә тейешмен? "**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
7 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 900